К 82.3(2Рб 2Баш)
С60



Р. Солтангәрәева,
Ә. Сөләймәнов

# Башҡорт халыҡ йола уйындары

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЛЫҒЫ
РЕСПУБЛИКА ХАЛЫҠ ИЖАДЫ ҮҘӘГЕ ЭРГӘҺЕНДӘГЕ
РЕДАКЦИЯ-БАҪТЫРЫУ БҮЛЕГЕ

2 75
Б 3

Р.Ә. Сайтангәрәева,
Ә.М. Сөләйманов

# Башҡорт халыҡ йола уйындары

50083 - 1144



ЧЗ
Учалинская
ЦБ

ӨФӨ — 1997

ББК 82.3 (2 Баш)
С 60

Музыка мөхәррире **Салауат Сәлмәнов**

С 60 Башҡорт халыҡ йола уйындары / Автор-төҙ. Р. Ә. Солтангәрәева, Ә. М. Сөләймәнов.— Өфө, 1997.— 120 бит.— (Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы. Республика халыҡ ижады үҙәге эргәһендәге редакция-баҫтырыу бүлеге.)

Китапҡа башҡорт халыҡ уйындарының төрлө төрҙәре индерелде. Ҡырҙа, киске ултырмаларҙа (аулаҡ өйҙә), клубтарҙа уҙғарыла торған яңы һәм борондан ҡалған йола уйындары, уларҙың йырҙары, таҡмаҡтары, бейеүҙәре аңлатмалар, тасуирламалар менән бирелде. Шулай уҡ халыҡ хәтерендә һаҡланған ҡайһы бер йырлы уйындарҙың көй үрнәктәре урынлаштырылды. Башҡорт халыҡ уйындары хаҡындағы мәғлүмәттәр был күләмдә тәүгә нәшер ителә.

ISBN 5—86943—009—7

© Авт.-төҙөүселәре: Солтангәрәева Розалиә, Сөләймәнов Әхмәт, 1997.

## УЙЫН — УЙЫН ТҮГЕЛ

Халыҡ мәҙәниәтенең айырылғыһыҙ бер өлөшөн уйындар тәшкил итә. Әлеге көнгә фәҡәт күңел асыу сараһы булып килеп еткән уйындар, борон тулайым ҙур тамаша булғанлығы уларҙың тарихын өйрәнеүҙә асыҡлана. Уйындың тәғәйенләнеше, ғәмәле, йөкмәткеһе яғынан ике өлөшкә бүленеүе: тик балалар һәм тик өлкәндәр мөхитендә йәшәйеше лә алла әйтелгәнгә бер күрһәткес. Халыҡ уйыны — боронғо мифтарҙы үҙенсәлекле театрлаштырған, ижади кәүҙәләндергән ифрат ҡатмарлы күренеш. Һүҙ, көй, хәрәкәттең тығыҙ ҡатнашмаһы булараҡ, уйындар башҡорт йола-ғөрөфтәрен дә күңел асыу, зауыҡ тәрбиәләү өсөн сәнғәтсән итеп үҙләштергәндәр. Ә йола — мифик белемдең материаллашыуы, йәмғиәт рухын тәрбиәләү өсөн ҡалыплашҡан бер ысул. Былар барыһы ла уйындың күңел асыу тәғәйенен үтәүе генә түгел, ә халыҡтың аң-зиһенен, хис-тойғо, тәртип, ижади мәктәбе булыуына ла ишара. Мәҫәлән, «Алырым ҡош»та ауыҙ Көс һәм яҡшы Көс көрәше, «Убырлы»ла әҙәм ашау, ә һанашмаҡ, тулғауҙарҙа хайуандар, кейек «телен» ҡабатлау, белеү кеүек архаик күренештәр уйылып ҡалған. Ә кейекте, януарҙы ҡыланып бейеү борон-борондан көс-ҡеүәт арттырыусы, һунар уңышын тәьмин итеүсе бер ысул булған. «Төлкө-төлкө төләймән, төндә ҡайҙа бараһың?», «Аҡсарҙаҡ, аҡсарҙаҡ! Балам юҡ, биксарҙаҡ, биксарҙаҡ!»— тип әйтеүҙәр иһә уйында ҡоро һүҙ генә түгел, ә тормош көнкүреште, Кешенең Тәбиғәт менән мөнәсәбәтен сағылдырған бик боронғо тәртип-ғәмәлдәргә ҡайтып ҡала. Ә инде өлкәндәр уйынындағы түңәрәк рәүеше, уның тотороҡлолоғо иһә, шулай уҡ мәжүси дәүерҙе ижади һынландырып, уйын сифатында донъяны, мәңгелекте һүрәтләй. Шуға күрә, уйын — үҙенсәлекле йомаҡ та. Күмәк кешенең түңәрәк йөрөтөүе, ғалимдар фекеренсә, шаман динендә һәм Урта Азия төрки телле халыҡтары араһында бик таралған күренеш[1]. Шулай уҡ түңәрәк һүрәте Ҡояшты олоҡлау, күктәге иң ҙур яҡтыртҡысҡа табыныу[2] билгеһе булараҡ кейем-һалымда, тегемдә — биҙәк, уйында — йөкмәтке, бейеүҙә билге булып ҡалған. Исламға тиклем үк булған Дин-тәбиғәт, тәңрелек диненең өлөшө — бағымсылыҡҡа ҡараған башҡорт йолаһы — зәхмәт, сир ҡыуыуҙы академик Иван Лепехиндың «Шайтан уйыны» тип атауы[3] ла үҙе бер мәғлүмәт бит. Өҫтәп әйтеү фарыҙ: «уйын» һүҙе үҙенең тәү тәғәйенендә ҡыланыу, ҡабатлау, үзбәк, ҡаҙаҡтарҙа шаман камлауын аңғартҡан[4]. Әммә мәжүси дәүер фәһеме үҙенең тәү мәғәнәһен юғалтып, тик уйынсалап ҡыҙыҡ итеп башҡарыу, күңел асыу рәүешендә йомолоп ҡалған. Ул йомаҡтарҙы асыу үҙе бер махсус тикшереү талап итә.

Уйындар бер нисә шаршауҙан торған театраль күренеште хәтерләтә. Алдан билдәле бер шарт (театрҙа — тормошта тыуған бәхәсле хәл) ҡатнашыусыларҙың ҡылығы,

---

[1]Снесарев Г. П. Реликты домусульманских верований и обрядов у узбеков Хорезма.— М., 1969.— С. 270.

[2]Герасимов К. И. Символика орнамента на стрелохранилище. /Зап. Науч. исслед. ин-та култ. и экон.—Улан-Удэ, 1948. —Вып. VII.— С. 173.

[3] Лепехин И. И. Продолжение дневных записок путешествия по разным провинциям Российского государства в 1770 г., ч. II.— Спб, 1802.— С. 73 76.

[4] Снесарев Г. П. (Үрҙә күрһәтелгән хеҙмәт.) — С. 48.

хәрәкәте, һүҙе, көйө ярҙамында хәл итела һәм тулайым тамаша карап тороусыларға күрһәтелә. Ошо һыҙаттар уйын һәм театрҙы халыҡ ижады үрнәктәренә ингән сүрәттә бер-береһенә яҡын итә. Әммә театр талабы — роль уйнаусыларҙың һәләтен, ижади нәфис мөмкинселектәрен күрһәтеп, ҡараусыларҙа зауыҡ тәрбиәләү, тормош тәжрибәһен тәрәнәйтеү, фәһем биреү булһа, уйындың айырым, үҙаллы күренеш булараҡ, үҙ маҡсаты бар. Уйын, берҙән, есеменә исеме тап килгән рәүештә ял, күңел асыу, тән һәм йән яҙыу сараһы. Икенсенән, уйында барыһы ла ҡатнашыусы, тимәк актерҙар. Уйын бында ваҡиғаны ҡабатлап, шартлы алымдар аша күрһәтеү мәғәнәһендә. Ә ул алымдар барыһына ла аңлашыла торған хәрәкәт — билгеләр. Уҙаҡлашыу — уйында уйынбашын йә «көтөүсе» билдәләй; йүгереү, һикереү, ҡыуышыу еңеүсене, хөрмәткә лайыҡ кешене күрһәтә: яуыҙлыҡты яҡшылыҡ күҙ асып йомғансы еңә. Әхләҡи һәм йән, тән, рухи ҡиммәттәр театр тамашаһына ҡарағанда уйында ифрат тиҙ арала күрһәтелә һәм уй яныртa. Бына ошондай төп айырмалыҡтар уйын үҙенсәлеген башҡа төр халыҡ ижады үрнәктәре араһында урынын, тәрән йөкмәткеле вазифаһын, ирмәк ҡатыш етди рухи сығанаҡ икәнен дәлилләй. Берҙән, театр тамашаһын тоҫмаллатыусы, икенсенән, махсус һүҙ, көй, хәрәкәт берекмәһе булараҡ, уйын — ифрат сағыу халыҡ ижады сәнғәтенең үҙенсәлекле төрө. Театр сәнғәтен хәтерләтеү йәһәтенән, һәр уйындың башлап йөрөүсеһе (алып барыусыһы — уҙаманы), актерҙары (уйынға ҡатнашыусылары) бар. Уйындың алдан билдәле сюжеты, тимәк, композиция төҙөклөгө, көсөргәнешле мәле (кульминацияһы), хәл ителеше, уйын шартының (театрҙа конфликттың) сиселеше (эпилог), ахыр килеп еңеүсене (геройҙы) билдәләүе бар. Тормоштағы теге йәки был мәсьәләне, хәлде уйын уйнап күрһәтә. Ҡабатлау, ҡыланыу (имитация) ярҙамында дөйөмләштереү уйын өсөн төп ижади алым. Шулай уҡ тотороҡло уйын ҡоролошонда һүҙ, көй импровизацияһы ғына түгел, хәрәкәт импровизацияһы ла ҙур урын ала. Этнография ғилемендә иһә ҡыланыу, имитация яуыз көстәрҙе, үлемде алдатыусы мәжүси саралар тип баһалана[1]. Икенсе яҡтан ҡарағанда, уйын, ирмәк итеп ҡыланыуҙарҙың йыйын, һабантуйҙарҙа төп урын биләүе лә тәрән мәғлүмәтле күренеш. Ярыш, бәйге, тартышыу, һикереү, ҡолғаға үрмәләү кеүек тән сәләмәтлеге өсөн ҡоролған уйындар, магик саралар булараҡ, әүәл Тәбиғәт көстәрен ышәйтеү, дәрт күтәреү[2], шул иҫәптән яман көскә янау мәғәнәһен дә күтәрә. Ошо тәңгәлдә лә уйын тамырҙары ифрат тәрән: уның тәү тәғәйене күңел асыуҙан бигерәк тылсым мәғәнәһендә булған. Ғүмерҙең бер дәүеренән (ҡоронан) икенсеһенә күскәндә, мәҫәлән, үҫмерҙең ир ҡорона күсергә лайыҡ булыу-булмауын асыҡлау өсөн, үткәрелә торған йолалар үҙгарылған. Уларҙың исемдәре халыҡ хәтерендә һирәк һаҡланһа ла, балалар уйындарында уларҙы тоҫмаллау ауыр түгел. «Алтын ашыҡ», «Уҡ атыш», «Лапта», түп уйындары шундайҙарҙан. Ир ҡорона еткән уҙамандарҙың көсөн һынаған ҡыҫыртуйҙың эҙҙәре иһә йыйындағы төрлө уйындарҙа: ярышып ҡымыҙ эсеү, ҡатыҡ тулы һауыт төбөнән ауыҙ менән тәңкә табыу, көрәш ише бәйгеләрҙә сағыла. Информаторҙар хәтерләүенсә, ирегән эҫе май, һөҙмә эсеүҙәр, ярышып йөк күтәреү — ирҙәр йыйындарындағы иң таралған уйын булған.

Сюжеты, башҡарыу үҙенсәлектәре төрлө булған хәлдә лә һәр уйын өсөн дә тиерлек мотлаҡ булған, ҡалыплашҡан бер алым бар: ул — «яза» алыусыны билдәләү, «яза» биреү. Балалар уйындарында «язаланыусы» етеҙлектә, сослоҡта беренсел икәнен махсус һынап йәиһә: «Кемдә йөҙөк, йүгереп сыҡ», «Ҡарға, сыпсыҡ, бында торма, бар сыҡ!» ише махсус бөтөмдәр ярҙамында иҫәпләп сығарыла. Йәштәр уйынында ҡа-

---

[1]Еремина В. И. Ритуал и фольклор.— Л.: Наука, 1991.— С. 71.

[2]Покровская Л. В. Земледельческая обрядность.— /Календарные обычаи и обряды. —М., 1978.— С. 68—70.

йыш һуғып һынау, йомаҡҡа яуап табыу, «Кем кәрәк?» — тигән һорауға «Зөлхизә кәрәк!» иһе һайлап алыуҙар, көй туктап та үҙенә иш таба алмағанды тәртмә таҡмаҡ әйтеп «Яңғыҙ ҡайын», йә «Моңбирҙе», «Ебегән!» тип хурлауҙар аша билдәләнә. Яҙаланыусыны иһә төрлө һынау көтә: балалар уйындарында, гәҙәттә, көтөүсе (ҡыуыусы) вазифаһын йөкмәтеү йәиһә ебегән, таҙ исемдәре ҡушыу, ә йәштәрҙекендә йырларға, бейергә, һөйгәненең исемен әйтергә мәжбүр итеү һ.б. Хәҙерге заманда уйын рәүешендә генә ҡалыпланып ҡалған был алым — бик боронғо һынау йолаһы. Бер яҡтан унда инициация, икенсе яҡтан, тотош бер ғәйепләне «яҙалап таҙарыныу», раббылар алдында ғәфү үтенеү мотивтарын шәйләргә була. Славян халыҡтарының боронғо йолаларын тикшереүсе Н. Н. Велецкая уйындарҙа хатта ырыу имеһлеге хаҡына махсус үлтереү элементарын да күрә[1].

Уйын сюжетында тоторокло, уйынды уйын иткән тағы ла бер алым — нәмә, әйбер өсөн болашыу. Уйын хәрәкәте төрлө булған хәлдә лә был әйберҙәр уйындарҙын төп атрибутикаһы тип иҫәпләнә. Уларҙың уйында махсус мәғәнәгә эйә икәне шунан беленә: хаҡ түләү, уларҙы яулау өсөн ниндәйҙер лайыҡ эш ҡылыу, фантикка болашыу мотлаҡ. Шулай уҡ уйында әйбер өсөн болашыу ниндәйҙер дәрәжә билгеһе лә (кем беренсе яулыҡты ала — шул «баш» була), уйын бәхәсен сисеүсе сара ла. Уйында (гөмүмән, йолала ла) әйбер йә күренештең тарихи тамырҙарын тикшергәндә, уның осраҡлы булмауы, ә махсус тәғәйенләнеше һәм билдәле йөкмәткегә эйә булыуы асыҡлана. Йөҙөк, билбау — йән һаҡлау, яуыз көстәрҙе ҡурҡытыу, идараға ылыҡтырыу, һәләт биреү ҡөҙрәтенә эйә[2]. Яулыҡ («Яулыҡ сөйөү»), йөҙөк («Үгеҙ йөҙөк»), бүрек, урын өсөн болашыу («Өсмөйөш», «Өс букән», «Римский папа») нигеҙҙәрендә иһә көс һынашыу, барыһының араһынан көслөнө, тимәк, хаким һайлау, артабан, уға буйһоноу йә уны һынау традициялары кәүҙәләнгән. Быға өҫтәп, борон баш кейемдең халыҡтарҙың тормош-көнкүрешендә идара, хакимлек билгеһе булыуын әйткәндә[3], «Йәшерәм яулыҡ», «Көйһөҙ кейәү», «Бүркең яна» иһе уйындарҙың генезисын ярайһы аныҡ тоҫмалларға була. Баш кейеме был уйындарҙа иң оҫта йырсыны, бейеүсене, махсус аҡзалыҡты (кейәү), уйынбашын, еңеүсене күрһәтергә булышыусы шартлы билдә (символ). Ҡасандыр рәсми ваҡиғаларҙы, көстәрҙе һынландырған символдар, хәҙер килеп, уйын атрибуты рәүешендә генә кәүҙәләнә. Әйберҙәрҙә иһә, дөйөмләшкән боронғо мәғлүмәттәрҙең осмотон ғына шәйләп була. Йөҙөк кемгә эләгә, шул фантик өләшә (яҙмышты билдәләй). Урындыҡҡа ултырыу өсөн болашыуҙа иһә тәхет өсөн көрәштең алыҫ сағылышын күрергә мөмкин.

Мәжүси аң-белем, билгеләр аша фекер итеү — үҙаң рәүеше булып ҡалыплашҡан юрау ҙа уйын тамырҙарын байҡарға мөһим форсат ул. «Кемгә ни була — шул шулай була» ҡағиҙәһендә иһә бөтә уйын хәрәкәте тамаша ҡылына. Күп кенә уйындарҙа («Күрәҙәсе» һ.б.) ул шарт асыҡтан-асыҡ әйтелә, ә башҡаларында ҡыҙ таба алыу-алмау, үҙ йәрәшкәнен белеү-белмәү («Исем ҡушыу», «Ҡул биреш»), нимәнелер табыу-тапмау («Шылдырым»), ни көткәнен белеү-белмәү кеүек әүрәткес уйын сюжеттарында тамашаның төп аҫҡысы рәүешендә юрау тора. Был иһә боронғо һынамыш, «яҙмыш

[1] Велецкая Н. Н. Языческая символика славянских архаических ритуалов.— М.: Наука, 1978. —С. 94.

[2] Фрезер Д. Д. Золотая ветвь. Исследование магии и религии /Пер.с англ. М. К. Рыклина, ред. коммент. С. А. Токарева.— М., 1980.— С. 277.

[3] Автобиография Тимура и богатырские сказания о Чингизхане и Аксак-Темире /Пер. с тюркского и джагатайского языков. Вступ. ст. и коммент. В. А. Панова.— М., 1934.— С. 287.

[4] Тэрнер В. Символ и ритуал/Сост. и автор предисл. В. А. Бейлис.— М., 1983.— С. 235; Криничная Н. А. Персонажи преданий: Становление и эволюция образа.— Л.: Наука, 1988.— С. 92.

ни яҙған — шул була», тип һәм Тәңре билгеләрен сабыр ҡабул итеү дәүерен сағылдырған уйын ысулдарылыр, күрәһең.

Нәмә, әйберҙең кемгәлер эләгеүе — юрауҙың, билгеләнеүҙең бер рәүеше. Ошо тәңгәлдә, фантик алыу, уйнатыу ҙа уйында тотороҡло алым булараҡ ҡыҙыҡлы. Уйындарҙа уның ярҙамында ғәйепле табыла, «яза» бирелә, йәиһә бейеү, йырлау, эс серен асыу өлөшө тейә. Был йәһәттән, фантик — сәнғәткә маһирлыҡты һынау билгеһе. Тимәк, уйында йырсылыҡта («Оҙон урҙаш», «Ҡыҙ урлау», «Һандар саҡыра», «Йырлы таяҡ», «Шешә тәгәрәтеш» һ.б.), отҡорлоҡта («Сәтәш»), йылғырлыҡта («Арпа тапау»), сослоҡта («Булдыҡһыҙ»), ғөмүмән, нимәгә һәм күпмегә һәләте булыуы һынала. Ә был һынауҙар ирмәктән түгел, ә бик боронғо ырым-ғәҙәттәр икәнен сырамытыу ҡыйын түгел. Сөнки кем һәләтле — шуны «шәпкә» сығарыу, «уйын башы», «атаман», «Папа», «уҙаман», «батша» итеү үҙе ырыусыл йәмғиәттең йолаларына тоташа. Ә инде «иң тәмле йәшелсә» булыу бүләкләнеүгә, һынау тотоуҙы, еңгәнде билдәләүгә лә тиң. Уйында хәрәмләшеү ҡәтғи тыйыла. Уйын ҡағиҙәһен боҙған кеше «язалана» йә «яна»— уйындан сыға, баш-баштаҡланғанға өҫтәлмә һынау ҡуйыла.

Дөйөм әйткәндә, ошондай тотороҡло тәртип-ҡағиҙәләре булған уйын тамашаһы ябай, ирмәк сараһы булғансы, оҙайлы тарихи үҫеш кисергәненә шик юҡ. Һәр уйын йөкмәткеһендә — тәртип-фәлсәфә, йәшерен уй-фекер, тәрбиә мәктәбе, йола ла, сәнғәт тә.

Борон әҙәм затының тән көсө, ҡөҙрәте лә олоҡланған, культ дәрәжәһенә күтәрелгән булған[1]. Шуға ла һәр йоланың байрамдарҙа, һабантуйҙарҙа көс, ҡөҙрәт, ҡеүәт һынай торған ярыштарҙа тотороҡло, иң мөһим тамашаларҙан булыуы асыҡлана. Көс матурлығын, етеҙлек, таҫыллыҡты һынау — уйындарҙың да төп өлөшө. Тик бында еңеүсе уйынсалап маҡтала, уйын шартында бүләк ала.

Һәр уйында йүгерешеү, төкөшөү, көрәшеү, уҙышыу, һикереүҙәр (көс культы) бер билге булһа, һәр хәрәкәтте бер һүҙ, ҡылыҡ, өн-ауаз менән туҡтата алыу ҙа тәрән мәғлүмәт һаҡлай. Уйын ваҡытында берәй һүҙҙе ишетеү менән, йәки бер билдәле урынға барыу, тотоу менән «ҡош-ҡортҡа», «кейеккә» әүерелеү, әйәһеҙ әйбер булып ҡатып ҡалыу, «яныу» ише шартлы ҡылыҡтар мәжүси инаныстарға бәйле. Тәбиғәт көстәрен, илаһиәттәрҙе кешеләштереп ҡарау, әйткән һүҙҙең сихри көсөнә табыныуҙың һыҙаттарын һаҡлай улар. Шулай уҡ әүәлге ҡанбабаларҙы кейек-януар, айыу итеп ҡарауҙарҙа тылсымлы әүерелеүҙәрҙең дә сатҡыһын күрергә мөмкин. Уйын логикаһында әруахтар культы ла аныҡ сағыла: тейешле урынға етә алмаған «әбей», «бабай», «айыу» була. Ғөмүмән, уйында мифик белем, донъя, көнкүреш күренештәре, көрәш-ярыш хәлдәре уйын-тамаша йомғағына һыйған.

Уйындарҙың айырылғыһыҙ өлөшө — йыр, таҡмаҡ, әйтеш һ. б. мифик нигеҙҙә тыуған күренештәрҙең сәнғәти ҡоршауы ул. Боронғо мифтарға ҡоролған уйындарҙа улар самалы һаҡланһа, халыҡ тормошонда, байрамдарында тотороҡло булған бейеүле уйындарҙың «йәнен» көй, йыр тәшкил итә. Тәбиғәт ҡосағында үткәрелгән төрлө йолалар, айырыуса йола байрамдары, уйындарҙың булмышын билдәләп, үҫешкә этәргес биргән.

Башҡортостандың күп кенә төбәктәрендә, үҙ исеме булыуға ҡарамаҫтан, «Ҡыҙҙар тауы» тип аталған ике исемле тауҙар, түбәлектәр бар. Ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә яҙын шунда сығып бәрәкәт теләгән. Ҡалҡыу урын күккә, Тәңрегә яҡын урын, ә кешеләргә ул мөрәжәғәт итеү өсөн иң уңай майҙан була. Ҡыҙ, ҡатындар иһә түллек сығанағы. Тәбиғәттең уянған, ағастар бөрөләнгән мәлдә тыуҙырыусы заттың уйын ҡороуҙары Тәңрегә ялбарыу, уларҙың күңелен күреүгә бәрәбәр. Ә инде йәштәрҙең — егеттәр менән ҡыҙҙар бергә бейеүе, күңел асыуҙары, Тәбиғәткә инаныу менән бер

[1] Криничная Н.А. Персонажи преданий. Становление и эволюция образа.— С. 112.

рәттән, мәжүси тылсымдарҙың береһе — эротика магияһына ла тоташа. Күп кенә уйындарҙың сюжеты ла, бейеүе лә «иш һайлауға» ҡорола, уларҙа хис-тойғо аңлатыу («Минең күңелкәйем һиндә, һинеке кемдә икән?»), шуны таҡмаҡлап әйтеүҙәр йә сәмләндереүҙә ишаралау («Бейеп кенә кил ҡаршыма, кемдәрҙән ояlаһың?»), һөйөү билгеһе итеп уйын шарты буйынса бүләк биреү һәм йыр менән раҫлау («Сума өйрәк», «Ғыналай» һ. б.) — йәштәр уйынында ҙур урын алған күренеш. Уларҙың тарихи нигеҙҙәре бөтә халыҡтарҙың да архаик мәҙәниәтендә билгеләнгән мәжүси эротика тылсымына ҡайтып ҡала. «Аҡ тирәк, күк тирәк!», «Наза», «Сәриә» һ.б. уйындарҙың йөкмәткеһе, тәүтәғәйене лә шул тылсымға бәйле булырға тейеш. Күп халыҡтарҙың боронғо йолаларын өйрәнеүсе С. А. Токарев: тәбиғәт ҡосағына сығып уйын ҡороу, ҡыҙҙар-егеттәрҙең бергә күңел асыуҙарында боронғо дәүергә хас ырыҫ, түл көсөн тәьмин итеүсе эротика магияһы сағылған, ти[1]. Шулай итеп «Ҡыҙҙар тауы» исемендә тыуҙырыусы затҡа — Әсә затына табыныу, түл-үрсем хәстәрләү һәм һөйөүҙең тәбиғәт дәртен күтәреүенә бәйле инаныстар йомолған.

Йолалар кеүек үк уйындарҙың байтағы халыҡтың боронғо мифологик ырым-инаныстарын үҙләштергән. Күберәген ундай уйындарҙы балалар уйнай. «Алырым ҡош», «Убырлы ҡарсыҡ», «Аҡсарлаҡ»ише уйындарҙа яуыҙлыҡ һәм яҡшылыҡ, әжәл һәм ғүмер, яманлыҡ һәм изгелек, батырлыҡ һәм бахырлыҡ төшөнсәләре асыҡлана. Һәр уйында ул сифаттарҙың билдәле бер яғына баҫым яһарға мөмкин. «Уҡ атыш», «Салауат» ише уйындарҙа, мәҫәлән, батырҙа бер сифатты һынаусы боронғо йоланы — мәргәнлекте һынау йолаһын төҫмөрләп булһа, уҙаҡлашыу, һанашмаҡтарҙа, «Өсмөйөш» уйындарында батырға хас ослоҡ, етеҙлек сифаттарын һынау күҙаллана. Шулай уҡ көрәш, атышыу уйындары боронғо башҡорт хәрби-һөнәр мәктәбен дә тоҫмаллата.

Таҡмазалар, йомаҡ әйтешеүҙәрҙә инде, боронғо сәсәнлек мәктәбенә хас йоланы — тел оҫталығына, зирәклеккә, зиһенлеккә, ижади фекерләүгә имтихан үткәреү традицияһының сағылыуын күрмәү мөмкин түгел. Ысынлап та, аҡыл-зиһендә йомаҡ менән һынауға боронғо инициация йолалары «программаһында» мөһим урын бирелгән. Йомаҡ өйөшөүҙе генә алайыҡ. Йомаҡ яуабын тапҡан кеше уйындарҙа «улан», «күрәҙә», тапмаған «ҡол» (хеҙмәтсе) була, һәм ул башы-тоягы менән «һатылырға» мөмкин. Бында инде мәжүсилеккә хас боронғо йола — кешене ҡорбанға килтереү йолаһының эҙҙәрен шәйләргә була. Уйындар борондан уҡ нәҫелдең, шәхестең тән, йән, рухи сәләмәтлеген һаҡлаусы мәктәп булған.

Миф, ғөмүмән мифологик аң һәм белем халыҡ ижадының һәр төрөнә үҙенсәлекле үтеп инә. Йолала ул — бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда — йәшерен уй, мәғәнәле йомаҡ-хәрәкәт, әкиәттә — мөғжизәүи хәл, эпоста Донъя, Йыһан, Кеше яратылыуына бәйле үҙәк сюжет, ә риүәйәт, легендала ысынбарлыҡҡа хас ваҡиғаларҙың тылсымлы, һынлы-нәфис күҙалланыуында йәшәй. Мифты, уның тәғәйенен халыҡтың фольклор хәтере төрлө рәүештә үҙенсәлекле һаҡлаған. Боронғо уйындарҙа иһә миф — донъяны танып белеү ысулы, театрҙы хәтерләтеүсе күренештәрҙең йөкмәткеһе лә, нигеҙе лә булған. «Убыр әбей — мут әбей», «Һуҡыр тәкә» — яуыз көстәрҙе, яманды һынландырыусы персонаждар. Уларға эләгеү мотивы, ә уйын ҡануны буйынса «яныу», «язаға тарттырылыу», «наказ алыу» һ. б. тормошта йәшәү, балаларға ҡаршы тороуға өйрәтә. Уйын һөҙөмтәһенең нигеҙендә боронғоларҙың әжәл хаҡындағы ҡарашы ла ята.

Халыҡ араһында киң таралған, яратып уйналған ҡайһы бер уйындар урыҫ, украин хороводтарының йоғонтоһон кисергән. Уларҙың йыр-таҡмаҡтары башҡорт милли мөхитендә булһа, бейеү хәрәкәттәре, көй үҙенсәлектәрендә иһә башҡа халыҡ мәҙәниәтенең һыҙаттары күҙәтелә. Уйындарҙың исемдәрендә лә, мәҫәлән, урыҫ атамалары

[1]Токарев С. А. Эротические обычаи: календарные обряды и обычаи.— С. 99—100.

һаҡланған: «Нагу-Нагу» (в ногу), «Марш», «Косилка-молотилка», «Станок» һ.б. Икенсе осраҡта поляк, фин халыҡтарынан килгән «Краковяк» бейеүе халыҡ хәтерендә «Кәркәриә», «Кәриә» исеме менән йәшәй. Сит уйын исемдәрен, бейеү хәрәкәттәрен, көйҙәрен башҡортлаштырған был үрнәктәр — үҙҙәре ифрат ҡыҙыҡлы күренеш.

Китапта уйындар ике бүлектә бирелә: балалар һәм йәштәр уйыны. Балалар үҫеп сыҡҡан баҫмаларҙың байтаҡ булыуын иҫәпкә алып һәм башлыса, йырлы, һүҙле уйындарға иғтибар көсәйтеп, йәштәр уйындарына күберәк урын бирелде.

Һәр төбәктең уйындары, хәрәкәт, бейеү үҙенсәлектәре төрлө булған хәлдә лә түңәрәк йөрөтөү, ҡара-ҡаршы баҫыу, таҡмаҡтар әйтешеү рәүеше бер төрлөрәк була. «Наза», «Парлы», «Өсмөйөш», «Сылбыр» уйындары, мәҫәлән, исемдәре төрлө булһа ла башҡарылыш рәүештәре бер төрлө, йәки киреһенсә, төрлөсә уйналһалар ҙа, нигеҙҙә бер үк уйын тип йөрөтөлгәндәре лә бар. «Сылбыр» уйынын Стәрлебаш, Йылайырҙар «Үрсеткес», «Марш» уйынын Салауат районында «Общий танец» тиҙәр, «Өсмөйөш»тө «Парлы» тип тә йөрөтәләр.

Уйындарҙа башҡарылған таҡмаҡ, йырҙарҙың көйҙәре лә төрлө төбәктә үҙенсәлекле[1]. Был китапҡа ингән уйындарҙың ноталарындағы текстарҙың ҡайһы берҙәре уйын һүрәтләмәһендәге текстар менән тап килмәүе лә мөмкин. Был, халыҡ ижады импровизацияһында тәбиғи күренеш.

Инәй, ҡәртнәнәйҙәребеҙ, апай, еңгәйҙәр, ағай, бабайҙарыбыҙ йәш саҡтарында уйнап бейегән, күңел асҡан тамашалар беҙҙең һәм киләһе быуындарҙың да байрам түрҙәренә ҡайтһын. Сит илдең шау-шыулы, үтә иркен, тотанаҡһыҙ тәбиғәтле уйынбейеүҙәре беҙҙең милли зауыҡты аҙҙыра ғына. Үҙенең матур ҙа, тыйнаҡ та, күңелсәк тә, итәғәтле лә уйын-таҡмаҡтарын онотҡан, тик гитара, синтезатор, барабан модаһына табынған, әле ят кейем кейеп, ят диндәргә инанып йәшәгән ҡәүем[2] төрлө кешеләргә оҡшарға, ҡыланырға тырышҡан ҡырағай йән эйәләрен хәтерләтә. Ҡыланмайыҡ, кемгәлер оҡшарға ла тырышмайыҡ, тик үҙебеҙҙең байлыҡты, матурлыҡты ҡайтарып, үҙебеҙсә, башҡортса, күңел асайыҡ. Береһен генә өйрәнеп, башҡарып ҡарағыҙ, һеҙ әүерәп китеп, оҙаҡ ситтә йөрөп үҙ яланын тапҡан, тыуған еренә йәнә аяҡ баҫҡан ҡолонсаҡтай булырһығыҙ, йәнегеҙгә бөтмәҫ ләззәт, күңелегеҙгә ысын ҡыуаныс, йыуаныс табырһығыҙ. Шунда ғына ят көй-моңдоң, ят уйындың күңелгә ятмаҫын, үҙ көйөндөң йәнеңә яҡынлығын танып, яҡшыһын яманынан айырып алырға мөмкин. Ҡайһы яҡтан килһәң дә, тарихи яҡтан баһаланыңмы, бөгөнгө күҙлектән ҡарайһыңмы, бер хәҡиҡәт бәхәсһеҙ: уйын — уйын түгел.

РОЗАЛИӘ СОЛТАНГӘРӘЕВА.

---

[1]Информаторҙар һәм көйҙәрҙең яҙып алыныу урыны, ваҡыты хаҡындағы күрһәткестәрҙе ҡарағыҙ.

[2]Ҡәүем — халыҡ, милләт.

# АУЛАҠ ӨЙ ҺӘМ ЯҢЫ ЙОЛАЛАР

## 1. Ҡыҙҙар уйыны

### А

Ҡыҙҙар уйынын күптән уйнай инек. Тәүҙә бер әбейҙең өйөн һөйләшәләр. Кесе йома көнөнә тәғәйен итәбеҙ. Бер тәүәккәллерәк ҡыҙҙы хужа итеп билдәләйбеҙ. Һәр кемдән берәр ҡалаҡтан сәй, берәр һыныҡтан икмәк һ.б. йыялар. Хатта, әбейҙең көйө килһен тип, берәр буй утын, кәрәсин алабыҙ. Ул кәрәсинде инәйҙәрҙән йәшереп уртлап ала инек.

Күберәк, бармаҡтарға уймаҡ кейәбеҙ. Ағас күнәккә бармаҡ менән туҡылдатып, көйләп, һамаҡлап бейей инек[1].




Ҡыҙыл-ҡыҙыл бейәләйем
Кер йыуғанда булһасы.
Ай-һай, ҡыҙҙар уйыны
Аҙна һайын булһасы.
Бейе, әйҙә, бейе, әйҙә —
Бейегәнгә бер бәрән.
Бейей белмәй бейениһәң,
Сығарам да ебәрәм.

Килгән егеттәрҙе ҡыуа инек:

Тәҙерәнән ҡарама,
Бүркең тышы алама.
Алам-алам, тиһәң дә,
Һиңә ҡыҙҙар барама?

---

[1]Тасуирламаларҙа һөйләүсенең (информаторҙың) стилен һаҡларға тырышылды (авт.-төҙөүселәр).

Е г е т т ә р: Бейеп киттем дөп-дөп итеп,
Эскерипкә көйөнә.
Барҙым ҡыҙҙар өйөнә,
Бүркем элдем сөйөнә.

Ҡ ы ҙ ҙ а р: Биҙерәмде сиртәйем,
Дөп-дөп итеп китәйем.
Дөп-дөп итеп китәйем —
Йөрәгенде үртәйем.

Б

Егеттәр менән ҡыҙҙар ишек аша йә тәҙерә аша таҡмаҡ әйтешәләр ине. Бер ҡыҙ йырлай:

Керәм генә тиеп, килгән бер малай
Тәҙрә төпкәйҙәрен тумҡалай.
Керәм тиеп, килһәң, малай,
Йөҙ илле һум һалып кер, малай.

Ҡыҙҙар әйтеш башлайҙар:

Тәҙерәгә килгәндәр,
Киле ҡуйып менгәндәр.
Керер өсөн килмәгәндәр,
Күрер өсөн килгәндәр.

Тәҙерәнән ҡарама —
Бүрек тышың алама.
Бар баҙарға, еп алып ҡайт,
Бүрек тышын ямарға!

Тәҙерәгә килгәндәр,
Киле ҡуйып менгәндәр.
Аршын ярым ҡатҡан тунды
Күрһәтергә килгәндәр.

Тәҙерәлә терәү бар,
Терәү түгел, берәү бар.
Йәмле Өҫәйен[1] ауылында
Йәр һөйгәнем берәү бар.

Аҙаҡ, бергәләшеп таҡмаҡҡа бейейҙәр.

[1]Өҫәйен — Дәүләкән районындағы ауыл.

## 2. Урнаш бешереү

Йорт хужалары өйҙә булмаһа, ошо өйгә аулаҡҡа йыйылғандар. Бында килеүсе буш ҡул менән килмәгән, һәр береһе үҙе менән ашарға ит, ярма, йомортҡа, картуф алып килгән. Егеттәр утын ярған, ут яҡҡан; ҡыҙҙар ҡамыр баҫҡандар, һалма ҡырҡҡандар, картуф әрсегәндәр, бутҡа, аш бешергәндәр.

Күмәкләп ултырып ашағас, уйын-көлкө башланған. Әкиәт һөйләгәндәр, йырлағандар, таҡмаҡ әйтеп бейегәндәр.

## 3. Быҡрау[1]

Һәр йыл һайын, йәйге эштәрҙе һәм уңыш йыйып алыуҙы тамамлағас, ауыл йәштәре 1 октябрь көндө Быҡрау уйыны уҙғаралар ине. Был уйынға бигерәк тә Мәсетле районының Ләмәҙтамаҡ һәм Ҡотош ауылында әүәҫ инеләр.

Быҡрау уйыны йыл һайын үткәрелгәнгәлер инде, беҙ уны түҙемһеҙлек менән көтөп ала инек. Унда барғанда, бөтә йәштәр ҙә өйҙәренән ашамлыҡ алып килә. Ҡыҙҙар икмәген, ярмаһын, балын, майын, тоҙон, бәрәңгеһен, башҡаһын килтерә, ә егеттәр утын, тауыҡ, ҡаҙ таба.

Был әйберҙәр, алдан һөйләшеп килешеү буйынса, ауылдың бер ихтирамлы хужабикәһендә бешерелә. Әгәр был көндө ҡаҙын, әтәсен, тауығын юғалтҡан хужабикәләр булғылаһа, бер кем бер кемгә асыуланмай. Быҡрау төнөндә ҡош-ҡорт юғалыусан булыуын һәр кем белеп тора. Йәш саҡта был уйынды һәр кем уйнап үткәргәнгә, ундай-бындай эштәрҙе халыҡ хилафлыҡ тип ҡарамай, ә мәрәкә тип кенә белә.

Аш бешкәнгә тиклем, йәштәр төрлө уйын уйнайҙар: «Йөҙөк һалыш», «Боҙоҡ телефон», «Күршең татыумы», «Һуҡыр тәкә», «Шылдыр-шылдыр» һ.б.

Ашарға әҙер булғас, йәштәр табын ҡоралар. Төртмә һүҙҙәр әйтешеп, ҡаҙҙы, тауыҡты бүлеп, көлөшә-көлөшә аш ашайҙар ҙа өйҙәренән алып килгән тәм-том менән сәй эсәләр. Ә аҙаҡтан күңелле, сәнскеле йырҙар йырлайҙар:

Һин дә әллә кем түгел,  
Мин дә әллә кем түгел.  
Һинең әллә кем булыуың  
Әжәлгә дарыу түгел.

Беҙҙең килен толстай,  
Нишләп толстай булмаһын,  
Ашағаны булочкай.

Ып, итеп кенә торам,  
Ҡып, итеп кенә торам.

---

[1] Быҡрау — Покров.

Үҙем толстай булһам да,
Низамға ярап торам.

Ауылыбыҙ уртаһынан
Оса ҡом бурандары.
Беҙ киткәс тә тыныр әле
Ҡотоштың урамдары.

Уйын таңға тиклем дауам итә.

## 4. Аулаҡ өй



### А

Бер төркөм ҡыҙҙар аулаҡ өйгә йыйылалар. Улар унда йөн иләйҙәр, сигеү сигәләр, селтәр бәйләйҙәр. Ҡыҫҡаһы, һәр кем үҙ эше менән була. Эш барышында ҡыҙҙар йырлайҙар, таҡмаҡ әйтешәләр. Шулай күңелле генә йырлап-көлөшөп ултырғанда, тәҙрә сиртәләр. Кем булыр? Бөтәһе лә һағайып ҡалғандай була. Араларында өлкәнерәк еңгәйҙең йөҙөнә хәйләкәр йылмайыу сыға. Ул тәҙрәнән тышҡа күҙ һала ла:

— Егеттәр!— тип ҡысҡыра.

Ҡыҙҙар араһында сыр-сыу башлана, һәр береһе үҙен рәткә килтерә.

Егеттәр инә. Ҡыҙҙар һауалы ҡараш ташлайҙар. Егеттәр ҙә бирешмәй, төртмәле йыр башлайҙар:

Әй, ҡыҙҙары, ҡыҙҙары,
Янып тора күҙҙәре.
Минимумын[1] үтәй алмай,
Харап икән үҙҙәре.

Ҡыҙҙар:

Һандуғас һайраған була,
Тешен ҡайраған була.
Фуражкаһын кейә белмәй,
Ҡыҙҙар һайлаған була.

Төртмәле йырҙар дауам итә. Был арала еңгәй егеттәргә шымырға ымлай, ҡыҙҙарҙы егеттәр менән ярашырға өндәй. Ҡыҙҙар ризалаша.

Гармунсы күңелле бейеү көйөн башҡара. Егеттәр, ҡыҙҙар парлашып, ҡулға-ҡул тотоношалар. Бейешеүҙәр, йырлашыуҙар китә.

Уйын һәр ваҡыт «Ҡарабайҙы» бейеүҙән башлана. Уйынды күңелле генә башлап ебәреүгә, йорт хужабикәһе ҡайтып инһә, ҡыҙҙар егеттәрҙе йәшерә. Ике йәки өс егеттең өҫтөнә әйбер ябыла. Улар урындыҡты хәтерләтә. Хужабикә аңғармаҫтан, шуға килеп ултыра ла ... салҡатан йығыла. Шулай итеп, өйҙә егеттәр барлығы фашлана. Хужабикә уларҙы ҡыуа башлай. Ә ҡыҙҙар хужабикәне төрлөсә өгөтләйҙәр, ул егеттәрҙе ҡыумаҫҡа була. Уйын дауам итә. Күмәк бейеүҙәр яңғыҙ бейеү, йыр-таҡмаҡтар менән алмашына. Бейеү, йырҙарҙы көләмәстәр, йомаҡтар, бәйеттәр, әкиәттәр һөйләшеү алмаштыра.

Б

Хәҙерге ултырмаларҙа колхоз, тыуған ауыл, һалдат тураһында йырҙар ҙа йырлана.

Колхозыбыҙ — Шайморат[2],
Районыбыҙ — Әбйәлил.
Маллы колхоздар күрергә,
Беҙҙең Әбйәлилгә кил.

Ҡырҡты тауын ҡырҡып үтә
Ҡыҙыл тигән йылғаһы.
Тырышып эшләү, алға сығыу
Әбйәлилдәр йолаһы.

[1] Минимум — колхозсыларға билдәләнгән йыллыҡ эш көнө (хеҙмәт көнө минимумы).

[2] Шайморат — Шайморатов исемендәге колхоз (үҙәге — Байым ауылы).

Бейек — Ирәндек тауы,
Матур — Әбйәлил яғы.
Гөрләп тора, балҡып тора
Колхозсының донъяһы.

Әбйәлилдәр бергәләшеп,
Ҡырға сыға яҙ еткәс.
Ҡымыҙ эсеп, йырлап-бейеп
Ял итәләр эш бөткәс.

Шулай йырлай-йырлай, таҡмаҡлай-таҡмаҡлай бер аҙ эшләп алалар ҙа, эшләп арығас, төрлө уйындар уйнай башлайҙар.

В

Әүәле, аулаҡ йортҡа йыйылғанда, таң атҡансы суйын килеләрҙә тары төйөр булғандар.

Тары һуғып, таңды ҡыуып,
Төндө көндөҙ итәбеҙ.
Яңғыҙҙарҙы ишле итеп,
Ҡауыштырып китәбеҙ,—

тип йырлағандар.

Тары һуҡҡанда, сыра яндырыр булғандар. Ултырмаға йыйылыусылар төрлө уйындар уйнаған.

## 5. Армияға оҙатыу

А

Егет кеше оҙон сәфәр ҡылырға йә армияға, һуғышҡа китергә әҙерләнһә, әсәһе ҡулына икмәк ала ла уны улының биленән өс тапҡыр урата. Шунан шул икмәкте унан бер ҡабым тешләттерә.

Тешләм аҡ сепрәккә төрөлә һәм йәшереп ҡуйыла. Ул ситкә киткән кешене илдә (тыуған йортта) ризығы көтөүен, уның имен-һау әйләнеп ҡайтыуын теләүҙе аңлата.

Б

Армияға, яуға (оҙон сәфәргә) китеүсе ишектән, ҡапҡанан гел арты менән сыға. Урамға сыҡҡас ҡына, алдына әйләнә. Шулай итһә, ҡалған ризығын ашарға кире әйләнеп ҡайта була.

В

Оҙатыусылар ҙа, армияға китеүселәр ҙә клубҡа йыйыла. Олоһо, кесеһе егеттәргә Тыуған илгә тоғро хеҙмәт итәргә бурыс билдәләй. Шунан иҫтәлекле бүләктәр бирелә. Һалдатҡа китеүселәр яуап һүҙе

әйтә. Башҡорт милли кейемдәре кейгән ҡыҙҙар янсыҡтар бирә. Уның эсендә — тыуған ер тупрағы. Әбейҙәр егеттәргә көмөш тәңкә тотторалар ҙа: «Балам, был тәңкә йәнеңде һаҡлар. Иҫән йөрөп, иҫән ҡайт! Иҫән ҡайт та, иҫән булһам, тәңкәмде кире бирерһең»,—тиҙәр. Ата-әсәләр китеүселәргә икмәк ҡыйырсығы тешләтә лә: «Ашап бөтөлмәгән ошо тешләмең һине кире саҡырып торор»,— ти. Китеүселәргә аҡтан-аҡ, изгенән-изге юл теләү билдәһе итеп, һөт эсерәләр.

Йылан теле төрлө бәләнән ҡотҡара. Йыланды үлтермәйенсә генә, тере телен тартып алалар. Шуны әрмегә киткән йә бәләгә тарыған кешенең яғаһына тегеп ҡуялар. Ул бәлә-ҡазанан ҡурсылай ти. (Күҙең төшкән, күңелең ятҡан кешеңә йылан теле менән төртһәң, ул тәҡәт итә алмай, һине ярата.)

г

Китеүсене бөтәһе лә оҙатырға сыға. Сыға алмағандар менән китеүселәр үҙҙәре өй беренсә йөрөп һаубуллаша.

Әбей-һәбей күрешеү-хушлашыуға буш ҡул менән бармай. Күрешкәндә бер һум булһа ла аҡса тотоп күрешә. Борон тәңкә тоттороп булғандар.

Ауылыбыҙҙың иң өлкән кешеһе Раян бабай һалдатҡа китеүселәргә бейеү менән йыр бүләк итер ине. Ул китеүсе егет менән ҡушарлап бейер-бейер ҙә, шулай тип йырлар ине:

Килер ваҡыт, балам, һин ҡайтырһың,
Ул ваҡытта, бәлкем, мин булмам.
Һинең күҙ алдында тороп ҡалһын
Минең бейеү менән натурам.

ғ

Армияға китеүсегә изге теләктәрен әсәй кеше ошондай йыр аша еткерә:

Оҙон юлға сығаһығыҙ бөгөн,
Хәйерле юл һеҙгә, балалар!
Һәр ваҡытта изге теләк теләп,
Оҙатып ҡала һеҙҙе аналар.

Ил ышана һеҙгә, ҙур бурыстар ҡуя,
Һеҙ бурыслы уны үтәргә.
Һәр ир бала, үҙ мөҙҙәте еткәс,
Китә илгә хеҙмәт итәргә.

Ҡайһы ғына поста булһағыҙ ҙа,
Илгә тоғро хеҙмәт итегеҙ.
Ике йыл ул хәҙер генә үтә,
Бәхет, тәүфиҡ менән хеҙмәт итеп,
Әсәй, тиеп ҡайтып инегеҙ!

Һалдатҡа китеүсегә икмәк тешләткәндә, ололар былай ти: «Икмәк башын — кәбән башын тешлә, балам! Ризығың бында ҡалһын да һине көтһөн! Хызыр-Ильяс булһын юлдашың!»

Хушлашыу гел ауыл осонда, Оло Балан тауы башында үткәрелә. Йәш елкенсәк шаярышып бейешә, төртмә таҡмаҡтар әйтә.

Һалдат меҫкен үргә ҡарай,
Сәстәрен үргә тарай.
Һалдат меҫкен бер төш күрһә,
Ҡайтыр юлдарын ҡарай.

Армияға киттем, тиеп,
Онотма тыуған илең.
Һиңә ышанып тапшырам
Яҙмышын тыуған илдең.

Аҙаҡ «Хуш, ауылым» йырын йырлап хушлашалар. Ауылдаштар китеүсегә изге теләктәр теләй. Изге теләктең иң ҙуры — ил алдындағы бурысты үтәп, имен-аман әйләнеп ҡайтыу. Шуға ла һалдатҡа китеүсе өйөнән сыҡҡанда уҡ, уға икмәк тешләтәләр, аяғы менән өҫтәл аяғында эҙ ҡалдырталар. Икмәк тә, шул эҙ ҙә ул ҡайтҡансы һаҡланырға тейеш.



**6. Ара йыйыны**

Ара йыйыны беренсе тапҡыр Бөрйән районының Байназар ауылында үткәрелде. Йыйынды башлап йөрөүсе — тарих уҡытыусыһы Ғәлимйән Ишбулатов булды. Ул үҙенең һәм араһының зат-зориятын тикшерҙе. Ә уларҙың араһы элек-электән тирә-яҡта абруйлы аранан иҫәпләнгән. Унан, 1812 йылғы Ватан һуғышы ҡаһармандары ла, уҡымышлылар ҙа, хеҙмәт алдынғылары ла, етәкселәр ҙә сыға килгән.

Ана шуларҙың барыһын да барлай тарихсы. Ҡарттарҙан һораша, ситтәгеләр менән хатлаша, архивтарҙа соҡона һәм үҙ нәҫеленең, араһының шәжәрәһен төҙөй. Билдәләнгән көндә, 1991 йылдың матур йәйенең бер көнөндә, Байназарға көшөлдәр араһында булғандар байрамға йыйыла. Бығаса, фамилияларын алмаштырыу, яңыртыу һөҙөмтәһендә, туғанлыҡтарын белмәгәндәр яңынан танышып, яңынан туғанлаша, сит-ят яҡтарға сәселгән ҡәрҙәштәр осрашыу шатлығын кисерә. Йыйын йәштәргә яҡын ҡәрҙәштәрен танырға өйрәтә, ҡан бутау хәүефенән абай булырға һабаҡ та бирә.

## 7. Шәжәрә байрамы

Был байрам да яңы тыуҙы. 1993 йылда Баймаҡ районы Таулыҡай ауылы хакимиәте, урындағы колхоз етәкселәре, йәмәғәтселектең хуплауы буйынса, бығаса күрелмәгән һәм күнекмәгән яңы байрам үткәрергә ҡарар итә. Ҡыш буйына Таулыҡай, Сыңғыҙ, Буранбай ауылдарының тарихы, унда йәшәгән бөрйән ырыуына инеүсе халыҡтың нәҫелнәсәбе асыҡлана. Шәжәрәләр төҙөлә. Һәр кем үҙенең зат-зориятын яңынан барлай. Өс ауылдағы халыҡ ҡор бабаһы Морат ҡашҡаға яҡынараҡ булырға тырыша, сөнки борон ер биләр өсөн бабайҙар уландарын тирә-йүнгә таратып ултыртыр булған. Ә ауыл ҡарттары Ғабдрахман Ишкинин, Әнүәр Имелбаев төҙөгән шәжәрә буйынса, Морат ҡашҡаның туғыҙ улы булыуы асыҡлана.

Йыйын башланыуға (ә ул Сыңғыҙ менән Таулыҡай ауылдары араһындағы Төпөш туғайында уҙҙы), өс ауылдың һәр араһы үҙ йәйләүен ҡорҙо. Тирмәлеләр тирмәһен, тирмәһеҙҙәр ҡыуышын рәткә килтерҙе, уларҙы балаҫ, һөлгө, боронғо һауыт-һаба менән йыһазландырҙы, тирәләп ситәндән йә һайғауҙан бакса тартты, усаҡ, сыуалдар сығарҙы, һәр йәйләүҙә көнө буйы аш-һыу әҙерләнде. Төрлө йолалар атҡарылды: бер урында мулла аҙан әйтеп яңы тыуған сабыйға исем ҡушты; икенсе урында ноҡотсо ноҡот бүлде; өсөнсө урында ир-ат эйәр-өпсөн, еп-йышыу әҙерләне; дүртенсе урында киндер, балаҫ һуғалар ине... Аш-һыу оҫталары күргәҙмәләргә үҙҙәре бешергән тәмле-татлы ризыҡтарын сығарып ҡуйҙы. Ҡаҡланған ит, тултырма, ҡаҙы-ялдар, ылаштарҙа ҡорот, батмандарҙа бал, әсе бал, буҙа, ҡымыҙ, айран, бәлеш, бәрәмәс, бауырһаҡ, тағы әллә нисәмә төрлө ризыҡ бар ине унда. Сыңғыҙҙар йәйләүендәге бер араның күргәҙмәһендә етмешләп ризыҡ бар ине. Махсус төҙөлгән комиссия йәйләүҙәрҙең йыһазландырылышын да, тирмә һәм ҡыуыштарҙың биҙәлешен дә, аш-һыуҙың төрөн, тәмен дә, ҡапҡа тышына ҡуйылған ара шәжәрәләренең тулылығын да, йөкмәткеһен дә — барыһын да иҫәпкә алып, һәр йәйләүгә, һәр оҫтаға үҙ баһаһын бирҙе. Бынан тыш, һәр ара үҙ-ара таланттар бәйгеһе лә асып ебәрҙе. Шуларға өҫтәп, кәҙимге һабан туйҙарында уҙғарыла торған ярыш, бәйгеләрҙе лә иҫәпкә алһаң, Шәжәрә байрамының йөкмәткеһен бай итеп үткәрергә мөмкин икәненә төшөнөргә була. Шуныһын да билдәләү кәрәк: Шәжәрә байрамы алдынан ауылдар төҙөкләндерелә, мөмкин ҡәҙәр биҙәлә.

50083 - 1144

ЧЗ Учалинская ЦБ

## 8. Тыуған ер байрамы

### А

Халыҡ хуп күреп ҡабул иткән был байрам да Баймаҡ яғында тыуҙы. Ул шундайыраҡ тәртиптә үткәрелә. Алдан байрамдың программаһы, үткәрелеү тәртибе иғлан ителә. Байрам көнөнә һәр хужалыҡ тирмә ҡора. Тирмә тирәләй күргәҙмәләр ҡуйыла. Уның эсе лә, тышы ла биҙәлә. Эстә боронғо балаҫтар, кейеҙ, сергеләр түшәлә, ҙур-ҙур мендәрҙәр өйөлә. Уң яҡта ағас, туҙ һауыт-һаба, унан ҡул тирмәне урын ала, сәңгелдәк эленә. Һул яҡта, ишек төбөндәрәк, эйәр-өпсөн, һунар кәрәк-ярағы ҡуйыла. Урҙаларҙа боронғо кейем-һалым, һөлгөләр, ҡул эштәре элеүле тора.

Тирмә тышындағы күргәҙмәләрҙә ауылдың күренекле кешеләренең фотолары, тормош юлдары, тарихи мәғлүмәттәр, хужалыҡтың эш күрһәткестәре күрһәтелә.

Аш-һыу оҫталары килгән-киткәнде бауырһаҡлап сәй менән дә, һаба-һаба ҡымыҙы менән дә, буҙлатып буҙаһы менән дә, ҡаҙы-ялдары менән дә, бишбармағы — башҡаһы менән дә һыйлай. Һөнәрлеләр, етеҙҙәр һөнәрҙә, көс һынашыуҙа, етеҙлектә ярыша.

### Б

Был байрам яңыраҡ ҡына Баймаҡ районында тыуҙы. Алдан уҡ байрамдың үткәрелеү тәртибе, ярыштар тураһында иғлан ителә. Байрамда һәр хужалыҡ тирмәләр ҡора. Тирмә тирәләй күргәҙмәләр ойошторалар. Тирмәнең эсе лә, тышы ла биҙәлә. Эстә боронғо балаҫтар, кейеҙҙәр, сергеләр түшәлә, ҙур-ҙур мендәрҙәр өйөп ҡуйыла. Бер яҡта балаҫ көрөҫө, түрбашта ҡул тирмәне, ағас һауыт-һаба урын ала. Сәңгелдәк тә элеп ҡуйыла. Урҙаларҙа кейем-һалым, һөлгөләр эленеп тора. Боронғо аш-һыу яраштырып ултыртыла.

Тирмә тирәләй күргәҙмәләр ҡуйыла. Унда ауылдың күренекле һәм хөрмәтле кешеләре, хужалыҡтың эш күрһәткестәре, башҡаһы хаҡында мәғлүмәттәр күрһәтелә.

## 9. Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!

### А

Баймаҡ районында һабантуй байрамын «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» байрамы алмаштыра бара. Ул да һабантуйға оҡшаш. Тик унан айырмалы рәүештә, ауылдан ситкә киткәндәр барыһы ла саҡырыла. Ундай саҡта бөтә кеше боронғоса кейенә, боронғо әйберҙәрҙән, боронғо аш-һыуҙан күргәҙмәләр ойошторалар. Күргәҙмәләрҙә талҡан, эремсек, тирмәндән үткәрелгән муйыл, ҡурмас, ыумас, боламыҡ, башҡаһы була. Уларҙы ауылдағы һәр урам үҙ өҫтәлендә күрһәтә. Һәр урам күргәҙмәһендә ҡул тирмәне, һуҡа, киле, көрөҫ, ағас һауыт-һаба һ.б. була. Күргәҙмәләрҙә балаҫтар, һуғылған киндер, етен бәйләмдәр күрһәтелә.

Ат сабыш, тоҡ менән һуғыш, арҡан тартыш, йомортҡа һалынған ҡашыҡты тешләп йүгереш, һырғауылға менеү, бағана буйлап тәкә һөйрәп алыу, көрәш һәм башҡа уйындар уҙғарыла.



Б

Эй ҡыҙҙыра яҙ ҡояшы,
Йылыта төнөн.
Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!
Байрам бит бөгөн.

Байрам йыры гөрләп торор
Ауылым күгендә.
Быңдай саҡта кем йырламаҫ,
Йырлар һәр кем дә.
Моңло йырға ҡушылырҙар
Тауҙар, урмандар.
Ауылыма ырыҫ ғүмер
Теләрҙәр улар.

## 10. Килендәр һәм ҡәйнәләр кисәһе

А

Асыҡ һауала йә клубта ҙур табын әҙерләнә. Табынға ҡуйылған ризыҡтарҙы һәр кем үҙе менән алып килә. Уларҙың әҙерләнеше, тәме баһалана. Аш-һыуға оҫта киленгә, ҡәйнәгә маҡтау һүҙҙәре әйтелә.

Кисә үткәрер алдынан ҡул эштәре күргәҙмәһе ойоштороla. Бәйләнгән, тегелгән, сигелгән әйберҙәрҙең матурлығына, йыйнаҡлығына, уңайлығына, яңылығына ҡарап иң оҫта ҡуллы килендәр, ҡәйнәләр билдәләнә.

Табында аш-һыу, ҡул эштәре оҫталары тәжрибә менән уртаҡлаша. Ҡәйнәләр, олороҡ килендәр йәш килендәргә бала тәрбиәләү, ирҙең күңелен күреү, татыулыҡ, донъя көтөү серҙәрен һөйләй, кәңәштәр бирә.

Ул арала самауыр яңыртыла. Самауыр яңыртҡан арала ҡымыҙ, батмус сиртеп, бейетеп тә алалар. Йырсылар йыр һуҙа.

Табындан һуң күңелле уйындар уйнала.

Б

Был кисә клубта үткәрелә. Унда бер ғаиләләге килендәр менән ҡәйнә бер булып, икенсе яҡтағы ҡәйнә һәм килендәргә ҡаршы ярыша. Ҡайһы ғаилә татыу, ғәҙәттә шул еңеп сыға.

Был байрамды үткәреүҙең икенсе юлы ла бар. Унығында ҡәйнәләр — бер яҡлы, килендәр — бер яҡлы булып уйнай. Быныһы ҡыҙыҙыраҡ була. Унда, ғәҙәттә, ҡәйнәләр аҡыл, таһыл яғынан ал бирмәй, шаянлыҡ, үткерлек йәһәтенән — килендәр.

«Килендәр менән ҡәйнәләр» байрамы, ниндәй тәртиптә үткәрелмәһен, һәр саҡ татыу, сәмләнеп йәшәүгә өйрәтә.

## 11. Урам байрамы

Был байрам бер-нисә урамдан торған ауылдарҙа үткәрелә. Байрам алдынан һәр кем үҙ ихатаһын, урамдың үҙ өйө тәңгәлендәге өлөшөн йыйыштыра, таҙалай, бөтәйтә, буяр ерен буяй. Ярышта былар ҙа иҫәпкә алына. Бынан тыш кемдең өйөнең эсе йыйнаҡ, ҡайһы урамда алдынғылар, йәмәғәт эштәрендә актив ҡатнашыусылар күп — бөтәһе лә ярыш күрһәткесе иҫәбенә инә.

Байрамдың тантаналы өлөшөндә ауыл Советы депутаттары отчет бирә, үҙенең һайлаусыларының хеҙмәтен күрһәтә.

Аҙаҡ төрлө уйындар уйнала, аш-һыу, ҡул эштәре, йыр, бейеү буйынса ярыштар үткәрелә.

## 12. Ауыл көнө

Байрам спорт ярыштары менән асылып китә.

Клубта ауыл уңғандары тарафынан эшләнгән, бәйләнгән нәмәләргә күргәҙмә ойоштороla.

Агитатор, политинформаторҙар сығыш яһай, илдең, районның, ауылдың үткән тарихы менән таныштыралар.

Бейеүгә, йырға, шиғырға конкурстар үткәрелә. Конкурста еңеүселәр билдәләнә.

«Иң яҡшы өй», «Иң яҡшы хужа» йәки «Иң яҡшы хужабикә», «Иң татыу ғаиләләр» билдәләнә. Уларға иҫтәлекле бүләктәр тапшырыла.

Был байрамда бөтә ауыл ҡатнаша. Ойоштороуҙа уҡытыусылар, медицина работниктары, һатыусылар, көнкүреш хеҙмәтләндереү йорто эшсәндәре һәм ҡатын-ҡыҙҙар советы активлыҡ күрһәтә.

Бәйге майҙанында төрлө-төрлө ярыштар ойоштороla. Унда ҡымыҙ ҙа, буҙаһы ла, бишбармағы ла була.

Һүҙ оҫталары, йырсылар, таҡмаҡсылар ярышында күберәк тыуған яҡтың гүзәллеге, унда үҫеп ир етеп, халыҡ алдында хеҙмәт күрһәтеп хөрмәт ҡаҙанған яҡташтар данлана.

## 13. Беренсе бураҙна

Әүәл ер һөргәндә, тупраҡты ҡотлап, уңыш теләп йомортҡа тәгәрәтеү йолаһы булған. Һәр бер өйҙән күкәйҙәр йыйып, уларҙы ергә тәгәрәткәндәр. Ә балалар йыйып ашар булған. Уңыш теләүгә, сәселгән ерҙең мул иген биреүенә ишара булған ул.



Хәҙер механизаторҙар яҙғы сәсеү эштәрен «Беренсе бураҙна» байрамы менән башлап ебәрә.

«Беренсе бураҙна» һалыу яланы төрлө саҡырыу лозунгылары менән биҙәлә. Ситтә, рәттәр менән сәсеү машиналары теҙелә.

Митингыны берәй етәксе асып ебәрә. Ул ҡыҫҡаса уҙған йылдағы

күрһәткестәргә туҡтала һәм быйылғы йылда баҫыуҙарҙың, техниканың торошо, яңы бурыстар тураһында һөйләй.

Һүҙ механиҙаторҙарға бирелә. Улар үҙҙәренең алған йөкләмәләре менән таныштыра һәм уларҙы намыҫ менән үтәп сығырға һүҙ бирә. Һуңынан агитбригада ағзалары был механизаторҙарға ҡыҙыл ленталар бәйләй. «Колхозсылар маршы» яңғырай. Бригадир механизаторҙарға:

— Хәйерле юл! — тип әйтеүгә, иң өлкән механизатор тәүге бураҙнаны һала башлай, уға иң йәш механизатор эйәрә.

Тәүге бураҙна һалынғас, агитбригада механизаторҙарға концерт күрһәтә.

## 14. Тәүге көлтә

Июль ҡояшы алтын башаҡлы арпа башаҡтарын йылытҡан мәл. Баҫыу ситендә баҫыу караптары — комбайндар теҙелә.

Байрамды етәкселәрҙең береһе асып ебәрә. Уны былтыр алдынғы булған комбайнсы алмаштыра. Ул былтырғы уңышты йыйыуҙағы өлгәштәрҙе хәтергә төшөрә, быйыл да һынатмаҫҡа тырышасаҡтарын белдерә. Былтырғы уңышты йыйыуҙа алдынғылыҡты бирмәүселәргә, быйылғы йылда йыйыуға техниканы яҡшы әҙерләгән комбайнсыларға бүләктәр һәм яңы фатирға ордерҙар тапшырыла. Агитбригада концерт күрһәтә.

«Ялан батыры» маршы уйнала. Комбайнсыларураҡҡа төшә.

## 15. Ураҡ менән сүкеш байрамы

Эшсе менән крәҫтиәндәрҙең берҙәмлеге күп кенә байрам һәм йолаларҙа сағылыш тапты. «Ураҡ менән сүкеш» байрамы беҙҙең районға иген йыйырға Белорет ҡалаһы эшселәре килгәндә үткәрелә. Ауыл һәм ҡала эшсәндәре үҙ-ара эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар, иптәштәренең хеҙмәт ҡаҙаныштары менән таныштырышалар, күңел асалар.

## 16. Сәскәләр байрамы

Был байрам: «Башҡа һуғыш булмаһын!», «Тыныс атһын алһыу таңдар!», «Әсә менән бала шатлыҡлы йылмайһын, атаның йөрәге тыныс типһен!», «Тыныс ерҙә тыныслыҡ сәскәләре атһын!» тигән саҡырыуҙар аҫтында үтә. Байрамға төрлө стенгазеталар («Аҡ сәскә», «Именлек», «Ләлә» һ.б.) сығарыла. Өҫтәлгә хужабикәләр үҙҙәре үҫтергән сәскәләрҙән гөлләмәләр ҡуя. Сығыштар сәскәләргә, кешелек сәскәһе — балаларға, именлеккә бағышлана.

Иң яҡшы сәскә үҫтереүсе, иң эшсән баҡсасыға бәйге үткәрелә.

Бынан тыш, сәскәләр тураһында шиғырҙар уҡып, йырҙар йырлап ярышалар.

Аҙаҡ Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарҙың һәйкәленә, яуҙан ҡайтып донъя ҡуйған яугирҙәрҙең ҡәберҙәренә сәскә һалына.



# СӘМЛЕ, МӘРӘКӘ УЙЫНДАР

## 1. Аҡ таш

Ҡыҙҙар, үҙҙәре йыйған таштарҙы устарына йомоп, теҙелеп ултыра. Берәүһе «бәхет» тарта. «Бәхет»— аҡ таш. Кемгә һалынғанын белер өсөн, ҡулдарын асалар ҙа бер һыртын, бер усын әйләндереп, таштар ҡойолоп бөткәнсе, һамаҡ әйтәләр:

Аҡ таш! Йәшел таш!
Минең өлөш — аҫыл таш!

Кемдә аҡ таш була, шул йүгереп сыға ла күршеһенә һуғып китә. Ӧс урауҙа элекке урынына, ҡыуыусынан һуғылмай-ҡағылмай, барып ултырырға тейеш. Әгәр ҡағылһа (һуғылһа), ситкә сығып, ҡарап ултыра. Таш һалыу дауам итә. Түңәрәктә ике кеше ҡалғансы уйнайҙар.

Таштарҙың аҫылы — ағы кемдә ҡала, шул бәхетле була. Бөтәһе лә уға фантик (кем йөҙөк, кем беләҙек) бирә. Бәхетленең күҙен бәйләйҙәр ҙә, бөтәһе лә уның артына теҙелешеп ултыра. Береһе һаҡ ҡына килә лә, моҡсайҙан фантик алып, һамаҡлай-һамаҡлай һорай:

Ҡайҙа минең өлөшөм,
Ҡайҙа минең көмөшөм?

Күҙе бәйле уйынсы күрмәй — әйтә һала:

Йүгереп урап килһен,
Шулдыр уның өлөшө!

Икенсеһенең фантигын алғанда:

Бейеһен йә таҡмаҡ әйтһен! — тиҙәр.

Шулай итеп, бөтәһенең өлөшө сығып бөткәнсе, «бәхетле» уларға наказ бирә.

## 2. Күмер йөҙөк

«Күмер йөҙөк» уйыны өсөн уйнаусылар бер урынға теҙелеп утыралар. Йөҙөк табыусы билдәләнә. Ул ситтә ҡарамай тора. Ә һалыусы йөҙөктө уйнаусыларҙың береһенең усына йәшерә. Әгәр табыусы йөҙөктөң кемдә икәнлеген дөрөҫ әйтһә, кемдән йөҙөк табылған, ул шунын урынына ултыра. Әгәр йөҙөк табыусы кемдә икәнлеген дөрөҫ әйтә алмаһа, уның берәй әйбере алына һәм айырып һалып ҡуйыла. Уйын шулай дауам итә. Аҙаҡ, йыйып алынған әйберҙәрҙең хужаларына си-

ратлап төрлө наказдар бирелә. Наказдар төрлөсә була: этәс булып ҡысҡырыу, йырлау, таҡмаҡ әйтеү, бейеү, һөйгәнеңде, оҡшатҡаныңды әйтеү, «ҡош еме» ашатыу һәм башҡалар. Алып барыусы йыйылған әйберҙәрҙең берәүһен ала ла:

— Был фантикка ни наказ?— тип һорай.

— Әтәс булып ҡысҡырһын!— ти башҡалар.

«Ҡош еме» ашатҡанда, бер иле оҙонлоғо һындырып алынған шырпыны тешләп уны наказда төбәп әйтелгән ҡыҙҙан (ҡыҙҙар — егеттәрҙән) тешләтеп алырға кәрәк. (Мутыраҡ егеттәр, хатта шырпыны мөмкин тиклем ҡыҫҡараҡ һындырып алырға маташалар.)



## 3. Көйһөҙ кейәү

### А

Был уйынды кис ултырған ҡыҙҙар уйнар булған. Бер ҡыҙҙы «кейәү», икенсеһен «кәләш» итәләр. «Кәләше» «кейәүен» кейендерә. «Кейәү балаҡай» «кәләше» эргәһенә табағас атланып килеп етә лә:

Ай уйынса, уйынса,
Эскәмйәләр буйынса,
Һин саҡырҙың, мин килдем,
Һинең һүҙең буйынса,—

тип һамаҡлай. «Кейәүҙе» «кәләше» ҡаршы ала, хөрмәтләп һикегә ултырта. Унда бер-ике таҡта алынған, өҫтө балаҫ менән матурлап ҡаплап ҡуйылған, ә аҫҡа тас, ялғаш кеүек һауыт менән һыу ултыртып ҡуйылған була. «Кейәү» шап итеп шул һыуға сума. Унан «кейәүҙең» кейемен «кәләш» алмаштырырға тейеш. «Кәләш» тегене «сисендереп» кейендергәндә, «кейәү» һамаҡлай-һамаҡлай, «кәләшен» ҡытыҡлай:

Минең кәләш көләкәс,
Көлдән күмәс бешергән.
И-һа-һай, и-һа-һай,

Тәмәкемде тәмләп бир,
Атымды әсереп бир,
И-һа-һай, и-һа-һай.

«Кәләш» шул ваҡыт көлөп ебәрһә, хатта йылмайған булһа ла, «кейәү» үсегеп китә лә бөтә нәмәһен сисеп, атып бәрә. «Кәләш» тағы кейендерә башлай, көлһә, йәнә шул уҡ хәл ҡабатлана.

Б

Берәүҙе «кейәү» итәләр. Кейергә бишмәт, башына бүрек алып киләләр, ҡулына таяҡ таяндыралар, ҡағыҙҙан «папирос», шырпы әҙерләп ҡуялар. «Кейәү» булған кеше былай тип әйтеп тора:

Тиҙ,тиҙ булһана,
Тиҙерәк кенә булһана,
Ахун ашҡа саҡырған,
Мулла ашҡа саҡырған,
Анда бараһым да бар,
Бында бараһым да бар,
Түбән осҡа ҡунаҡ килгән,
Унда сығаһым да бар,
Тиҙ, тиҙ булһана!—

тип, бер урында һикереңкерәп атлап, ҡулдарын һелкеп тора. Бер кейендереүсе була. Ул «кейәүҙе» кейендерә башлай. Ә «кейәү» дауам итә:

Тәмәкемде ҡабып бир,
Бүректе кейҙереп бир,
Бишмәтемде кейҙереп бир,
Тунымды кейҙереп бир,—

тип, һаман тыпырҙап тора. Кейендереүсе «кейәүгә» тәмәке ҡабыҙа. «Кейәүҙе» кейендерә-кейендерә арып, хәле бөтөп, мышнай башлай. Шуға «кейәү»:

— Мин мышыйҙан тыумаған! — ти ҙә, тәмәкене ата ла ебәрә. Үҙе бер урында көйләп атлай. Яңынан һамағын ҡабатлай башлай:

Тәмәкемде ҡабып бир,
Тунымды туры итеп бир...

Тәмәкене ауыҙына ҡуйып, кейендереүсегә кире бирә. Тағын тунын атып бәрә. Әгәр кейендереүсе көлөп ебәрһә, «кейәү» кейемен тағын сисеп ташлай.

— Мин көлкөнән тыумаған!

Тағы кейемен сисеп ырғыта. Һамағын үҙе туҡтауһыҙ ҡабатлай:

Тиҙ, тиҙ булһана...

. . . . . . . . .

«Кейәүҙе» кейендергәндә арып, хәлдән тайып бөтәһең. Егеттәр, ҡыҙҙар бергә уйнай инек. Бөтәһе рәхәтләнеп көлә, ә кейендереүсе көлөргә тейеш түгел.

## 4. Зөбәйер уйыны

Бер кешегә ирҙәр кейеме (бүрек, бишмәт, ойоҡ, итек) кейендерәһең, билен билбау менән быуаһың. Кейендереүсе ғәҙәттә ҡатын кеше була. Кейендерелгән кешене «Зөбәйер» тип атайбыҙ.

Ир кешене кейендереү анһат түгел. Башын да тоттормай, аяғын да бирмәй. Үҙе бейеп тора, үҙе тәтелдәп тора:

Зөбәйер, Зөбәйер,
Кейендер ҙә сисендер,
Кейҙерегеҙ, кейҙерегеҙ,
Кейҙерегеҙ бишмәтте;
Быуҙырығыҙ, быуҙырығыҙ,
Быуҙырығыҙ билбауҙы;
Кейҙерегеҙ, кейҙерегеҙ,
Кейҙерегеҙ бүректе!

Түҙемле кеше генә шым ғына кейендерә. Түҙемһеҙе көлә. Көлһәң, бөттө инде. «Зөбәйер» булған кеше: «Мин иһаһай түгел!» — ти ҙә, сисенә лә ташлай. Һүҙ әйтһәң дә шулай итә.

## 5. Сәлимә, әйт әле!

Балалар ҡапма-ҡаршы теҙелеп баҫа. Бер ҡыҙ, бер малай уртаға сыға. Малай:

— Сәлимә, әйт әле, нисек ҡамыр баҫалар? — ти.

Сәлимә ҡулдары менән ҡамыр баҫып күрһәтә, ҡыҙҙар хәрәкәттәрҙе ҡабатлап, әйтеп тора:

Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай баҫалар!

Сәлимә:

— Салауат (төрлө исем), әйт әле, нисек утын бысалар?

Малайҙар утын бысыу хәрәкәтен яһай. Үҙҙәре һамаҡлай:

Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай бысалар!

Малай:

— Сәлимә, әйт әле, нисек бала биләйҙәр?

Ҡыҙҙар бала биләп күрһәтә:

Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай биләйҙәр!

Артабан, бесән сабыу, ҡар көрәү, йөн иләү, һыуға барыу һ.б. эш күренештәре уйнала. Аҙаҡтан барыһы бергә:

Бына шулай, бына шулай
Егәрлеләр йәшәйҙәр!— тип тамамлайҙар.

### 6. Аҡ ҡалас

Уйынды алып барыусы:

— Әйҙәгеҙ, «Аҡ ҡалас» уйнайбыҙ!— ти. Балалар, тотоношоп, йәһәт кенә түңәрәккә баҫа һала. Берәү уртала тора. Күмәкләшеп көйләп:

Үктәберҙең байрамына
Бешерҙек беҙ аҡ ҡалас.
Бына шулай йәйелгән!— тип әйтә-әйтә, һәр

береһе ҡулдарын мөмкин тиклем һуҙып, түңәрәкте йәйеп ебәрә.

— Бына шулай ҡабарған!— тип, бөтәһе лә тотошҡан ҡулдарын өҫкә күтәреп, түңәрәкте тарайта.

— Бына шулай беркешкән!

Ошо мәл уртала торған кешегә бөтәһе лә килеп беркешәләр, ҡулдары менән еңелсә төртәләр.

Аҫты шәкәр, өҫтө бал да,
Һөйгәнеңде һайлап ал!
**(Йәки: Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,**
**Теләгәнеңде ал да ҡас! — тиҙәр.)**

Урталағы кеше түңәрәктән берәйһен саҡырып, көй бөткәнсе әйләнеп ала, унан үҙе түңәрәккә баҫа, һайланған кеше «ҡалас» була. Һайланған кешегә «әсетке» бирәләр, йәғни: йырлаһын, бейеһен, шиғыр һөйләһен, тиҙәр.

**Йыр йырланғас, йәнәһе, «Аҡ ҡалас» маҡтаулы була. Ҡабармаған** —ҡабара, бешмәгәне — бешә һ.б. Башҡарыусыны маҡтап ҡуялар:

**Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,**
Тәмле була йырлағас!

### 7. Йүкәмәш

20-25 см оҙонлоҡта киҫелгән бер ус йүкәне бер кеше тотоп тора, шуның бер яғынан бер егет, икенсе яғынан бер ҡыҙ тарта. Әгәр икеһе лә бер үк йүкәне тартҡан булһа, улар үбешергә тейештәр. Әгәр бер төрлө йүкәне тартмаһалар, үбешмәйҙәр.

### 8. Оҙон урҙаш

Бер яҡ рәттә егеттәр, икенсе яҡта ҡыҙҙар теҙелеп баҫалар. Ҡаршы-ҡаршы йырлашалар, йыр сиратлашып башҡарыла. Кем төртмәле йыр таба алмай, улар йыр табыу өсөн ситкә китеп һөйләшеп, йыр табып килергә тейештәр.

## 9. Әбәк бирешеү

Ҡара-ҡаршы баҫып торалар ҙа йәрәбә ҡуйышалар, кем осҡа сыға, шул таҡмаҡлап, былай тип әйтергә тейеш:

Аҡ суҡ, күк суҡ,
Тиҙерәк сыҡ!

«Сыҡ» һүҙе кемгә барып ослана, шул кеше йүгереп ҡасырға тейеш, ҡасып ҡотолоп «ояһына» керһә — ул еңеүсе, тотолһа, еңелеүсе була. «Әбәк», тип әйтеп, иптәшенең ҡулбашына һуғыу (өлгөрөп ҡалыу), еңеүҙе аңлата.

## 10. Тәстәмби тартышыу

Ҡара-ҡаршы 4-әр, 5-әр пар баҫа. Һәр пар тартыша, кем урталағы һыҙыҡтан сыға, шул еңелеүсе булып теге яҡҡа барып баҫа.

## 11. Төлкө тартышыу



Ике яҡҡа тартышыу уйыны. Таҫтамалдың ике осонан 4-әр йә 5-әр кеше баҫып тартышалар. Ҡайһы яҡ уртаға һыҙылған һыҙыҡтан сыға, шулар еңелеүсе була.

## 12. Шылдырым

Дүрт тағанлашып, теҙелешеп ултыралар. Тубыҡ аҫтынан ғына әйбер ебәрелә. Бөтәһе лә: «Шылдыр китте»,— тигәс, ҡарауылда ултырған кеше әйбер кемдең тубыҡ аҫтында икәнлеген таба алмаһа, тағы ултырырға тейеш. Тапһа, ул да теҙелешеп ултырыусылар рәтенә барып тубыҡлана, ә кемдең тубыҡ аҫтынан табылһа, шул кеше ҡарауылға ултыра.

## 13. Йондоҙ һанау

Был күмәкләп уйнай торған уйын. Йәштәр бер өйгә йыйылышып төрлө уйын уйнайҙар.

Тундың тиҫкәре яғын әйләндереп, салҡан ятҡан кешенең өҫтөнә ябалар, ә еңенә таяҡ, тәртешкә кейҙереп өҫкә күтәреп ҡуялар. Һәм шул ең аша, кеше түшәмгә ҡарай. Шул ваҡытта алдан әҙерләп ҡуйылған һыуыҡ һыу шул еңгә ҡойоп ебәрелә. Ятҡан еренән теге кеше аҡырып-баҡырып, һикереп килеп тора. Китә шау-шыу, күмәкләп көлөшөү. Ошо уйын «Йондоҙ һанау» була.

## 14. Сума өйрәк, сумаҡай

Беҙҙең ауылдағы бер тауҙы Етемәк тауы тиҙәр. Ул тауҙың башында ҙур таш бар. Яҙ етеү менән, иң элек шул тауҙың бите ҡарҙан әрселә. Май байрамы көнө йәштәр шул Етемәк тауына менеп уйнай ине. Иң яратҡан уйын «Сума өйрәк, сумаҡай (сума ҡаҙ)» ине.

Был уйында уйнаусылар 10 пар йә унан да күберәк булырға мөмкин.

Егет менән ҡыҙ ҡапма-ҡаршы баҫалар ҙа йырлай башлайҙар. Бер егет йә ҡыҙ ишһеҙ ҡалырға тейеш.

Сума өйрәк, самаҡай,  
Сума өйрәк, сумаҡай.  
Әмир кемде ярата?  
Әмир кемде ярата?— тип йырлағас (йәки ҡыҙ исеме булһа ла ярай), егет (йә ҡыҙ) бер-береһе менән тотоношоп торған парлыларҙың ҡул аҫтынан үтеп, үҙенә оҡшаған бер ҡыҙҙы (ҡыҙ егетте) егеттән (ҡыҙҙан) айырып ала һәм уның урынына баҫа. Парһыҙ ҡалған егет тә (ҡыҙ ҙа) шулай йөрөй...

Егет (ҡыҙ) үҙенә пар һайлап алғас, ошолай йырлана:

Сума өйрәк, сумаҡай,  
Әмир Гөлкәйҙе ярата, ярата, ярата.

(Ҡыҙ пар һайлап алһа, егет исеме әйтеп йырлана.)

## 15. Биш пар



Был уйын кис, йәштәр клубҡа йыйылғас, гармунға ҡушылып уйнала. Дүрт пар ҡапма-ҡаршы баҫа һәм бишенсе пар уртала тора. Гармун уйнай башлағас, күтәрелгән ҡулдар аҫтынан бер-бер артлы үтә башлайҙар. Гармун туҡтағансы урын алып ҡалырға тейештәр. Урын алмаған ваҡытта тыпырлап бейеп торалар, урын алғанда ла бейейҙәр. Шул ваҡыт гармун кинәт туҡтай. Урынһыҙ ҡалған пар тағы ла гармун уйнаған арала урын алып ҡалырға тейеш. Уйын шулай дауам ителә.

### 16. Һыу ағыҙыу

Күмәкләп йыйылышҡанда уйнала был уйын. Бер пар бер иҙән таҡтаһынан ғына атларға тейеш. Иҙән ярығына баҫһа, уларҙан фантик алына. Аҙаҡ, фантиктар йыйылғас, наказдар бирелә.

### 17. Ебегән

Тәүҙә, шыбаға тотошоп, ҡасыусы менән баҫтырыусы билдәләнә. Ҡалғандар пар-пар булып түңәрәккә баҫа. Ә теге икәү әле түңәрәк эсенә, әле тышына сығып ҡыуыша. Бер кеше һанап тора:

— Бер, ике, өс... туғыҙ, ун! Ебегән!

«Ебегән!» һүҙе яңғырағас та ҡасыусы берәй парҙың алдына баҫа. Артта торғаны өсөнсө, йәғни, артыҡ кеше булып ҡала. Әгәр ул шунда уҡ йүгереп китә алмаһа, «Ебегән» була һәм ҡыуып килеүсенең үҙен ҡыуа башлай.

### 18. Ҡайыш уйыны

Егеттәр һәм ҡыҙҙар теҙелешеп, икешәрләп ултыралар. Бер егет ишһеҙ тороп ҡала. Уртала берәүһе ҡайыш тотоп йөрөй һәм ишһеҙ егеттән:

— Кем кәрәк?— тип һорай.

Егет:

— Зөлфиә кәрәк,— тип үҙенә оҡшаған ҡыҙҙың исемен әйтә.

Ҡайыш тотоп уртала йөрөгән егет Зөлфиә менән ултырған егеттән:

— Зөлфиәне бирәһеңме?— тип һорай.

— Бирмәйем!— тиһә, теге Зөлфиәне һораған егеткә:

— Зөлфиәне бирмәй, быға ниндәй наказ ?— ти.

Егет:

— Бер эҫе, ике һыуыҡ,— ти.

Ҡайыш тотҡан егет Зөлфиә менән ултырған егеттең усына бер ҡаты, ике мәртәбә йомшаҡ итеп ҡайыш менән һуға.

Әгәр егет Зөлфиәне бирергә риза булһа, Зөлфиә һораған егеткә китә, ә егет үҙенә оҡшаған ҡыҙҙы әйтә. Уйын шулай дауам итә.

## 19. Күрше уйыны

Был уйын шулай уҡ клубта бейешеп арығас уйнала. Уйнарға теләүселәр парлашып ултыралар. Уртаға бераү ҡайыш менән сыға. Теҙелеп ултырыусыларҙың ҡайһы яғына булһа ла теге, ҡайыш тотоп йөрөүсе, бара ла: «Татыуһығыҙмы?»— тип һорай. Әгәр улар: «Татыу түгелбеҙ», — тиһәләр, теге ҡайышлы кеше: «Кемдең күршеһе кәрәк?»— тип һорай. Ҡайышлы кеше былар кемдең күршеһен һораған, шуға бара ла: «Бирәһеңме? Һинең күршеңде һорайҙар»,— ти. Әгәр был парҙың баш кешеһе күршеһен бирергә теләмәһә, ҡайышлы кеше: «Бирмәй»,— тип, теге кешегә бара. Әгәр бирмәһә, һораған кеше усына ун ҡаты, биш йомшаҡ итеп ҡайыш менән һуҡтырта. Быны уртала йөрөгән кеше үтәй. Күршеләрҙең баш кешеһе генә ҡулына һуҡтыра, ә икенсеһенә һуғырға ярамай. Шунан һуң урталағы ҡайышлы кеше теҙелеп ултырыусы кешеләрҙең икенсеһенә китә. Уларҙан да: «Татыуһығыҙмы?»— тип һорай. Улар: йә татыу, йә татыу түгелбеҙ, тип яуап бирәләр. Татыу булмаһалар, баяғыса, икенсе парҙың күршеһен һорайҙар, ә татыу булһалар, шул көйө ҡалалар. Уйын шулай туҡтауһыҙ дауам итә. Был уйын уйнаусыларҙы ялҡыта башлаһа, уйнаусылар уны ҡалдыралар. Теге урталағы ҡайышлы кеше үҙ эшен башҡара алмаһа, уйын барышында ул икенсе кеше менән алыштырыла. Был уйын клубта ғына түгел, йәштәр йыйылған ерҙә, ҡайҙа булһа ла башҡарыла. Бигерәк тә эш өҫтөндә, бесән ваҡытында, кис, бөтәһе бергә йыйылғас уйнала.

## 20. Күршең татыумы?

Бөтә йәштәр ишләнешеп ултыра. Бер кеше ишһеҙ. Ул уртала ҡайыш менән йөрөй. Һәр бер парҙан һорай:

— Күршеләр татыу тораһығыҙмы?

— Беҙ татыу түгел,— ти, татыу булмаған пар.

— Кем кәрәк?— тип һорай урталағы кеше.

— Нәфисә кәрәк!— ти, татыу булмағандар.

— Бирәһеңме Нәфисәне? (Икенсе парҙан һорай.)

— Бирмәйем!— тиһә:

— Өстән бир!— ти, һоратыусы пар. (Уйынсы өс мәртәбә ҡайыш менән тегенең усына һуға.)

— Бирмәйем!— тип һүҙендә ныҡ торһа,

— Алтынын бир! — ти, һоратыусы пар (уйынсы алты мәртәбә һуға).

— Алтыһына ла түҙәрбеҙ!— ти, теге.

— Туғыҙҙан һуҡ! Ун икене һуҡ!— тип, дауам итә һоратыусы пар. Ошоға түҙһә, теге егет еңеп сыға, Нәфисәне үҙендә ҡалдыра. Һоратыусы артабан ныҡышһа, егет йырлап еңә.

Ҡайһы бераүҙәр шунда уҡ парын биреп ебәрә лә, үҙенә теләгәнен ала. Ҡайһы бераүҙәр өс һуғыуға ла түҙә алмай парын биреп ебәрә.

## 21. Йәшерәм яулыҡ

Йәштәр түңәрәк яһап теҙелешеп ултыралар. Уйын башлаусы яулыҡты ала ла, иптәштәренең артынан йөрөп, һиҙҙермәйсә берәйһенә

ташлап китә. Тегеһе һиҙгер булһа, яулыҡ ташлаусының артынан йүгерә төшә. Һиҙмәһә, яулыҡ ташлаусы үҙенең йырын йырлай-йырлай түңәрәкте әйләнеп килеп етә лә: «Әбәк!»— ти. Инде был кеше яулыҡ йөрөтә башлай:




Йәшерәм, йәшерәм, йәшерәм яулыҡ
Ете ҡайын аҫтына.
Һиҙҙермәйсә ташлап китәм
Бер иптәшем артына. 2 т.

Ҡара урманды үткәндә,
Әллә һуң аҙаштыңмы?
Йырлап һүҙең әйтә алманың,
Әллә һин алдаштыңмы?

## 22. Ҡыҙ урлау уйыны

Ҡыҙҙар, егеттәр ярым түңәрәккә баҫа. Көй башланыу менән, егет үҙе теләгәнен ала ла, йыр аша серен әйтеп, ҡыҙҙы түңәрәктә йөрөтә. Йыр бөткәнсе түңәрәктең икенсе яғына илтеп ҡуя. Шул ҡыҙ урлау була. Ҡыҙҙар ҡушылып йырлашалар.

Асып ебәр быялаһын —
Күгәрсен ояlаһын.
Әкрен баҫып кил ҡаршыма,
Кемдәрҙән ояlаһың?

Кейһәм дә тар, һалһам да тар
Аҡ ситса күлдәккәйем.
Һөйһәм, йыраҡ, ташлаһам, йәл,
Ни эшләтәйем, йәнекәйем?

Үткер ҡыҙҙар булһа, үҙҙәре йыр йырлап алып китәләр.

Сәхрәләрҙә йөрөгәнемдә,
Гөл сәскәгә буяндым.

Татлы йоҡом йоҡлағанда,
Һине һағынып уяндым.

Тәүәкәлләгән егет көй ыңғайы тағы ҡыҙ урлай. Ҡулынан тотоп йөрөтә.

Иртән тороп тышҡа сыҡһам,
Һандуғастар муйылда.
Иртәләрен дә кистәрен
Һин, йәнем, тик уйымда.

Алтын тараҡтары менән
Матур сәс тарауҙарың.
Йөрәгемдә йыр ҡалдыра
Күҙ һирпеп ҡарауҙарың.

Тәҙерәнән үтә күрҙем,
Һелкеп камзул кейгәнең.
Айға ҡарап ант ит, иркәм,
Юҡмы бүтән һөйгәнең.

Һәр береһе йырлап, теләгәнен алып, парлашып бөткәс, бер йырҙы бергә йырлайҙар:

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Уйнап, көлөп ҡалайыҡ.
Был ғүмерҙәр ике лә килмәй,
Ҡәҙерен белеп ҡалайыҡ.

Иҙел ярына һыймаған —
Яҙын ташҡан һыу икән.
Йәш ғүмерҙәрҙең уҙыуы —
Урғылып аҡҡан һыу икән.

### 23. Һандар саҡыра

Икешәрләп, парлашып егеттәр, ҡыҙҙар түңәрәк яһап ултыралар. Уртала ҡайыш тотҡан берәү уларға һандар әйтеп сыға: 5, 10, 15, 20, 25, 30, 35... ошо тәртиптә дауам итеlә.

Бер кеше парһыҙ тороп ҡала. Урталағы унан һорай:

— Ниндәй һан кәрәк?

Теге әйтә (мәҫәлән):

— Егерме.

«20» һаны ҡушылған кеше тегенең янына йүгереп килеп ултыра. Ул йүгергән ваҡытта урталағы кеше ҡайышы менән һуғып өлгөрһә, «20» һаны булған кеше уға фантик бирә, йәғни үҙенең ҡулъяулығын йә кәпәсен, йә йөҙөгөн ҡалдыра. Ә берәү ошо фантиктарҙы бер урынға йыйып бара. Парһыҙ ҡалған кеше тағы «һан» һорай, был «һан» да йүгереп килеп уның янына ултыра. Урталағы кеше һуғып өлгөрмәһә, унан (һуңғы парһыҙҙан) фантик алынмай. Фантиктар күбәйгәс, уларҙы

хужаларына ошо тәртиптә тараталар. Фантик йыйған кеше ,башҡаларҙан алынған нәмәләрҙе тотоп, уртаға сығып ултыра. Ҡайыш тотоп йөрөгән егет уға арты менән ултыра. Егет берәй әйберҙе тотоп, теге егеттән һорай:

— Был фантикка ни яза?

Тегеһе яуап бирә:

— Йырларға!

Теге кеше, йырлағас ҡына, нәмәһен ҡайтарып ала. Әгәр ҙә йырлауҙан баш тартһа, икенсе кеше үҙ теләге менән йырлап, был әйберҙе үҙенә «һатып» ала.

Тағы ла ошондай наказдар була: ятраҡан кешеһе менән йондоҙ һанарға сыҡһын; ятраҡан кешеһенең исемен әйтһен; тау башынан бүрәнә төшөрһөн (стенаға маңлайын терәп, өҫтән аҫҡа төшөрә); әтәс булып ҡысҡырһын; күгәрсен еме ашатышһын һ.б.

## 24. Күҙ ҡыҫыш

Был уйында парҙы әйтешеп түгел, ә күҙ ҡыҫып саҡыралар. Ул да «Күрше», «Ҡайыш», «Һан» уйындарының бер төрөнә инә.

## 25. Йырлы таяҡ

Түңәрәк яһап ултыралар. Уртала берәү йырлап ултыра. Түңәрәк яһап ултырғандарҙың береһенә таяҡ бирәләр. Таяҡ ҡулдан-ҡулға күсә. Һәр кем уны тиҙерәк күршеһенә бирергә тырыша. Сөнки йырлап бөтөр-бөтмәҫтән урталағы кеше:

— Һайт! Туҡта! — тип ҡысҡыра, һәм таяҡ кемдә ҡала, шул уртаға ултырып йырларға тейеш. Уйын яңынан ҡабатлана.

## 26. Шешә тәгәрәтеш

Уйынға ҡатнашыусылар түңәрәк яһап торалар. Бер кеше уртаға сыға һәм түңәрәктең ҡап уртаһына шешәне һалып өйрөлтә. Шешә өйрөлгәндән һуң туҡтай. Уның ауыҙы түңәрәктә торған кешенең ҡайһыһына ҡарап ята, шул кеше берәй һөнәр күрһәтергә (йырларға, бейергә, шиғыр, көләмәс һөйләргә) тейеш.

Уйын шулай дауам итә.

## 27. «У-ли-и!» уйыны

Малайҙар, ҡыҙҙар бергә уйнай. Башы ҡыя итеп дүрт яҡлап юнылған ағастың дүрт яғына ла һандар һуғыла: Мәҫәлән, 10, 100, 1000, 10000. «Көтөүсе» шул ағасты ситкә ташлап ебәрә. Үҙе уның артынан йүгерә. Ҡалғандары ошо мәлдә һанайҙар: 1, 2, 3 ... Әгәр ағас ергә төшкәнсе, бер оҙон тын бөткәнсе йүгереп барып, ергә ятып өлгөрһә, ул йүгереүсегә нумер һуғалар.

Шунан берәй шарт ҡуйыла: йүгерергә, һикерергә... Шарт үтәлгәс, икенсене йүгертәләр. Тағы ағас ташлайҙар. «Көтөүсе» тағы йүгерә. Һәр береһе йүгерә, ҡалғандары ағас ергә төшкәнсе һанай: бер, ике, өс... Әгәр һан буйынса иң артта ҡалған кеше булһа — уны үлиләтәләр. Быныһы тын алмайынса йүгерергә, үҙе өҙлөкһеҙ һуҙырға тейеш: «Ули-и-и-и!..» Әгәр ағас бик алыҫ һуғылһа, тын ала. Тын алған урындан тағы үлиләй... Бабайҙар әйтә ине: «Тын юлын үҫтерә торған уйын», тип.

## 28. Алтын ашыҡ

Төрлө төҫкә буялған ашыҡ һөйәктәрен теҙеп ҡуялар. Уларҙы таратып, ун аҙым самаһы киткәс, бер аҙ эйелә биреп, таяҡ менән һелтәп ебәрәләр. Кем бер һуғыуҙа ашыҡтарҙы йығып бөтә — шул мәргән була. Шунан уҙаҡлашып алалар ҙа «Һуҡыр тәкә», «Атыш» уйнайҙар, йүгерешәләр.

Түңәрәкләп баҫып, уртаға еңеүсе малайҙы (мәргәнде) алып, уның ашығына бөтәһе лә алмашлап һуға-һуға әйтеп торалар:




Алтын ашыҡ уйнайбыҙ,
Уйнайбыҙ ҙа ҡуймайбыҙ.
Батыр, мәргән дуҫыбыҙға
Теләк теләп ҡуябыҙ.
Салауат кеүек батыр булыр,
Салауат кеүек аҫыл булыр,
Салауат кеүек мәргән булыр,
Салауат кеүек сая булыр,
Салауат кеүек толпар атта
Ҡоштай осор ир булыр,
Илем тигән ир булыр!



## 29. Нумер уйыны

Уйын башлығы нумерҙар биреп сыға. Бер урын буш булһа, уйын башы ҡысҡыра:

— Бишенсе! Бер-ике-өс!

Шул арала «бишенсе», теге — буш урынға килеп ултырырға тейеш. Өлгөрмәһә, фантик бирә. Унан һуң, тағы нумер әйтелә: мәҫәлән, «Етенсе!» «Етенсе һан» теге урынға барып ултырырға тейеш. Өлгөрмәһә, ул да фантик бирә. Күп итеп фантик йыйылғас, һатыу башлана:

— Был фантикка ни наказ?— ти, уйын башлығы.

— Йырларға!

— Бейергә!

— Бер аяҡ менән ишеккә хәтлем барып, урап килергә!

— Кәзә булып баҡырырға! һ.б. наказдар үтәтелә.

Фантиктарҙы һатып алып бөткәс, яңы уйын башлана.

## 30. Тирмә

Уйында дүрт төркөм балалар ҡатнаша. Һәр береһе майҙандың дүрт мөйөшөндә түңәрәк ҡора. Түңәрәктәр эсенә ултырғыс ҡуйыла, өҫтөнә ҙур яулыҡ һалына. Бөтәһе лә ҡулға-ҡул тотоношоп, йырлай-йырлай, көй ыңғайына үҙ түңәрәктәре буйлап йөрөй башлай. Шунан дөйөм түңәрәк яһайҙар.

Беҙ, беҙ күп инек,
Бер урынға йыйылдыҡ,
Уйнай-уйнай, бейей-бейей,
Барыбыҙ ҙа юҡ булдыҡ!

Көй туҡтауға, барыһы ла йүгерешеп тиҙ генә үҙ урындарына баралар һәм яулыҡты баш остарына сатыр итеп тарталар. Шул «тирмә» була. Ҡайһы төркөм тиҙерәк килеп етеп «тирмә» ҡора — шул еңеүсе була.

## 31. Сәтәш

Уйын ҡоралы — ҡаҙ, өйрәк, тауыҡ сәтәше. Уйын ҡунаҡ йыйылған өйҙә ҡаҙ, өйрәк, тауыҡ менән һыйланғанда уйнала. Бөтәүләй бешкән ҡаҙҙы, өйрәкте йәки тауыҡты бик оҫта кеше өлөштәргә бүлә лә, һәр кемдең тәрилкәһенә өлөштәрҙе һалып сыға. Кемгә сәтәш тейгән, шул итен ашап бөтә лә, сәтәш һөйәген тотоп, кемгә булһа ла сәтәш айырышыуға мөрәжәғәт итә. Теге кеше ризалашҡас, нисә ҡабат отошоуҙан, отошҡас, һарыҡ, ҡаҙ йә башҡа әйбер менән түләргә шарт ҡуйышалар. Күп ваҡыт бер, ике, өс отоуҙан ризалашалар. Өстән дә артыҡ отошоу булмай. Ике уйынсы сәтәштең ике яғынан тоталар ҙа айыралар. Бөтәһе лә ҡеүәтләп ҡарап ултыра. Сәтәште айырып алғас, икеһе лә:

— Иҫеңде йот, мин отҡанда ҡарап ҡал,— тип бер-береһенә теләк

теләйҙәр. һәм сәтәш айырсаһын ауыҙға ҡабып алалар. Төкөрөп ҡуялар. Хәйләкәреләге шунда уҡ ота. Ул ҡулындағы сәтәш айырсаһын иптәше ҡулындағы сәтәш айырсаһына тиңләштереп ҡарамаҡсы булып: «Мәле, ҡайһыбыҙҙыҡы ҙурыраҡ икән!?»,— тигән булып, иптәшенә һона. Ул ала, әлбиттә. Ҡулына сәтәште тотоу менән: «Иҫемдә!»— тип әйтергә тейеш. Әгәр әйтергә онотһа, иптәше: «Сәтәш!»— тип ҡысҡырып ебәрә. Тимәк, был кеше отолдо. Был уйын ололар өсөн дә, балалар өсөн дә бара. Отолған кеше, сәтәште түләү өсөн, отҡан кешене ҡунаҡка саҡыра.

## 32 . Ҡул биреш

«Ҡул биреш» уйыны клубта йәки тауҙа уйнала. Ул бейеүҙәр менән аралашып килергә мөмкин. Был уйынды уйнағанда, егеттәр бер яҡҡа, ҡыҙҙар икенсе яҡҡа теҙелешеп ултыралар. Алып барыусы егеттәрҙең һәр береһенә уйында ҡатнашҡан берәй ҡыҙ исемен әйтеп сыға. Был эш белгертмәй генә эшләнә (исемдәр егеттәрҙең ҡолағына ғына әйтелә).

Ҡыҙҙар бер-бер артлы тора ла, үҙ исемен кемдә тип уйлай, шул кешегә ҡул бирә. Әгәр ҙә егет ҡулын бирмәһә, унда икенсе ҡыҙҙың исеме, әгәр бирһә, ҡыҙ дөрөҫ тапҡан була һәм улар урындарын алмаштыралар. Шулай итеп, бер-бер артлы егеттәр ҡыҙҙар урынына, ҡыҙҙар егеттәр урынына күсеп ултырып бөтә. Әгәр ҡыҙ өс тапҡыр барып та, исемен тапмаһа, ул фант (алып барыусыға йә яулығын, йә тарағын, йә йөҙөгөн) бирә. Уйындың дауамы шул рәүештә бара. Тик хәҙер инде ҡыҙҙарға егеттәрҙең исеме әйтелә һәм егеттәр «ҡул бирергә» тейеш була. Бер нисә тапҡыр шулай ҡабатланғас, фантиктарҙы таратыу — наказдар үтәү башлана.

## 33. Исем ҡушыу

Егеттәр бер яҡҡа, ҡыҙҙар икенсе яҡҡа, йәғни ҡара-ҡаршы ултыралар. Уйын етәксеһе уртала тора. Ул ҡыҙҙарға уйында ҡатнашҡан егеттәрҙең исемен ҡушып сыға һәм егеттәрҙе берәм-берәм ҡыҙҙар яғына ебәреп тора. Китеүсе егеттәр үҙе теләгән ҡыҙҙың алдына баҫа. Шул ваҡытта, ул үҙенең исеме ҡушылған ҡыҙҙы табып, алдына баҫырға тейеш. Әгәр ҙә ул тура барып тапһа, ҡыҙ менән урындарын алмаштыралар. Әгәр ҙә инде исеме ҡушылған ҡыҙҙы таба алмаһа, алдына барып торған ҡыҙ белдерә — егет урынына барып ултыра. Өс тапҡыр тура килмәһә, ул егеттән фант талап итәләр. Уйын бер нисә фантик йыйылғанға тиклем бара. Унан һуң инде фантик таратыу башлана. Уйындың етәксеһе үҙенә бер ярҙамсы алып, ҡайһы фантикка ниндәй наказ бирергә кәңәшләшә. Фантикты күрһәтмәҫ элек: «Был фантикка ни наказ?»— тип уйынсыларҙан һорай. Уйында ҡатнашыусылар наказ бирә. Фантик күрһәтелә һәм уның хужаһы наказды үтәргә тотона. Шул рәүешле фантиктар таратылып бөтә һәм уйын да тамамлана.

## 34. Наказ (фантик) уйыны

Теҙелешеп ултыралар. Уртала бер кеше тора. Ул һәр кешегә исем биреп сыға (мәҫәлән, Сейә, Алма, Груша һ.б.). Урталағы кеше:

— Ой!..— ти.

Ултырыусыларҙан берәү:

— Ни булды?

Урталағы кеше:

— Яратам!

— Нимәне? — ти, ултырыусылар.

Урталағы кеше:

— Сейәне!— тип әйткәс тә, «Сейә»: «Ой!»— тип әйтергә тейеш. «Сейә»: «Ой!» тип әйткәс тә, ултырыусыларҙан берәү:

— Ни булды?— тип һорай. Уйын, алда яҙылғанса, тағы ҡабатланып китә.

Әгәр ҙә урталағы кеше: «Сейәне!»— тип әйткәс тә, «Сейә» тиҙ генә: «Ой!»— тип әйтеп өлгөрмәһә (аңламайыраҡ йә ишетмәйерәк ултырһа), унан фантик алалар. Бер нисә фантик йыйылғас, наказ үтәйҙәр: кемдер бейей, йырлай йә шиғыр һөйләй.

## 35. Йүкә телефон

Уйынсылар теҙелешеп ултыралар. Урталағы кеше беренсе булып ултырған кешенең ҡолағына бер генә һүҙ әйтә (мәҫәлән, шкаф). Беренсе ултырған кеше — эргәһендәгегә, шулай итеп ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа әйтеп, аҙаҡҡа тиклем барып етәләр. Аҙаҡҡа барып еткәнсе, ул һүҙ күпкә үҙгәреп китә. Сөнки ҡайһы берәүҙәр йә яңылыш ишетә, йә булмаһа, ҡыҙыҡ өсөн икенсе һүҙ әйтеп ебәрә. Ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа әйтелеп бөткәс, урталағы кеше, аҙаҡ ултырған кешенән башлап ниндәй һүҙ әйтелгәнен һораша башлай. Кем һүҙҙе дөрөҫ әйтмәй, шул кешене яза өсөн иң аҙаҡҡа ултырталар.

## 36. Ҡабырсаҡ

Уйынсылар ике яҡҡа теҙелеп баҫалар, ҡулдарын сылбыр итеп тоталар. Бер яҡтағылар ҡулдарын һелкеп-һелкеп ҡысҡырып һамаҡлайҙар:

Ҡабыр-ҡабыр — ҡабырсаҡ,
Ҡабырсағым — тимерсәк!
Уҡ аттым, батманым,
Сәңгелсәгем ҡаҡманым.

Аҡ та тирәк, күк тә тирәк,
Энә менән еп кәрәк!
Ҡашығаяҡ йыуылмаған,
Аҡ тирмәләр йыйылмаған,

Еҙ самауыр ҡуйылмаған,
Беҙгә Сәкинә кәрәк!

Исеме әйтелгән ҡыҙ йүгереп барып, ҡаршылағы ҡулдар сылбырын өҙөргә тейеш. Өҙә алмаһа, ул ошо рәттә тороп ҡала. Өҙә алһа, бер уйынсыны алып китә.

### 37. Аҡ тирәк — күк тирәк

Ун бишләп кеше ике командаға бүленә: 1-се яҡ —«Аҡ тирәк», 2-сеһе —«Күк тирәк». Ике команда ике яҡта ҡулға-ҡул тотоношоп, ҡара-ҡаршы теҙелеп тора ла хор менән әйтешә. «Аҡ тирәктәр» башлай:

— Күк тирәк!
— Аҡ тирәк!
— Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

«Күк тирәктәр» берәй кешене һорап, исемен бергәләп ҡысҡыралар:

— Аҡ тирәк!
— Күк тирәк!
—Һеҙҙән беҙгә — Урал «батыр»,
шул кәрәк!

Урал «батыр», ҡаршы йүгереп барып, бәрелеп, «күк тирәктәр»-ҙең етәкләнешеп торған ҡулдарын өҙөргә, йәғни «ҡапҡаны» асырға тейеш була.

Әгәр «аса алһа», шул еңелгән («ҡапҡаның» уң яғындағы йә һул яғындағы) кешеһен үҙҙәренә — «Аҡ тирәктәргә» алып ҡайта. Ә аса алмаһа, үҙе «Күк тирәктәрҙә» ҡала.

Шулай уйын ҡапма-ҡаршы әйтешеп дауам итә. Бер яҡ еңелеп, бер генә кеше ҡалғас, ике команда кешеләре ҡушылып, ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк яһап өйрөләләр. «Беҙгә барыбер» һ. б. төрлө йырҙар йырлана.

Яңғыҙ ҡалған кеше арты менән түңәрәккә табан килеп берәйһенә төкәлә. Ул кеше түңәрәктән сығып, төкөүсенең командаһына инә. 7-8 кеше йыйылғансы шулай ҡабатлана.

Шулай итеп уйын тағы ла яңынан башлана.

### 38. Ал кәрәк, гөл кәрәк

Уйынсылар ике төркөмгә бүленеп, ҡулға-ҡул тотоношоп, ҡара-ҡаршы баҫа. Рәттәр араһы ун-ун биш метр була. Бер яҡтың «атаманы»:

Ал кәрәкме, гөл кәрәкме?
Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?— тип ҡысҡыра. Алаһы яҡтың «атаманы»:

Беҙгә алы ла кәрәк,
Беҙгә гөлө лә кәрәк.

Алынан да ҡиммәтерәк,
Гөлөнән дә ҡиммәтерәк,
Беҙгә Фәтиха кәрәк.

Исеме әйтелгән ҡыҙ һораған яҡтың сылбырын (тотоноштҡан ҡулдарҙы) өҙөргә тейеш. Булдыра алмаһа, үҙе шунда ҡала, өҙһә, бер кешене үҙ командаһына ҡуша.

Бер яҡ икенсеһенең кешеләрен алып бөткәс, еңеүсе яҡтың «атаманы» ҡулын йәйеп алға баҫа, ә ҡалғандар бер-береһенең биленә тағылып, уның артынан баҫа. Еңелгән команданың «атаманы» уларҙың ҡайһыһын тота, шул уның яғына сыға тора. Ә еңгән «атаман» берәүҙе лә бирмәҫкә тырышып, ҡоласын йәйеп, командаһын ҡурсылай. Тегеһе:

— Алам ҡош!— тиһә, быныһы:

— Бирмәм ҡош!— ти.

### 39. Батырың булһа, ебәреп ҡара

Уйынсылар «Аҡ тирәк, күк тирәк»тәге кеүек ишләнеп, ҡара-ҡаршы баҫа. Бер яҡ һамаҡлай:

Билән аша билге тота,
Батырың булһа, ебәреп ҡара!

Шунан бер яҡтан берәү сыға ла ҡаршы яҡҡа йүгерә. Ҡулдарын өҙһә, берәүһен үҙенекеләргә килтереп ҡуша.

### 40. Ат алыштырыу

Күп ҡыҙҙар, егеттәр етәкләшеп баҫа. Ҡаршы яҡ икенсе яҡтың бер уйынсыһын һорап ала. Һорау һамағы:

Ҡабыр-ҡабыр-ҡабырсаҡ,
Ҡабырсаҡта кимерсәк,
Аҡ тә кәрәк, күк тә кәрәк,
Аты яҡшы — шул кәрәк.

Һорап алынған уйнаусы йүгереп барып ҡаршы яҡтағы сылбырҙы (етәкләшкән ҡулдарҙы) өҙә һәм бер уйынсыны алып килә. Өҙә алмаһа, үҙе шунда тороп ҡала. Ҡаршы яҡта тик бер генә уйынсы ҡалыуы мөмкин. Ул осраҡта, күп яҡтағылар етәкләшеп түңәрәккә торалар ҙа әйләнә башлайҙар. Ә бер үҙе ҡалған кеше түңәрәккә арты менән килә лә уйынсылар тота. Ике яҡтың да уйынсылар һаны тигеҙләнгәс, уйын яңынан башлана.

### 41. Күрәҙәсе уйыны

Элегерәк, аулаҡта ултырғанда, егеттәр төндә аҙбарға сығып, һарыҡ тота торғайнылар. Бөтәһе лә тотоп бөткәс, утты яндыралар. Кем йәш һарыҡ тотҡан, шул йәш кәләш ала. Кем тәкә тотҡан, уның кәләше ҡарт була.

Ошо уҡ уйынды утын алып кереп тә уйнайҙар ине. Кем шыма ғына утын ағасы индерһә, уның кәләше матур була, кем ботаҡлыны индерә, уның кәләше шаҙра була.

## 42 . Алырым ҡош



Уйында ҡыҙҙар, еңгәләр ҡатнаша. «Инә ҡош» итеп бер еңгәне һайлайҙар. «Бала ҡоштар»— ҡыҙҙар була.

«Убыр әбей» таяҡ менән ҡаҙан болғап ултыра.

«Инә ҡош»:

— Әбей, әбей, ни болғайһың? — ти.

«Убыр»:

— Балаңды алам, ҡаҙанға һалам!— ти ҙә ҡыҙҙарҙы баҫтыра башлай.

Ҡыҙҙар бер-берһенә аллы-артлы тотоношоп «Инә ҡош» артына теҙеләләр ҙә «Убырҙан» ҡасып ҡотолорға тырышалар.

«Убыр»:

— Алырым ҡош, алырым ҡош,— тип теҙелгән «ҡошсоҡтарҙы» тотмаҡсы итә. Тотҡан берен ул үҙе янына ҡалдыра.

«Инә ҡош»:

— Бирмәм ҡош, бирмәм ҡош!— тип һамаҡлай-һамаҡлай «балаларын» ҡурсалай.

«Убыр» «Инә ҡоштоң» бөтә «балаларын»да алып бөткәс, «Инә ҡош» «Убыр»ҙан «балаларын» һатып ала башлай: йә йырлай, йә бүләк менән ымһындыра. Унан үҙе «серле таяҡ» менән түңәрәк һыҙа ла, шуның эсенә «балаларын» керетеп тултыра. Үҙе уларға киҫәтә:

— «Убыр» килһә осаһы булма, асаһы булма!— ти.

### 43. Арпа тапау

Өс урынға бағана ултыртыла. Күмәкләшеп егеттәр, ҡыҙҙар етәкләшә һәм бағана араларынан йүгерешә башлайҙар. Шәберәк йүгерергә тырышырға кәрәк, ләкин бағанаға теймәҫкә. Кем бағанаға тейеп ҡала, ул кеше уйындан сыға.

Бағаналар араһынан хәрәкәт итеү йүнәлешен башлаусы үҙе билдәләй.



### 44. Ҡул йүгереш



Ике кеше етәкләшеп тора, уларҙың алдына бер ишһеҙ кеше баҫа. Ҡаршы яҡта ла ошо рәүештә бер ишле, бер ишһеҙ тора. Етәкләшеп тороусылар, ҡулдарын ысҡындырып, ҡаршыла етәкләшеп тороусыларға табан йүгерәләр. Ә урталағы ишһеҙҙәр уларҙы тоторға тейеш. Әгәр тотһалар, үҙҙәре ишләнеп торалар.

### 45. Булдыҡһыҙ

Йәштәр парланышып, түңәрәк буйлап йырлашып йөрөй. Уртала бер кеше тора. Шул кеше ҡулын сапһа, йыр туҡтай, йәштәр парланыша. Урталағы кеше лә парланып өлгөрөргә тырыша. Кем парһыҙ ҡала, шул «булдыҡһыҙ» була. Хәҙер ул уртаға сыға. Уйын ошо рәүештә дауам итә.

### 46. Кәзәлей

Был уйында ике команда ҡатнаша. Ике команда ла ике рәткә теҙелеп тора һәм һәр команданан берәр кеше өсәр-дүртәр мәтәлләп әйләнә лә тора. Унан икенсеһе, өсөнсөһө ... һ.б. Кемдең командаһында күберәк йығыла, шул команда еңелгәнгә һанала.



## ЙЫРЛЫ, БЕЙЕҮЛЕ УЙЫНДАР

### 1. Тирмә-тау риттәйем

Беҙҙең Сәйетбаба ауылында сығарылған, ауылыбыҙға хас таҡмаҡтар бар. Улар дөйөмләштерелеп «Тирмә-тау риттәйем» тигән исем менән аталып йөрөтөлә. Заманында ауылыбыҙҙың оҫта таҡмаҡсылары: Мәнәүәрә Хәкимова, Ғәлиә Йосопова, Лотфулла Байбулдин, Әхәт Сәлимов — улар күптән донъя ҡуйғандар инде — әле иҫәндәре Зөһрә Шаһиева, Мәүлетбикә Сәйфетдинова, Зөһрә Ғәзизова, Миңлеямал Байбулдина, Барый Сираев һәм башҡаларҙың таҡмаҡтарын тыңлап, дәртле, сая бейеүҙәрен күреп үҫтем мин[1]. Малай сағымдағы ауылымдың сағыу, халыҡсан сәнғәт күренештәрен күҙ уңында тотоп, мәктәптең йыр һәм бейеү ансамбленә сценарий яҙҙым. Уны «Тирмә-тау сюитаһы» тип атаныҡ. Уҡыусылар ифрат ихласлыҡ менән таҡмаҡлайҙар һәм дәртләнеп бейейҙәр.

Был таҡмаҡтың бейеүе лә үҙенсәлекле. Уны күмәкләп, түңәрәк әйләнәһе яһап, парлашып бейейҙәр. Таҡмаҡсы (бер, ике, өс кеше булырға мөмкин) таҡмаҡ әйтә, уға «Тирмә-тау риттәйем, тирмә-тирәтирәлә...» тип ҡушылып, күмәкләп йырлап, бейеп китәләр. Ҡушымта ике тапҡыр ҡабатлана.

Ә бейеү — тыпырҙыҡ, күмәкләшеп, ҡуш айаҡлап сапҡан ат тояҡтары тауыштарын хәтерләтә. Сөнки уны бейеүселәр һикереп төшөп тыпырҙата. Ул тыпырҙыҡ (туҡылдатыу) башҡа башҡорт тыпырҙыҡтарынан ныҡ айырылып тора. Сөнки ул — беҙҙең тыпырҙыҡ, Мырҙаҡай тыпырҙығы.

Ниңә таҡмаҡ «Тирмә-тау риттәйем» тип аталған һуң? Билдәле булыуынса, беҙҙең ауыл халҡы йәйен бөтә бала-сағаһы, мал-тыуары менән, йәйләүҙәрҙә тирмәләр ҡороп, сыуал яғып йәшәгән. Улар тәбиғәттең иң матур төбәгендә — Мәндем йылғаһы буйындағы Түңәрәк ялан, Ҡыйбаҙы, Теләпәй, Ташкиҫкән һәм Үләтле уйһыулыҡтарында урынлашҡан. Кистәрен һәр кем үҙ туған-тумасаһына килеп, бөгөнгө эштәренә йомғаҡ яһап, иртәгәһенә план ҡороп, ҡымыҙҙарынан ауыҙ итеп, ҡорот кимереп, тирмә тирәһендә уйнап, йырлап, бейеп күңел асҡан. Күпселек бейегәндә, таҡмаҡлаусы һамаҡлауға күсә. Мәҫәлән, «ритти, ритти, ритти, ритти, ритти, ритти,ритти-рәм». Аңлауы-

---

[1]Информаторҙар күрһәткесен ҡарағыҙ.

быҙса, уйын-көлкө тирмә тирәһендә булғас, «тирмә-тирә, тирмә-тирә, тирмә-тирә, ритти-рәм» өҫтәлеп киткән. Унан һуң, бала-саға, ҡыҙ-ҡырҡындар тирмә-тирәһенән алыҫ китмәгән, сөнки һыу буйы, бейек-бейек ҡая-таштар, урманлыҡ, аҙашып китеүең дә бар.

Өләсәй, олатайҙар уларҙы гел генә:

— Тирмә тирәһендә генә уйнағыҙ! — тип, киҫәтеп торған.

Бала-сағаға тирмә тау һымаҡ тойолған. Ошоно тойомлап, үҙ-ара «Тирмә-тау риттәйем, тирмә-тирә, тирәлә», тип һамаҡлау барлыҡҡа килгән. Был һамаҡлау бөтә йәйләүсе ауылдаштарға ла оҡшаған. Бына шулай бәйән ителә беҙҙең йыр-таҡмаҡ:

Беҙҙең ауыл — ҙур ауыл,
Уртаһында һырғауыл.
Һабантуйына килегеҙ,
Мырҙаҡайҙа була ул.
Ҡушымта:
Тирмә-тау, риттәйем,
Тирмә-тирә, тирәлә,
Тирмә-тау, риттәйем,
Тирмә-тирә, тирәлә.
Тирмә-тирә, ритти-ритти,
Тирмә-тирә, тирәлә.
Тирмә-тирә, ритти-ритти,
Тирмә-тирә, тирәлә.
Сәйетбаба ауылында
Матур ҡыҙҙар үҫәләр.
Мырҙаҡайҙа йәш-елкенсәк
Бейеп, йырлап үҫәләр.
Ҡушымта.
Беҙҙең ауыл уртаһынан
Аға Өйә йылғаһы,
Эшләйбеҙ ҙә, йырлайбыҙ ҙа,
Беҙ — колхоздың хужаһы.
Ҡушымта.
Беҙҙең ауыл уртаһына
Совет күпер һалдырған,
Мырҙаҡайҙы Сәйетбаба тип,
Бер исемдә ҡалдырған.
Ҡушымта.
Ауылымдың тыпырҙығын
Һеҙгә бәйән итәйем.
Беҙҙең менән бер бейегеҙ,
Тирмә-тау, риттәйем!..
Ҡушымта.

Шулай итеп, таҡмаҡ беҙҙе уйнатты ла, йырлатты ла, бейетте лә.



**2. Тауға сығыу**

Элек, яҙ булды иһә, егеттәр, ҡыҙҙар йыйылышып, тауға уйынға сыға инек. «Ҡул ҡағыш», «Ҡапҡа асыу», йүгерешеп ҡыуышыу уйындары уйнай инек. Егеттәр алыҫтан уҡ ҡулъяулыҡтар болғап, йырлашып киләләр:

Йырҙар, көйҙәр ишетелә
Әрәмә араларында.
Ҡаршы килеп тә алмайһың
Әҙәм араларында.

Егеттәр ҡыҙҙар ҡаршыһына йырлашып килеп туҡтайҙар ине. Ҡыҙҙар:

Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исеме Муса ғына.
Уйындар күңелле була,
Һөйгәнең булһа ғына!

Егеттәр: Һеҙҙең лампа унлы икән,
Беҙҙеке бишле генә.
Беҙҙең һөйгән йәрҙәребеҙ
Үҙебеҙ ише генә.

Ҡыҙҙар: Ҡулъяулығың ҡыҙыл суҡ,
Яҡаларың йәшел суҡ.
Түңәрәктең уртаһына
Һөйгәнеңде әйтеп сыҡ!

Егеттәр: Һөйәм һине, һөйәм һине,
Һөйәм һине, алтыным.
Үлһәм, ҡәберемдән сығыр,
Һине һөйгән ялҡыным.

Ҡыҙҙар: Өфөләргә барам әле,
Өфө юлы асылһа.
«Уф, йөрәгем!» тимәм әле,
Әрнеүҙәре баҫылһа.

Егеттәр: Һағынам һине, илкәйҙе,
Һағынамын илкәйҙе.
Илкәй менән бергә һағынам
Йәштән һөйгән йәркәйҙе.

Ҡыҙҙар: Өфө тиһең дә ҡарайһың,
Өфө күренәме ни?
Күрмәй тороу менән генә
Күңел һүреләме ни?

Егеттәр: Тәҙерәнән ҡарайһың (да),
Ҡарап кемде таныйһың?
Ҡарап күҙең талдырғансы,
Ниңә сығып алмайһың?

Уйынға, кейәүгә сығып та әле оҙатылмаған ҡыҙҙар ҙа, ике-өс йыл ултырғаны ла, кейәүләп йөрөгән егеттәр ҙә сыға ине.

### 3. Өс йыр уйыны

Йомаҡ әйтелә. Йомаҡҡа яуап тапмаһалар, ҡыҙ менән егетте тышҡа сығарып ебәрәләр. Өй эсендә ҡалғандар өс йыр йырлай. Шул өс йыр бөткәнсе, ҡыҙ менән егет тышта торалар. Ошолай итеп, исемдәрен әйтеп үк таҡмаҡ ҡоялар ине:

Бал һалмаған батманға,
Балауыҙ ҡайҙан йәбешкән?
Миңниса менән Хәйрулла
Ҡайҙан килеп табышҡан?

Һин дә әллә кем түгел,
Мин дә әллә кем түгел.
Һинең әллә кем булыуың
Әжәлгә дарыу түгел.

Ап-аҡ ҡына бирсәткә
Кер йыуғанда булһа ине.
Ай-һай, ҡыҙҙар уйыны
Көндә шулай булһа ине!

## 4. Айҙар уйыны

Барыһы бергә ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк буйлап әйләнеп йөрөйҙәр һәм таҡмаҡ әйтәләр:




Яландарҙа ҡуҙғалаҡ.  
Тик бәхетле булһа ғына,  
Тыуһын икән ҡыҙ бала.  
һәлилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү.

Исемдәрен белмәйҙәр.  
Йөҙҙәремә ҡарайҙар ҙа,  
Ниңә һарғайҙың тиҙәр.  
һәлилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү.

Уртала әйләнеп, «һәли — һәли» тигәндә, парлашып тыпырлайҙар. Күмәкләп таҡмаҡлайҙар.

Ҡаралы кейгәндәрем.  
Үкенестәргә ҡалмаһын,  
Өҙөлөп һөйгәндәрем.  
    һәлилә-рәли-лә, һәләрилә-ләриләү.  
Ҡараға етәме ни?  
һөйәһем килмәй яттарҙы,  
һөйһәң йәр бөтәме ни?  
    һәлилә-рәлилә, һәләрилә-ләриләү.  
Исемдәрен беләһең,  
Сәхерә былбылдары булып,  
Төштәремә керәһең.  
    һәлилә-рәлилә...  
Гөл-сирень һыу яратмай.  
Дуҫтыҡайым мөхәббәтең  
Башҡаларға ҡаратмай.  
    һәлилә-рәлилә...  
Тар булды, килешмәне.

Башҡайҙарым йәш булһа ла
Ҡайғыға бирешмәне.
    Һәлилә-рәлилә...
Ҡарғалы ҡалҡыуҙары.
Айырылыуға миҫал булды
Һул ҡашым тартыуҙары.
    Һәлилә-рәлилә...
Исемдәре Гөлсөмкәй.
Бәндәләргә бәндә булып
Йөрөй микән, меҫкенкәй?
    Һәлилә-рәлилә...
Уфимский ҡәләмем.
Ай нурҙары, таң елдәре,
Илтһен һиңә сәләмем!
    Һәлилә-рәлилә...



## 5. Айҙар гизайым

Уйынсылар тотоношоп ҙур түңәрәк яһай. Уртаға бер йә ике кеше сыға. Таҡмаҡ әйтелә башлау менән, түңәрәк хәрәкәткә килә, урталағыларҙың һәр кеме үҙаллы бейей башлай. Таҡмаҡтың икенсе өлөшендә, беләкте-беләккә элешеп, тыпырлатып әйләнәләр. Икенсе таҡмаҡ баш-

ланғас та, урталағалар пар һайлай, унын икенсе яртыһында һайлағаны менән беләк элешеп бейешә. Шунан һуң тәүҙә уртала йөрөүселәр түңәрәккә баҫа. Улар саҡырып сығарғандары уйынды баштан башлай. Уйын шулай дауам итә.

«Айҙар гизайым»дың үҙ көйө бар:

Айҙар гизайым,
Вайҙар гизайым. } 2 тапҡыр

Урталағы йөрөгәндең
Исемен белһәң ине.
Исемдәрен белһәң ине,
Һөйгәнен күрһәң ине.

Айҙар гизайым,
Вайҙар гизайым. } 2 тапҡыр

Исемдәре, исемдәре,
Исемдәре Эрәшит,
Эрәшиткә барғың килһә,
Ата-әсәңә кәңәш ит!

## 6. Йәшелсә уйыны

1941-1943 йылдарҙа «кәбеҫтә», «һуған», «ҡауын» һ.б. булып уйнай инек. Берәү сығып таҡмаҡ әйтә:

Йәшелсәләр араһында
Иң тәмлеһе мин — «ҡауын».
Сәсеп үҫтер, сығарып һат,
Донъялар булыр уйын.

«Ҡауын» менән икенсе берәү бейеп әйләнә лә таҡмаҡ әйтә:

Йәшелсәләр араһында
Иң тәмлеһе сөгөлдөр.
Сәсеп үҫтер, сығарып һат,
Һөйгән ашың түгелдер.

«Сөгөлдөр» таҡмаҡ әйткәс, икенсегә баҫа.

Йәшелсәләр араһында
Иң тәмлеһе мин — «һуған».
Сәсеп үҫтер, сығарып һат,
Ашамаһаң ни булған.

Йәшелсәләр араһында
Иң тәмлеһе — кәбеҫтә.
Сәсеп үҫтер, сығарып һат,
Егәрлегә кем етә?!

### 7. Сәриә уйыны

Көйҙөң яртыһына берәү өйрөлөп барып, берәйһен һайлап ала, икенсе яртыһына тыпырлайҙар.




1. Килә илаһыларым,
Сәриә*!
Килә илаһыларым,
Һандуғас балаһы!

Төштәремә лә кермәне,
Сәриә!
Былай булаһыларым,
Һандуғас балаһы!

2. Алдарыма килдеңме ни,
Сәриә!
Алтын бағанаҡайым,
Һандуғас балаһы!

Һеҙҙең менән үтә ине,
Сәриә!
Йәшлек заманаҡайым,
Һандуғас балаһы!

*Һәр ике юл ике рәт ҡабатлана.

3. Күгәрсендәр байҡап оса,
Сәриә!
Ауылымдың урамын,
Һандуғас балаһы!

Һинең һағынғанды beләм,
Сәриә!
Төнөн йырлап уҙаһың,
Һандуғас балаһы!

### 8. Парлы уйыны

Бер яҡта — егеттәр, икенсе яҡта ҡыҙҙар ике рәт булып теҙелеп торалар. Тәүҙә егеттәр йырлай:

Селтәр элдем ситәнгә,
Елбер-елбер итәргә.
Беҙ килмәнек буш китәргә,
Килдек алып китәргә.

Йүгереп барабыҙ ҙа берәйһен алып китәбеҙ. Шунан тағын егеттәр йырлай ҙа йүгереп килеп, берәй ҡыҙҙы алып китәләр. Ҡыҙҙар:

Ал кәрәк, гөл кәрәк!
Гөлзифа исемле ҡыҙ кәрәк,—

тип тә әйтеп алалар.

### 9. Киндер туҡмау

Ҡыҙҙар киндер туҡмаған ергә гармундарын, скрипкаларын алып егеттәр килеп етә. Етенде, сүс епте туҡмаҡ менән туҡмайҙар, шул туҡыу үҙе дәртле көй-һамаҡ менән оҙатыла. Ике ҡыҙ етенде туҡмап, икеһе урап тора. Ҡыҙҙар йырлай:

Киндер туҡма, киндер туҡма —
Бөрсөктәре ҡалмаһын,
Ағай-эне, апһындарҙың
Күңелдәре ҡалмаһын.
Әллиләү, әллиләү генәйем,
Әллиләү, әллиләү генәйем!

Киндер көйөнә бейеп тә китәләр. Ике-өс ҡыҙ бейеһә, ҡалғандары киндер туҡмауҙы дауам итә. Киндер бейеүендә төп хәрәкәт — тыпырлау. Йә туҡмаҡ тауышына оҡшатып, йә туҡмауҙың туҡыу рәтенә тура килтереп, төрлө ҡатмарлы быуындар яһап тыпырлайҙар.

Киндер туҡма, киндер туҡма,
Тауышы китһен Әй буйлап.

Айырылғанда, һағынғанда,
Иҫкә төшөрөрбөҙ йырлап.
Әлиләү, әлиләү генәйем,
Әлиләү, әлиләү генәйем.

Егеттәр ҡыҙҙарҙың тыпырлағанын ҡарап торалар ҙа туҡмаҡ алып үҙҙәре һуға-һуға ирештерергә керешәләр:

Эй туҡмағым, туҡмағым,
Әйләндерә һуҡманым,
Әйләндереп һуғып инем,
Килешмәне туҡмағым!

Бейе, бейе, бейе, бейе,
Тура килһә хәлеңдән.
Тура килмәһә хәлеңдән,
Йән көйҙөрөп йөрөмәң!

Бейе, бейе, бейе, бейе,
Тура килһә хәлеңә.
Гармунға ул кем бейемәй,
Бейе туҡмаҡ көйөнә.

Ҡыҙҙар сәмләнеп, туҡмаҡтарын егеттәргә бирәләр ҙә түңәрәккә төшөп, бил яҙып, үҙҙәре әйтмешләй, «киндер тапап алалар». Киндер тапау — туҡмаҡты хәтерләтеп аяҡтар менән дөбөрҙәтә баҫыу, тыпырлатыу. Халыҡта уны «типата баҫып бейеү», тиҙәр. Үксәгә һалып тыпырлау түгел, ә бөтөн табан менән аяҡтарҙы алмашлап, көй ыңғайына ныҡ итеп баҫыу.



### 10. Тула баҫыу

Йәштәр ҙур түңәрәк яһап, тотоношоп бер яҡҡа әйләнәләр. Уртала торған дүрт кеше тотоношҡан хәлдә, икенсе яҡҡа әйләнә. Бөтәһе лә йырлай. (Был йырҙың үҙенә генә хас көйө бар. Уны был уйындан башҡа йырламайҙар.)

Алын алғанда ғына ла,
Гөлөн алғанда ғына ...

Ошолай итеп йырлағас та бөтәһе лә туҡтала, ҡушымта таҡмағы башланыуға, урталағы дүртәү ҡаршылаштары менән ҡушарлап әйрөләп бейей башлай. Ҡалғандар, йәғни оло түңәрәктәгеләр, ҡул сабып тора. Таҡмағы:




Их, тула, тула, тула,
Тула баҫырға була.
Уйнамаған кешеләрҙе
Уйнатырға ла була.

Таҡмаҡ ошо ергә еткәс, урталағы дүртәү оло түңәрәктән берәр кеше ала ла таҡмаҡтың артабанғы өлөшөндә шулар менән ҡушарлап бейей (йәғни хәҙер түңәрәк уртаһында дүрт пар әйләнә була). Улар әйләнгәндә ошолай тип әйтәләр:

Рас, рас, еще рас!
Гармун, ҡурай көйҙәренә
Ана шулай, әйҙә баҫ!
(Ана шулай, өҙә баҫ).

Ошо таҡмаҡ бөтөүгә, тәүҙә уртала булған дүрт кеше оло түңәрәккә баҫа, улар саҡырып сығарған дүрт кеше уртала әйрөлә башлай. Ошо мәлдә генә иң тәүҙә башлаған көй-таҡмаҡтың аҙағы әйтелә:

... Күтәрелә күңелдәрем,
Дуҫтар булғанда ғына.

Шунан йәнә:

Их, тула, тула, тула,
Тула баҫырға була,
Уйнамаған кешеләрҙе
Уйнатырға ла була.

Был таҡмаҡ бер йә ике тапҡыр әйтелергә мөмкин, ул саҡта был яртыһы ла әйтелә:

Рас, рас, еще рас!
Гармун, ҡурай көйҙәренә
Ана шулай, әйҙә баҫ,
Ана шулай, өҙә баҫ!

Тула уйынында төрлө-төрлө таҡмаҡтар әйтелә.

1. Күпер күтәрелмәй ул да,
Күпер күтәрелмәй ул.

Ҡ у ш ы м т а:

Рас, рас, еще рас!
Гармун, ҡурай көйҙәренә
Ана шулай, әйҙә, баҫ,
Ана шулай, өҙә баҫ!
УйнамаҒас та көлмәгәс,
Күңел күтәрелмәй ул.

Ҡ у ш ы м т а.

2. Гөлдәрҙе ал итәбеҙ ҙә,
Алдарҙы гөл итәбеҙ.

Ҡ у ш ы м т а.

Килгән машиналар менән
ЦелинаҒа китәбеҙ.

Ҡ у ш ы м т а.

3. Ал биргәндә алманың да,
Гөл биргәндә алманың.

Ҡ у ш ы м т а.

«ЦелинаҒа әйҙә» — тинем,
Ә һин, иркәм, барманың.

Ҡ у ш ы м т а.

4. һанаһаң-һанамаһаң да,
Гармун теле ун ике.

Ҡ у ш ы м т а.

Уйлаһаң, уйламаһаң да,
Йәш Ғүмер килмәй ике.

Ҡ у ш ы м т а.

5. Уйлаһаң, уйламаһаң да,
Йәш Ғүмер килмәй ике.

Ҡ у ш ы м т а.

ЦелинаҒа китмәй ҡалдың —
Түгелһең һин минеке.

Ҡ у ш ы м т а.

6. Ҡунаҡҡа килегеҙ, дуҫтар,
Иркен Ғүмер итәбеҙ.

Ҡ у ш ы м т а.

Ошо бәхетле тормошто
Һеҙгә лә күрһәтәбеҙ.

Ҡ у ш ы м т а.

## Б

Ҡыҙҙар, егеттәр тотоношоп түңәрәктә йөрөй. Уртала — ике егет менән ике ҡыҙ. Улар әүернә билдәһе яһап, тотоношалар ҙа түңәрәк әйләнгән йүнәлештең киреһенә әйләнәләр. Түңәрәктәгеләр «Төймә» көйөнә йырҙың тәүге ике юлын ғына әйтәләр:

Беҙҙең ауыл телеграмм
Бағанаһын кем ҡуйған?..

Артабан таҡмаҡ әйтеп:

Һеҙҙә тула баҫалармы?
Беҙҙә тула баҫалар.
Һеҙҙә нисек, беҙҙә шулай,
Уйнап күңел асалар.

Шул таҡмаҡҡа урталағылар ике пар булып бейеп алалар. Таҡмаҡ бөткәс, шул дүртәүҙең һәр береһе, түңәрәктән берәүҙе алып төшөп, әйләнә. Улар әйләнгәндә, былай тиҙәр:

Рас, рас, еще рас,
Гармун, ҡурай көйҙәренә
Ана шулай, өҙә баҫ.

Был ҡушымта ике тапҡыр әйтелә. Артабан башта башланған йырҙың һуңғы ике юлы әйтелә.

Һөйгән йәрен — ғәзиз йәнен
Ҡасан кем күреп туйған?

Уйын шулай дауам итә.

## В

Борон тула баҫҡанда:

Салауат килә ята, ти,
Тула һуға һалайыҡ!
Салауат килә ята, ти,
Тула баҫа һалайыҡ! —

тип, таҡмаҡлай торғайнылар. Тәүге таҡмаҡты дүрт тапҡыр ҡабатлағандан һуң, бер ҡыҙ әйтә:

— Салауат үлгән бит! Шуны һаман көтәһеңме?

Ҡалған ҡыҙҙар күмәкләшеп илашып ала:

— И-и-и!

Шунан теге ҡыҙ тағы ҡысҡыра:

— Юҡ, юҡ, Салауат тере ти. Ул инде ҡайтып килә ти.

Шунан бөтә уйынсылар ҙа ҡыуанышып, таҡмаҡ әйтеп, бейешеп алалар:

Салауат килә, ти,
Тула һуғып алайым,
Салауат килә, ти,
Ҡаршы сығып алайым...

Борон Салауат исеме тыйылған булған. Шуға ла уйынсылар уйынды «Сәүәлин уйыны» тип кенә йөрөткән. Уның «Салауат уйыны» тигәнен дә хәтерләүселәр бар.

«Салауат»— аулаҡ урын, аулаҡ ер тигәнде аңлатҡан. Күрәһең, уйындың исеме тәүҙә «ауалаҡ (аулаҡ) уйыны» булғандыр. Аҙаҡ уны Салауат Юлаевтың шәхесенә бәйләгәндәрҙер ҙә рифмалаш Салауат һүҙе менән алмаштырғандарҙыр.

## 11. Тула таҡмаҡтары




**А**

Эх, тула, тула, тула,
Тулала ҡыҙҙар була.
Тулалағы ҡыҙҙар менән
Күңел асырға була.

Һеҙҙә тула баҫалармы?
Беҙҙә тула баҫалар.
Һеҙҙә нисек, беҙҙә шулай,
Бейеп күңел асалар.

Эх, тула, тула, тула ла,
Ҡара тула ла була.

Өҫтөң бөтөн, тамағың туҡ —
Әйҙә, дула ла дула.

Аҡ та була, күк тә була
Беҙҙең баҫҡан тулалар.
Һөйәһеңме, һөймәйһеңме —
Һөйә тигән булалар.

Эх, тула, тула, тула,
Шулай тигән булалар.
Ап-аҡ була, йомшаҡ була
Мәрйәм баҫҡан тулалар.

Б

Тула,тула, тула, тула,
Тулала ҡыҙҙар була.
Ашап, эскән ваҡыттарҙа
Билмән закуска була.

Яҙ ҙа тула баҫабыҙ,
Көҙ ҙә тула баҫабыҙ.
Йырламайса ултырғандың
Йырлап күңелен асабыҙ.

## 12. Таҡмаҡ әйтешеп, ҡара-ҡаршы бейеү

Ике рәткә теҙелеп, ҡара-ҡаршы баҫалар. Көй башланыуға, берәйһе: «Егеттәр башлай!» — тип ҡысҡырып ебәрә. Егеттәр тотоношоп, ҡыҙҙарға ҡаршы бара-бара йә урындан ғына тороп, таҡмаҡ әйтә башлайҙар:

Аласа күлмәк кейгәстин,
Алдын ҡарайһы килә.
Бөтә ҡыҙ бергә булғастин,
Таҡмаҡ әйтәһе килә!

Уларға ҡыҙҙар таҡмаҡ менән яуап бирә:

Һайыҫҡан ала була,
Ҡойроғо ҡара була.
Кәләш алмаған егеттең
Яғаһы ҡара була.

Егеттәр: Урман эсенән килгәнһең,
Урман әйәһе кеүек.
Танауыңды күтәргәнһең,
Ҡырғыҙ дөйәһе кеүек.

Ҡ ы ҙ ҙ а р: Ике егет бесән саба,
Үтәр-үтмәҫ салғыһы.
Үтәр ине шул салғыһы,
Ҡыҙҙа уның ҡайғыһы.

Е г е т т ә р: Ҡулдарымда тальян гармун,
Уйнай белмәйбеҙ генә,
Дуҫтар менән күңелле икән,
Ҡәҙерен белмәйбеҙ генә!

Ҡ ы ҙ ҙ а р: Француз яулыҡ бөтә, тиҙәр,
Парлап алып ҡалайыҡ.
Йәш ғүмерҙәр үтә, тиҙәр,
Уйнап-көлөп ҡалайыҡ.

Е г е т т ә р: Ағиҙелдең аръяғында
Балан сатырҙары бар.
Ялындырма, яныҡайым,
Һинән матурҙары бар.

Ҡ ы ҙ ҙ а р: Ағиҙелдең аръяғында
Йәйәү йөрөйһөм килә.
Һөйә микән, һөймәй микән,
Шуны беләһем килә.

Е г е т т ә р: Бишмәт сисеп, тун кейгәнһең,
Туңарым тигәйнеңме?
Мине ташлап, етты һөйөп,
Уңарым тигәйнеңме?

Ҡ ы ҙ ҙ а р: Бишмәт кейгән, биш ҡат кейгән,
Унда ла тирләмәгән.
Һиңә тигән матур йәрҙәр,
Миңә лә — сирләмәгән.

Е г е т т ә р: Һөйәм һине, һөйәм һине,
Һөйәм һине, алтыным.
Үлһәм, ҡәберемдән сығыр,
Һине һөйгән ялҡыным.

Ҡ ы ҙ ҙ а р: Өфөләргә барам әле,
Өфө юлы асылһа.
«Уф, йөрәгем!»— тимәм әле,
Әрнеүҙәре баҫылһа.

Таҡмаҡтар әйтешеп, ҡыҙып китеүгә, барыһы бер түңәрәккә ҡушыла. Инде түңәрәктең эсендә бейегән һәр кешегә атап таҡмаҡ әйтә башлайҙар, ҡалғандары сәпәкәй итеп, ҡултыҡлашып үҙ урындарында әйләнәләр.

Бейе, бейе, бейе, бейе —
Бейегәнгә бер тауыҡ.
Ул да булһа — һауын тауыҡ,
Һөтөн эсерһең һауып.

Ары баҫҡан аяғыңды
Бире баҫһаң ни була?
Һылтау табып бейемәйсә,
Тик ултырһаң ни була?

Бер-береһен мәрәкәләү, дуҫтарса көләү оҙаҡ ҡына барғандан һуң, «Яулыҡ сөйөү» уйыны башлана. Сөйөлгән яулыҡ көй ыңғайы ҡулдан ҡулға йөрөй. Ҡурайсы, гармунсы кинәт көйҙө (таҡмаҡсы таҡмағын) өҙә. Көй туҡтағанда, яулыҡ кемдә була — шуға йә йырларға, йә бейергә, йә башҡа һөнәр күрһәтергә наказ бирелә.

## 13. Йүккәгүр[1]

Йәштәр ҡара-ҡаршы баҫа. Иң оҫта гармунсы йә иң оҫта ҡурайсы уртаға баҫып: «Йүккәгүр!»— тип ҡысҡырып ебәрә, һәм ҡыҙҙар йырлай башлай:




Уйна, дуҫым, гармуныңды —
Гармун үҙебеҙҙеке!
Йүккәгүр!

Ҡ у ш ы м т а:
Йүккәгүр, йүккәгүр генәйем,
Йүккәгүр, йүккәгүр генәйем.
Тыпыр-тыпыр баҫайыҡ та —
Тәпәй үҙебеҙҙеке!
Йүккәгүр!

Ҡ у ш ы м т а.

[1]Йүккәгүр — ҡайһы бер райондарҙа йүккә күр,— тип йырланыла. (Нотаны ҡарағыҙ.)

Е г е т т ә р: Аяғында ҡатаһы,
Аяғында ҡатаһы.
Йүккәгүр!

Ҡ у ш ы м т а.

Һөйгән йәрҙәрең булмаһа,
Ҡайтаһы ла ятаһы!

Ҡ у ш ы м т а.

Егеттәр ҡыҙҙарға барып ҡаршы баҫалар ҙа парлашып өйрөләләр.

Е г е т т ә р: Һандуғасым, һайрама,
Һандуғасым, һайрама.
Йүккәгүр!

Ҡ у ш ы м т а.

Һөйгәнең бында булмаһа,
Һөймәгәнде һайлама!
Йүккәгүр!

Ҡ у ш ы м т а.

Ҡ ы ҙ ҙ а р: Ал микән, микән, микән,
Гөл микән, микән, микән!
Йүккәгүр!

Ҡ у ш ы м т а.

Һөйөү өсөн бераү еткән,
Кәрәкмәй миңә бүтән!
Йүккәгүр!

Ҡ у ш ы м т а.

Ҡыҙҙар егеттәргә ҡаршы барып баҫып өйрөләләр, унан егеттәрҙе алып, әйләнеп тыпырлайҙар. Таҡмаҡ әйтеү дауам итә.

### 14. Станок

Икешәрләп, ҡапма-ҡаршы тотоношоп, түңәрәк яһап торалар. Бер пар түңәрәк уртаһында әйләнә. Уйында ҡатнашыусылар йырлайҙар. Таҡмаҡтың икенсе яртыһында урталағылар әйләнеп килеп, теләгән парға баҫалар. Шул ваҡыт барыһы ла аяҡтарын алмаштырып, көйгә баҫалар.

Баҫ, әйҙә, станокка,
Тауыштары сыңлаһын.
Әйҙә, әйҙә, нығыраҡ баҫ,
Тракторҙар тынмаһын.

Икенсе пар уртаға сыға. Уйын шул тәртиптә артабан дауам итә.

## 15. Удар уйыны

Уйынсылар ишләнешеп, ҡара-ҡаршы теҙеләләр ҙә уң ҡулдарын күрешкәндәгесә тотошалар. Ишһеҙ ҡалған кеше тәүҙә бер оста тора.

Таҡмаҡ башланыу менән, ҡулдарын ҡыйыҡ яһап торған рәттәр араһынан үтә. Ул үтә бара, ҡулдар кире төшә бара һәм көй ыңғайына бәүелә. Таҡмаҡтың тәүге яртыһында ишһеҙ уйынсы үҙенә иш таба һалып, рәттәрҙең арғы осона үтә һәм ише менән бeләк элешеп, туҡытып, рәткә баҫа. Ишһеҙ ҡалған кеше рәт араһынан кире. бирге осҡа сыға һала ла, яңы таҡмаҡ башланыуға уйынды яңынан башлай.



«Удар» уйынында әйтелеүсән таҡмаҡтар:

Ана килә автомобиль,  
Тейәгәндәр беҙәлек[1].  
Һине һөймәй, кемде һөйһөн,  
Билдәрең шундай нәҙек.

Ул йырыңа — ул йырым,  
Был йырыңа — был йырым.  
Миңә төртөп таҡмаҡ әйтмә,  
Ун йырыңа — бер йырым.

## 16. Балыҡ бейеүе

Уйын башында ҡулға-ҡул тотоношоп, бәүелеп, таҡмаҡлап тораһың да, ҡушымта башланыуға, теләгән кешеңде алып, түңәрәктең эсендә бейейһең.

Роза, роза,  
Роза гөлдөң сәсәге.  
Хәҙерге матур тормоштоң  
Күңелле киләсәге.

## 17. Әйҙәр уйыны

Кисен егеттәр, ҡыҙҙар уйынға ырҙынға йә баҡса артына сығалар. Түңәрәккә баҫып, таҡмаҡ әйтеп бейейҙәр:

[1] Беҙәлек (диал.) — беләҙек.

Бейергә лә мин оҫта,
Йырларға ла мин оҫта.
Инде эшкә ҡушһалар,
Мин ауырыу, мин ҡаҫта[1].
Әйҙәр генәйем,
Бәйҙәр генәйем. } 2 тапҡыр

Түңәрәк уртаһында бейеүсе таҡмаҡ әйтә, ә аҙағында, ҡалғандары ла ҡушыла.

### 18. Жим-жим, зимәни

Кругта бер ҡыҙ йөрөй һәм:

— Жим-жим, зимәни,
Икәү әйләник әле,—

тип әйтә лә бер егетте алып, өйрөлөп бейегәндән һуң, түңәрәктән сыға. Уның урынына ҡалған егет тә:

Жим-жим, зимәни,
Икәү әйләник әле,— тип икенсе кешене алып

төшә. Урталағы «зимәни»ҙе әйтеп, кеше алып төшөп бейегән арала, түңәрәктәгеләр йырлай:

Һандуғасҡай — һары-ала,
Һауаларға китеп юғала.
Бер бәхетле бәндә үҙ илендә,
Бер бәхетһеҙ китеп юғала.

Һандуғас, мәхлүк, ай, ояла,
Оялары йәшел быяла.
Кемдең йәре, кемдең малы
Кемдән ҡалмай фани донъяла?

### 19. Эйелмә-бөгөлмә уйыны

Түңәрәк уртаһына ике кеше сыға (түңәрәк ҙур булһа, дүрт кеше). Йырҙың тәүге өлөшөндә түңәрәктәгеләр етәкләшеп, урталағылар көйгә туҡыта-туҡыта эйәртенешеп йә тотоношоп, түңәрәк буйлап йөрөй. Йырҙың «Эйелмә-бөгөлмә...» тигән өлөшөндә түңәрәк туҡтап тора, ә урталағылар үҙҙе-үҙе (һәр береһе) бер кеше ҡаршыһына барып, туҡытырға тотона. Ә ҡаршыһындағы алға сыға, туҡытыусы менән беләккә беләк элеп йә беләктән тотоношоп, таҡмаҡ бөткәнсе өйрөлә лә уртаға сығып, уның урынына баҫа. Уйын яңынан башлана.

«Эйелмә-бөгөлмә» таҡмаҡтары:

Ҡара костюмдарын кейеп,
Ултыра кәнсәләрҙә.

[1] Ҡаҫта (диал.) — яуыз уйлы, үсле.

Пропадать итмәбеҙ әле,
Нападать итһәләр ҙә.

Ҡушымта: Эйелмә, бөгөлмә,
Матур баҫа түгелме.
Унын матур баҫыуҙары, } 2 тапҡыр
Күңел аса түгелме.

Ҡара костюмдарын кейгән,
Белай костюмың ҡайҙа?
Һин бер үҙең генә түгел,
Товарищтарың ҡайҙа?

Ҡушымта: Эйелмәле-бөгөлмәле,
Уфаның күперҙәре.
Яна йәш йөрәкәйҙәрем, } 2 тапҡыр
Күренмәй төтөндәре.

Агиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын,
Бала өйрәктә(й) ҡаршы йөҙәлмәй.
Ултырып та йырлап мин ебәрәм,
Шул нужаҡайҙарға түҙәлмәй.

## 20. Ағыстакан (Аҡ стакан)

Ағыстакан биле нәҙек,
Биле нәҙек була ул.— (2 тапҡыр)
Уҡымайса наҙан ҡалһаң,
Үкенесле була ул.— (2 тапҡыр)
Елдәр алды, талға уралды
Ал батист яулыҡҡайым.— (2 тапҡыр)
Йөрәгемдең саф ерендә
Ҡалдың шул, бәғеркәйем.— (2 тапҡыр)
Ағыстакан, биле нәҙек,
Биле нәҙек була ул.— (2 тапҡыр)
Артыҡ мөхәббәт кәрәкмәй,
Үкенесле була ул.— (2 тапҡыр)
Ҡайғыларым, ҡайғыларым,
Ҡайғыларым ҡайнайҙар.— (2 тапҡыр)
Минең ҡайғым күпкә күрә
Ҡоштар моңло һайрайҙар.— (2 тапҡыр)

Уйынсылар парланышып тотоношоп, ҡара-ҡаршы теҙелешеп, күмәкләшеп йырлайҙар. Араһынан береһе (кемдең пары юҡ) үҙенә оҡшағанын һайлап ала ла алға сығара. Хәҙер улар иң беренсе тора. Ә кем ишһеҙ ҡала, шул яңынан үҙенә пар һайлап, уны алға сығара. Хәҙер улар алда тора. Бына шулай бер туҡтауһыҙ урындарын алмаштырып торалар. Ә ҡалғандар был ваҡытта таҡмаҡлап, тыпырлатып тора.

## 21. Гөлнәзирә

Ай ли, Гөлнәзирә,
Матур баҫа түгелме?
Матур баҫып бейеүҙәре,
Күңел аса түгелме?
Исемдәрен беләһең,
Ай ли, Гөлнәзирә,
Исемдәрен беләһең.
Сәхрә былбылдары булып,
Төштәремә керәһең.
Уйыңдағын миңә бир,
Ай ли, Гөлнәзирә,
Уйыңды миңә бир,
Мин уйымды һиңә бирәм,
Һин уйыңды миңә бир.
Ай ли, Гөлнәзирә,
Ай түгел, ураҡ бит ул.
Уралтып-уралтып уйнай,
Йәш йөрәк дурак бит ул.

«Гөлнәзирә» уйынын «Ағыстакан» уйыны кеүек уйнайҙар. Тик көйө генә үҙенә айырым.

## 22 . Наза

### А

Ҡатнашыусылар икешәрләп ҡапма-ҡаршы теҙелешеп тотоношалар ҙа ҡулдарын бәүелтеп, таҡмаҡлайҙар:




Сепарат әйләндерә,
Клубтарға килеп керһә,
Клубты йәнләндерә.

Ҡушымтаны әйткәндә, ишһеҙ ҡалыусы кеше рәттәрҙең арғы осонан берәүҙе етәкләп, бирге оска үтеп, туҡытып, ҡара-ҡаршы баҫалар. Улар бейей-бейей үткәндә, башҡалар ҡул сабып торалар.

Ҡушымталарҙан өлгөләр:

Наза, Наза,
Наза — матур ҡыҙ бала.
Наза уҡый, Наза яҙа,
Наза ударник була.

Наза, Наза,
Наза — матур ҡыҙ бала,
Стахановсы егеттәр
Һөйә торған замана.

Наза, Наза,
Наза ҡара пәлтәле.
Кеше йәрҙәре кешегә
Йәр буламы, әйт әле?

### Б

Йәштәр икешәрләп (ғәҙәттә егет менән ҡыҙ), бер-бер артлы тотоношоп баҫалар. Берәү (парһыҙ кеше) алға сыға һәм көй ыңғайына таҡмаҡ әйтә. Шунан бейей-бейей парҙар араһынан үтә лә, үҙенә оҡшаған кешене алып, артҡа барып баҫа. Ә парһыҙ ҡалған кеше тағы алға сыға һәм шулай уҡ таҡмаҡ әйтә. Башҡалар урындарында бейеп торалар һәм таҡмаҡты күтәреп алалар. Бындай осраҡта көлкөлө таҡмаҡтар (берәүгә төрттөрөп сығарылған һ.б.) әйтелә:

Бейек тауҙың баштарында
Осоп йөрөй ыласын.
Һағынғанын шунан беләм —
Йәйеп килә ҡоласын.

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Салауат.
Эш өҫтөндә булһа ине
Пружиналы карауат.

Простой яулыҡ — яулыҡмы ни,
Кашимире булмағас.
Простой һалдат — егетме ни,
Офицеры булмағас.

Көйәнтәле биҙерәне
Буяғандар дегеткә.
Хәҙер ҡыҙҙар ғашиҡ була
Бер ҡарауҙа егеткә.

## В

Уйынсылар икешәр-икешәр тотоношоп бер һыҙыҡҡа теҙелә. Теҙемдең башында «кәләш һайлаусы» йәки «кейәү һайлаусы» була. Көйгә һалынып таҡмаҡтар әйтелә. Таҡмаҡ бөткәс, «һайлаусы» аралыҡтан барышлай берәүҙе алып сыға.

Таҡмаҡтар:

Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исемдәре Хөббөтдин,
Һине уйлап бара инем,
Бер соҡорға һоп иттем.

Ҡ у ш ы м т а:

Наза, Наза,
Наза — матур ҡыҙ бала,
Ударница, комсомолка,
Һәр эштә алдан бара.

Шырпы ҡабы, шырпы ҡабы,
Шырпы ҡабы бушаған.
Беҙҙең ауыл егеттәре
Шүрәлегә оҡшаған.

Ҡ у ш ы м т а.

Ай менән ҡояш араһы
Утыҙ ике саҡырым.
Утыҙ ике саҡырымда
Йөрөй минең матурым.

Ҡ у ш ы м т а.

Тау башында тимер ҡапҡа
Асыла ла ябыла.
Төндә йөрөгән егеттәргә
Һуҡыр мәрйә табыла.

Ҡ у ш ы м т а.

Аръяҡта ла энәлек,
Бирьяҡта ла энәлек,
Һеҙҙең кеүек егеттәргә
Йөрөмәйбеҙ инәлеп.

Ҡ у ш ы м т а.

Умывальник, умывальник,
Умывальник һыу һорай.
Кисә генә танышҡайныҡ,
Бөгөн ҡулъяулыҡ һорай.

Ҡ у ш ы м т а.

Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исемдәре Зөбәржәт.
Ҡартайһа ла йәр һөйәләр,
Сығарғандар бер ғәҙәт.

Ҡушымта.

Мояныҡы бигерәк сумарт,
Кофта-юбка подарил,
Через мосты сыҡҡан саҡта
Палка менән ударил.

Был уйын 20-се, 30-сы йылдар тирәһендә барлыҡҡа килгән. Ә таҡмаҡтарҙың араһында һуңыраҡ сығарылғандары ла бик йыш осрай.

Һыйырға ла, һарыҡҡа ла
Селхозналог һалынған.
Ҡәһәр һуҡҡыр, туҡал кәзә
Үҙе барып яҙылған.

Һуңғы йылдарҙа ғына сыҡҡан таҡмаҡтарҙы ла осратырға мөмкин:

СПТУ-ға киткән ине
Ике күҙе тупайып.
СПТУ-нан ҡайтып килде
Күк бәлтәгә ҡупайып.

г

Бейеүҙә ҡатнашыусылар парлашып, аллы-артлы теҙеләләр. Иң арттағы берәү ҡулдар аҫтынан бара-бара ла күңеленә ятҡан ҡыҙҙы (ҡыҙ егетте) алып китә. Ә был ваҡыт таҡмаҡ әйтәләр. Ҡушымтала («Наза, Наза» башланғанда) бөтәһе лә тыпырлашып, урындарында әйләнешеп алалар.

Селтәр элдем ситәнгә,
Елбер-елбер итәргә.
Беҙ килмәнек тик китәргә,
Килдек алып китәргә.
Ҡушымта:
Наза, Наза,
Наза — матур ҡыҙ бала.
Кеше йәрен тартып алып,
Һөйә торған замана.
Агиҙелгә томан төшкән,
Ҡараңғы төшкән кеүек.
Уф, яна йөрәккәйҙәрем,
Уттарға төшкән кеүек.

Ҡушымта.

Ағиҙелдәргә күләгә —
Ағиҙел ҡамыштары.
Беҙ тигәнсә булһа ине
Хоҙайҙың яҙмыштары!

Ҡ у ш ы м т а.

Алдарын алға манам,
Гөлдәрен гөлгә манам.
Уҡы, иркәм, шоферлыҡҡа —
Һин шофер булһаң, барам.

Ҡ у ш ы м т а:
Наза, Наза,
Наза —матур ҡыҙ бала.
Стахановсы егеттәр
Һөйә торған замана.

Ҡушымтаны әйткәндә, икәү ике рәттең уртаһы аша сығып, артҡа баҫа. Ҡалғандар көй ритмына ҡул сабып торалар. Ике яҡ ҡапма-ҡаршы яҡтан сыға. Арттағылар алға килеп, тағы ишләнә.

Зәңгәрләтә, зәңгәрләтә,
Зәңгәр йөрөтә беҙҙе.
Зәңгәр болоттарҙа йөҙгән
Айҙан эҙләйем һеҙҙе.

## 23. Ғына ла

Был уйынды бик ярата инек беҙ, бөтә яҡты ҡайнатып уйнай инек. Егеттәр, ҡыҙҙар ҡара-ҡаршы баҫабыҙ, ҡуш ҡуллап тотоношабыҙ. Берәү парһыҙ рәт алдында тороп ҡала. Көй ыңғайына ул берәйһен барып ала ла ошо рәтте йырып сығып китә. Кем парһыҙ тороп ҡала, шул ситкә сыға ла «штрафной» ала, йәғни бейей. Ә теге пар рәт эсендә барғанда, таҡмаҡ әйтелә.

Үҙеңдең парыңды ебәрмәҫ өсөн тартышаһың әле, көс менән ҡаршы тораһың. Әгәр теләгәнен һайлап алып та ҡулды ысҡындыра алмаһа, егет фантик алып кире бара. Теге кешегә бүләк биреп, теләгәнен ала-ла. Ә кем ҡулын ысҡындырған, шул үҙенә пар алырға бара. Ошо ваҡыт көйләп таҡмаҡ әйтеп торалар:

Иҙел бит ул, Иҙел бит ул, ғына ла,
Иҙел бит ул киң бит шул, ғына ла.
Иҙел уртаһында йөҙгән, ғына ла
Аҡҡоштарға тиң бит ул, шул, ғына ла.

Парҙар көй ыңғайына ҡулдарын һелкеп, аяҡтары менән тыпыр-тыпыр баҫып торалар.

Алма бешкән, өҙөлөп төшкән, ғына ла,
Алма бешкән, өҙөлөп төшкән, ғына ла,
Күгәрсен башын тишкән шул, ғына ла.— (2 т.)

Матур ҡыҙҙар һайлай торғас, ғына ла,
Матур ҡыҙҙар һөйләй торғас, ғына ла,
Сәстәренә аҡ төшкән шул, ғына ла.— (2 т.)

Төрләһенә төрләнән төртмә таҡмаҡ әйтә инек:

Һыуға барһаң, һыуһыҙ ҡайтма, ғына ла,
Һыуға барһаң, һыуһыҙ ҡайтма, ғына ла.
Һынды көйәнтәм тиеп шул, ғына ла,
Һынды көйәнтәм тиеп шул, ғына ла.
Бер әйтмәһәң, бер әйтерһең, ғына ла,
Бер әйтмәһәң, бер әйтерһең, ғына ла.
Тәүге һөйгәнем тиеп шул, ғына ла,
Тәүге һөйгәнем тиеп шул, ғына ла.

## 24. Сылбыр

### А

Берәү уртаға сыға һәм бер уратып бейегәс:

— Сылбыр!— ти ҙә бер-бер артлы ике иптәшенә баҫа. Артабан тегеләре икенсе кешегә баҫа һәм шулай итеп оҙон «сылбыр» барлыҡҡа килә. Бейеүселәр һаны таҡ һандарға (7, 9, 11 һ.б.) еткәс, гармун уйнаусы ҡапыл туҡтай. Шул ваҡытта егеттәр һәм ҡыҙҙар тиҙ генә парлашып өлгөрөргә тейеш. Кем парһыҙ ҡала, шул кеше йә яңғыҙ бейергә төшә, йә фант бирә һәм шунда уҡ наказ үтәй.

Бейеү шулай дауам итә. Уны икенсе төрлө лә бейейҙәр. Музыка туҡтағас, бөтәһе лә тиҙ генә ултырырға тейеш. Кем иң аҙаҡ ултыра — шул бейергә төшә. Йәки былай уйнайҙар: бер-нисә (ғәҙәттә 11—13) кеше йыйылғас, түңәрәк яһайҙар. Шунан икешәрләп бейейҙәр ҙә киләһе көйгә уртаға йыйылалар.

### Б

Уйынсылар теҙелешеп баҫалар ҙа етәкләшәләр. Бер пар уйынды башлай. Ул кешеләр араһынан үтеп-сәтеп йөрөй, ҡалғандар уның артынан эйәрә. Бөтәһе лә таҡмаҡлай:

Баҫ, баҫ, әйҙә станокка,
Тауыштары сыңлаһын...
Әйҙә, әйҙә, нығыраҡ баҫ,
Тракторҙар гөрләһен...

## 25. Марш уйыны

Тәүҙә берәү етеҙ бейеп йөрөй ҙә үҙенә иш саҡыра. Уның менән алды-артлы теҙелеп барып, тағы берәүҙе саҡыралар. Шулай күп булып киткәс, ҙур түңәрәк яһайҙар. Алып барыусы командир була. Ул бейеүҙең башынан аҙағына тиклем һәр яңы хәрәкәтте ҡысҡырып әйтеп тора:




— Общий круг! (Барыһы бер түңәрәктә бейей.)
— Кругом! (Барыһы ла үҙ урынында әйләнә.)
— Обратно! (Бөтә түңәрәк икенсе яҡҡа табан әйләнә.)
— Уже круг! (Түңәрәк ҡыҫыла.)
— Шире круг! (Түңәрәк йәйелә.)
— Сомкнись! (Парлашалар.)

Түңәрәк йөрөү ҡабатлана. Шунан яңы көйгә тағы команда бирелә:

— Танцы по парам! (Һәр береһе үҙ ише менән әйләнеп бейей. Көй күпме бара, шулай бейешәләр. Команда булмай тороп, яңы бейеү быуынын башламайҙар.)

— В круг! (Бөтәһе түңәрәккә тотона.)

— Меняться парами! (Парҙар менән алмашыналар.)

— Девушки на право! Парни налево! (Ҡыҙҙар егеттәргә ҡара-ҡаршы теҙеләләр.)

— Вперед! (Ҡыҙҙар ҡаршы килеп, үҙ парҙарын эләктерә һалып әйләнәләр.)

— Парни вперед! (Егеттәр ҡаршы килеп әйләнәләр.)

— Крест-накрест! (Бөтәһе менән алмашынып бейеп әйләнергә тейештәр.)

— Все вперед! (Ике рәт бер-береһенә ҡаршы килеп тыпырлайҙар.)

— Общий круг! (Бер түңәрәктә әйләнәләр.)

— Разойдись! (Барыһы тарала, уйын бөтә. Ошо командanан һуң уйынсылар ишләнә ала, ишһеҙ ҡалғанды «яза»ға тарттырыу ҙа мөмкин.)

## 26. Нагу-нагу бейеүе

Йәштәр уйынды башларҙан алда уҡ, берәйһе ҡысҡырып ебәрә:

— Нагу уйнайбыҙ!

Бөтәһе лә түңәрәккә баҫа. Көй ыңғайына тыпырлатып, таҡмаҡ әйтеп бейейҙәр. Берәү түңәрәк эсендә бейей-бейей ҙә исеме әйтелгән ке-

шене төшөрә. Улар беләктәренә тотоношоп әйләнәләр. Унан һуң сакырыусы түңәрәккә тотона, ә исеме әйтелгән кеше уртала кала. Икенсе кешенең исеме әйтелгәс, унын каршыһына баҫып бейей, бергә өйрөлөп, янынан түңәрәккә тотона. Калғандар такмак әйтә:




Ары ла баҫа Харрас,
Бире лә баҫа Харрас. (2 т.)
Нагу-нагу көйҙәренә
Өҙә баҫа Харрас! (2 т.)

Такмак бөтөүгә, Харрас икенсе кешене сакыра.

Ары ла баҫа Зилә,
Бире лә баҫа Зилә. (2 т.)
Нагу-нагу көйҙәренә
Өҙә баҫа Зилә! (2 т.)

Такмактарҙа исеме әйтелгән кешене төрләсә мактау йә еңелсә шаяртып көлөү ҙә була.

Ары ла баҫа Камали,
Бире лә баҫа Камали. (2 т.)
Нагу-нагу көйҙәренә
Баҫа алмай самалай! (2 т.)

Ары ла баҫа Хәмит,
Бире лә баҫа Хәмит. (2 т.)
Нагу-нагу көйҙәренә
Баҫа алмай, вәт кәмит! (2 т.)

Ары ла баҫа Сәйҙә,
Бире лә баҫа Сәйҙә. (2 т.)
Нагу баҫыр рәтең булһа,
Тағы ла баҫ, әйҙә! (2 т.)

Ары ла баҫа дуҫтарым,
Бире лә баҫа дуҫтарым. (2 т.)
Нагу-нагу көйҙәренә
Өҙә баҫа дуҫтарым! (2 т.)

Гармунсының тирен һөртөп торған ҡыҙҙар була. Улар инде оҫта итеп төртмә таҡмаҡтар әйтә:

Ағиҙелдәр тар әле лә,
Аҡһа киңәйер әле лә.
Ике битең, нурлы йөҙөң
Ситтә һарғайыр әле! — (2 т.)

Алма турайым, алма турайым
Алманың түңәрәген дә.
Осоп барып күрер инем,
Йәнейем, күбәләгем дә.— (2 т.)

Их-ма, алмағас,
Рәхәт кәләш алмағас.
Һөйҙөм-һөйҙөм дә ташланым
Мөхәббәте булмағас.

Анау килгән машинаға
Тейәгәндәр таш күмер.
Әкерен генә һиҙҙермәйсә,
Үтә бит ул йәш ғүмер! — (2 т.)

### 27. Әлләрәлем, жәлиә

Ҡыҙҙар ярым түңәрәк булып баҫалар. Уйын башы берейһен саҡыра ла өйрөлөп, тыпырлап таҡмаҡ әйтә:

Айыуҙарҙың анаһы...
Һеҙҙе бында кем саҡырған,
Ҡурҡылыҡ бағанаһы!

Әлләрәлем, жәлиә,
Гөлнәзирә, Йәмилә!

Уға ҡаршы таҡмаҡ әйтеп, икенсеһе сыға:

Африка төлкөһө...
Кешенән көлгән була бит —
Үҙе әҙәм көлкөһө!
Әлләрәлем, жәлиә,
Гөлнәзирә, Йәмилә!
Аҡ балаҫтан кәм түгел
Быйыл баҫҡан тулалар.
Мин уртаға сыҡҡас ҡына
Уйнамаған булалар.
Әлләрәлем, жәлиә
Гөлнәзирә, Йәмилә!

һәр бер таҡмаҡ әйткәндә өйрөлөп, бармаҡ шартлатып ҡуялар. Түңәрәктә булған ҡыҙҙарҙың исемен дә ҡушып ебәрәләр:

Ҡулында бейәләйе,
Ҡулдарында бейәләйе,
Был кемдең һөйгәнәйе?!
    Әлләрәлем, Кәримә,
    Гөлзаһира, Йәмилә!

Бер-береһенә төрттөрөп таҡмаҡтар әйтәләр. Уҙышып әйтәбеҙ, тыпырлап та торабыҙ үҙебеҙ.

Баҫың үҙемә генә,
Ҡара күҙемә генә.
Бер гармунсы кәрәк икән
Унын үҙенә генә.
    Әлләрәлем, жәмилә,
    Гөлнәзирә, Йәмилә!

## 28. Зил-зил, зиләйлүк!

Йәштәр — ҡыҙҙар, егеттәр — бергәләшеп түңәрәккә баҫалар. Талғын ғына көй ыңғайы етәкләшеп йөрөйҙәр ҙә ҡушымта өлөшөндә бергәләшеп тыпырлайҙар. Уйын башлаусы уртаға сыға ла берәүһен саҡыра. Беләктәрен ырғаклап' әләктерешеп, икенсе ҡулдары менән бармаҡтарын шартлатып болғап әйләнәләр.






Алыҫтарҙан күренеп ята
Беҙҙең колхоз ҡырҙары.
Эшкә батыр, төҫкә матур
Беҙҙең ауыл ҡыҙҙары!

Ҡ у ш ы м т а:

Зил-зил, елдәр иҫә, зиләйлүк,— (2 т.)
Зиләйлүктең биле нәҙек, биле нәҙек,
Зиләйлүктең ҡулдарында beләҙек.

Алма бөрөлө, алма бөрөлө,
Алма бөрөлө була, йәнейем.
Йән яратҡан, күңел тартҡан
Йәр бер генә була , йәнейем!

Ҡ у ш ы м т а.

Тәҙрә быялаларына
Исемкәйеңде яҙам.
Һин йәнемде төштә күреп,
Йоҡлай алмай уянам.

Ҡ у ш ы м т а.

## 29. Кәриә-Закария (Зәкәриә)

Көй ыңғайына түңәрәктә йөрөйҙәр. Уртала берәү бейей. Таҡмаҡтың ҡушымтаһы әйтелгәндә, ул бер кешене түңәрәктән алып, уның менән әйләнә. Унының түңәрәк эсендә бейергә ҡала, башлаусы түңәрәккә баҫа. Бындай саҡта әйтелеүсән таҡмаҡтар:




Һыу буйында тал булмаһа,
Һандуғас ҡунмаҫ ине.

Сәүит выласы булмаһа, } 2 т.
Беҙгә көн булмаç ине.

Ҡушымта:
Кария-Закария кимая,— 2 т.
Каркум, Закаркум, } 2 т.
Закария кимая!

Беҙҙең мәктәп баштарына
Ҡыҙыл фылаг эленгән.
Һигеҙенсе мартҡа хәтле } 2 т.
Ҡатын-ҡыҙҙар иҙелгән.

Ҡушымта.

Беҙҙең клуб баштарына
Ҡыҙыл фылаг эленгән:
«Бөтә донъя эшселәре, } 2 т.
Берләшегеҙ!»— тиелгән.

Ҡушымта.

Күгәрсендәр ергә төшә
Бергәләп гөрләшергә.
Ил фылагы — елбер-елбер, } 2 т.
Саҡыра берләшергә!

Ҡушымта.

**Кәриә-Зәкәриә***




Кәриә*




*Кәриә-Зәкәриә таҡмаҡтарының йырлау варианттары.




## 30. Дөп-дөп, дөмәнит

Уйында ҡатнашыусылар ҡулға-ҡул тотоношалар ҙа һалмаҡ көй ыңғайына түңәрәктә әйләнәләр.







Бейек тауҙың баштарында
Теҙелеп үҫкән әнистәр.
Теҙелеп үҫкән әнис кеүек,
Йәшәһен камунистар.

Ҡушымтала туктап, уң аяҡтары менән көй ыңғайына баҫалар:

Дөп-дөп, дөмәнит,
Иң юғары самолет! (Ҡулдары менән күккә күрһәтәләр.)

Артта артиллерия! (Түңәрәктән артҡа ҡул менән күрһәтәләр.)

Алда кавалерия! (Алға күрһәтәләр.)
Бына хәҙер әйләнәм дә,
Бына хәҙер әйләнәм.

(Бөтәһе лә тыпырлап үҙ урынында әйләнә.)

Бейек тауға менәбеҙ,
Менәбеҙ, ултырабыҙ.
Биш йылға тигән планды
Дүрт йылда тултырабыҙ!

Ҡ у ш ы м т а.

Бейек тауҙың баштарынан
Бер таш таптым беләүгә.
Үҙебеҙ элгән байраҡты
Төшөрә алмаç бераү ҙә!

Ҡ у ш ы м т а.

**31. Өйрөлөү**



Уйынсылар түңәрәк яһай (ултырған йә торған килеш). Урталағы бер пар таҡмаҡтың тәүге өлөшөндә талғын ғына бейей, икенсе өлөшөндә, тотоношоп, ҡыҙыу итеп әйләнә-әйләнә туҡыта.

Икенсе таҡмаҡтың икенсе яртыһы етеүе була, урталағы парҙар ике кешене саҡырып сығаралар ҙа ике пар булып, тотоношоп, зыр әйләнәләр.

Уйындың беренсе өлөшө



Икенсе өлөшө



Өсөнсө өлөшө



## 32 . Круг уйыны

Уйындағылар бөтәһе лә ҡулға-ҡул тотоношоп, атлап ҡына түңәрәк буйынса өйрөлөп йөрөй. Ике йәки өс, хатта дүрт кеше уртала, түңәрәк эсендә була. Ситтә йөрөгәндәр таҡмаҡ әйтә. Уға урталағылар ҙа ҡушылырға мөмкин, әлбиттә. Ошо йырланған көйгә урталағылар үҙ-ара, икәү булһа — икеһе, әйләнәләр. Шунан икенсе көйҙө уйнағанда, йырлағанда, улар түңәрәктән һайлап икенсе кешеләрҙе алып сығалар. Улар тағы ла шулай беренсе көйгә бейейҙәр, ә икенсе таҡмаҡ әйтелгәндә, түңәрәктән үҙҙәре теләгән кешене алып бейейҙәр. Уйын шулай арығансы дауам итә. Был уйынды уйнағанда бейеү көйөнә йырлана. Ҡыҫҡа, өс юллы таҡмаҡтар әйтелә:

Командир ат эйәрләй.
Ниңә тороп ҡалдым икән,
Арттарынан эйәрмәй?

Исемдәре Бикә — бик,
Икебеҙ ике ерҙәрҙә
Ғүмеребеҙ үтә бит.

Исемдәре Уйылдан,
Минең ҡулда сәскә инең,
Сәскәләрең ҡойолған.

## 33. Круг йәки Зилем уйыны

Уйнарға теләүсе егеттәр, ҡыҙҙар уртаға төшәләр һәм бер-береһенең ҡулдарын тотошоп, түңәрәк яһайҙар. Түңәрәк эсендә ике йә өс-дүрт кеше ҡала. Улар ҙа бер-береһенең ҡулдарына тотоношалар. Күмәгерәк булһала́р, эстә икенсе түңәрәк яһала. Икәү булһалар, ҡаршы-ҡаршы тотоношалар.

Тышҡы түңәрәк тә, эскеһе лә әйләнеп йөрөй. Шул ваҡытта тышҡы түңәрәктәгеләр еңел бейеү көйөнә таҡмаҡтар әйтәләр. (Ниндәй таҡмаҡ әйтелһә лә ярай, тик көйҙөң аҙағы бейерлек булырға тейеш.)

Көйҙөң икенсе яртыһында түңәрәк уртаһындағылар, һәр береһе, тышҡы түңәрәктән пар алып әйләнәләр. Көй бөткәс, эстәгеләр оло түңәрәккә сыға, яңы килгәндәре эстә ҡала. Яңы таҡмаҡ башланыу менән, барыһы ла яңынан ҡабатлана.

Бындай уйынды уйнағанда, шундайыраҡ таҡмаҡтар әйтелә:

Аттарыңды эсерергә,
Beләһеңме күлдәрҙе?
Уйлайһыңмы, һағынаһыңмы
Бергә булған көндәрҙе?

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Сәхиә.
Сәхрәләрҙән алып ҡайттым
Һиңә оҡшаған сейә.

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Мөнирә.
Маңлай сәстәрең бөҙөрә,
Шуға эсем өҙөлә.

Уҡа яулыҡ — йоҡа яулыҡ,
Уҡаға күрә йоҡа.
Янһын дошмандың йөрәге,
Ташламам әле пока.

Машина, ҡысҡыраһың,
Үҙәгемде өҙәһең,
Һин китәһең — мин ҡаламын,
Нисек итеп түҙәһең?

Ал бирәм, алаһыңмы?
Гөл бирәм, алаһыңмы?
Алып китәм, бараһыңмы?
Айырылып ҡалаһыңмы?

Үҙенә пар алып өлгөрмәйенсә икенсе таҡмаҡҡаса тороп ҡалған кешегә:

Ҡулымдағы балдағымдың
Исеме Шәрәфетдин.
Бер үҙеңә ике таҡмаҡ
Әйттереп әрәм иттең,—

тип әйтәләр.

Уйынсыларҙың күбеһе бер генә таҡмаҡсының таҡмағына уйнап-бейеһәләр, былай тип таҡмаҡлайҙар:

Арыштан да, бойҙайҙан да
Ярма ярмағыҙ әле.
Бер кешенең таҡмағынан
Файҙаланмағыҙ әле.

Ә тегеләре былай тип яуап бирәләр:

Арыштан да, бойҙайҙан да
Ярма ярған юҡ әле.
Бер кешенең таҡмағынан
Файҙаланған юҡ әле.

Таҡмаҡҡа ҡушылып бармағандарға:

Ағиҙелдең аръяғынан
Йөҙөп килдегеҙме әле?
Ауыҙығыҙҙы энә менән
Тегеп килдегеҙме әллә?

Ундай таҡмаҡҡа ҡаршы әйтәләр:

Ағиҙелдең аръяғынан
Йөҙөп килмәнек әле.
Ауыҙыбыҙҙы энә менән
Тегеп килмәнек әле.

Уйынға ҡатнашмай ултырыусыларға:

Исемдәре Фәрҙәнә,
Уйнамаған иптәштәрҙән
Эскәмикә ғәрләнә.

Ҡара һыйыр көйөштә,
Уйнамағас, ниңә килдең?
Ҡайтып йоҡла мөйөштә.

Уйын ялҡыта башлаһа, былай тиҙәр:

Алай итә башлайыҡ,
Былай итә башлайыҡ.
Был уйынды тамам итеп,
Икенсе уйын башлайыҡ!

## 34. Шлапур[1]

Барыһы ла түңәрәккә баҫалар. Таҡмаҡтың беренсе өлөшөндә түңәрәк буйлап бейейҙәр ҙә ҡушымта өлөшөнә еткәс, уртаға йыйылып тыпырлайҙар. Икенсе куплет таҡмаҡҡа һәр кем уң яғындағы күршеһе менән беләктәрен эләктереп әйләнәләр, ә ҡушымтала йәнә уртаға йыйылалар. Гармунсы йә ҡурайсы түңәрәк уртаһында йөрөй.




Беҙҙең ҡорҙарҙа һәр ваҡыт
Һый-хөрмәт тулып торһон.
Һыйлайыҡ дуҫты яратып,
Дуҫтар гел килеп торһон!

---

[1]Шлапур — 1. Яға рәүешендәге ҡатын-ҡыҙҙар кейеме. Таҫмаға тәңкә теҙелеп тегелә. 2. Итек үксәһенә беркетелгән еҙ ҡалай.

К у ш ы м т а:
Эй, (ы) шлапур, (ы) шлапур,
(Ы) шлапурҙары матур,
Ниңә бейеп йырламаҫҡа
Күңел күр, тормош матур!

Таҫма телдәр менән беҙгә
Дошмандар һыйынмаһын.
Дуҫтарыбыҙ килеп торһон,
Аралар һыуынмаһын!

К у ш ы м т а.

Илсене уртаға булә
Ҡыуырҙының һыуҙары.
Иртән тороп эшкә бара
Илсе ауылы ҡыҙҙары.

К у ш ы м т а.

Апрель үтмәй, ағып бөтмәй
Ҡыуырҙының боҙҙары.
Иле өсөн янып йәшәй
Илселәрҙең ҡыҙҙары.

К у ш ы м т а.

Әйҙә баҫайыҡ әле,
Әйҙә баҫайыҡ әле.
Бейейек тә, йырлайыҡ та
Уйнап ҡалайыҡ әле!

К у ш ы м т а.

Иҙәндәре һелкенһен,
Иҙәндәре һелкенһен.
Иҙәндәре һелкенгәндә,
Йөрәктәре елкенһен!

К у ш ы м т а.

Баҫып алғанда ғына,
Баҫып алғанда ғына
Күтәрелә бит күңелдәр,
Бейеп алғанда ғына.

К у ш ы м т а.

Баҫ, баҫ, баҫ әйҙә!
Күтәрелһен күңелдәр.
Күтәренке күңел менән
Үтһен беҙҙең ғүмерҙәр!

К у ш ы м т а.

## 35. Косилка, молотилка

Түңәрәктә тотоношоп, бер алға, бер артҡа ҡулдарын һелкеп торалар, таҡмаҡ әйтәләр. «Косилка, молотилка» — тигәндә, ике рәт сәпәкәй һуғып әйләнәләр, салғы сапҡандай ҡулдарын тәүҙә аҫтан алып, унан һуң өҫтән тәгәрмәс итеп әйләндерәләр.






Уйнап алайыҡ әле,
Йырлап алайыҡ әле.
Уйнаныҡ та, йырланыҡ та,
Бейеп алайыҡ әле.

Ҡ у ш ы м т а:

Косилка, молотилка,
Сортировка, веялка!

Баҫ әле бер генә лә,
Ҡурайексе беҙ генә!
Уйнап-көлөп шат йәшәүсе —
Был донъяла беҙ генә.

Ҡ у ш ы м т а.

Арғы остан берәү килә,
Йәнейем үҙе микән?
Айырылыу етеп килә,
Нисек түҙәрмен икән?

Ҡ у ш ы м т а.

Баҫ әле станокка,
Тауыштары гөрләһен.
Әйҙә, әйҙә нығыраҡ баҫ,
Тракторҙар гөрләһен!

Бейеүселәр бер аяҡ менән генә көй ыңғайы тыпырлатып торалар.

## 36. Түңәрәк уйыны




Әйләнегеҙ, әйләнегеҙ,
Әйләнегеҙ к(ы)ругом,
Әллә үҙегеҙ сибәрһеҙ,
Әллә тәүгә күреүем,—

тип, берәү йыр башлай һәм түңәрәктән бер кешене алып, уртала бейеп өйрөлә.

Сылтыр-сылтыр, сылтырсаҡ,
Ат өҫтөндә ыңғырсаҡ.
Беҙ уйнамай, кем уйнаһын,
Беҙҙең самый уйнар саҡ.

## 37. Дөйөм түңәрәк уйыны

Уйынсылар түңәрәк яһап, йырлай-йырлай йөрөйҙәр. Түңәрәк уртаһындағы ултырғыста бер пар ултыра. Йыр бөтөүгә, түңәрәктәгеләрҙең һорауы буйынса, урталағылар үҙ һөнәрен күрһәтә: йырлай, шиғыр һөйләй, бейей. Бейегәндә, башҡалар таҡмаҡ әйтә. Һөнәрҙәрен күрһәткәс, икеһе лә тороп, ике кешене һайлап, уртаға сығаралар ҙа түңәрәккә баҫалар. Уйын шулай дауам итә.

## 38. Оло майҙан уйыны
(Общий танец)

«Командир» менән «ҡатыны»— уйын башы була. Бөтә йәштәрҙе бейеүгә, йырға дәртләндереүсе, йөрөтөүсе шулар була. Икәүләшеп, парлашып бейеп алғас, береһе егетте, икенсеһе ҡыҙҙы бейергә төшөрә. Дүрт йә алты пар булып, бөтәһе күмәкләп бер түңәрәккә баҫалар.

«Командир» оран һала:

— Пара слева!

Шулай тигәндә, ҡыҙҙар егеттәрҙең һул яғына баҫып бейей. Ә таҡмаҡсылар гармунсы янында тороп, өҙләкһеҙ таҡмаҡ әйтә:

Алдар ала алаһыңмы,
Гөлдәр ала алаһыңмы?

Кеше ҡулдары теймәгән
Йәрҙәр таба алаһыңмы?

— Пара за парой! — тип ҡысҡыра «командир ҡатыны». Бөтәһе лә парлашып, бер-береһе артына баҫып тыпырлай.

Алдар алырға була,
Гөлдәр табырға була.
Кеше йәрен тартып алып,
Йәрҙәр табырға була.

— Все в круг!
Бөтәһе лә тотоношоп уртаға эркелә.

Итеген дә кейҙек беҙ,
Ситеген дә кейҙек беҙ.
Ағаһын да, энеһен дә
Алмаш-тилмәш һөйҙөк беҙ.

— Зыр, кругом! — ти «командир». Бөтәһе лә шәп итеп урындарында әйләнә.

Һыу буйына төшкән инем
Һыу буйҙары ҡомлораҡ та,
Йыл менән йыл бер булмай шул,
Быйылғы йыл моңлораҡ та,
Быйылғы йыл моңлораҡ!

— Пары справа! — тип ҡысҡыра «командир ҡатыны». Егеттәр ҡыҙҙарҙың уң яғына баҫып бейей.

Таҡмаҡ әйтәм, таҡмаҡ әйтәм
Тура ҡарап күҙеңә лә. — (2 т.)
Йылмайып бер генә ҡара,
Тағы баҫам үҙеңә. — (2 т.)

— Меняться с парами!— ти «командир». Егеттәр бер-береһенең ҡыҙҙары менән алмашалар ҙа өйрөлөп алалар.

Артабан командалар ҡабатлана. Тик таҡмаҡтарҙың төрлөһө әйтелә.

Иҙел буйлап, һыу буйлап та,
Килә бит үрҙәккәйем. — (2 т.)
Сапҡан аттар ғына ярһый,
Ярһыма йөрәккәйем дә,
Ярһыма йөрәккәйем! — (2 т.)

Һөйҙөм дә мин, һөйөлдөм дә,
Хәҙер һөймәм береһен дә. — (2т.)
Йәшлек аҡылдарым менән
Һөйҙөм микән һине лә? — (2 т.)

Их, колхоз йәштәре лә
Алға бара эштәре! — (2 т.)
Дошман уны тапар ине —
Етмәй әле көстәре! — (2 т.)

Комбайн тигән машина
Ура, һуға, елгәрә. — (2 т.)
Киләсәктә беҙҙең колхоз
Коммунаға әйләнә. — (2 т.)

Их, алма, шәкәр, бал,
Ҡатын үлһә, балдыҙ бар.— (2 т.)
Ҡатын да, балдыҙ ҙа үлһә,
Бажаның ҡатыны бар! — (2 т.)

### 39. Күпер




Таҡмаҡтары:

Йәмле Иҙел буйҙары,
Йәмле Һаҡмар буйҙары.

Ҡ у ш ы м т а:

Йәмле, тәмле шул Иҙелдең һыуҙары,
Стахановсылар менән
Тулған колхоз ҡырҙары.

Күпер, күпер,
Күпер күтәрелмәй ул.

Ҡ у ш ы м т а:

Уйнамаған та көлмәгәс,
Күңел күтәрелмәй ул.
Хайрум, хайрум, хайраруҡ

Кисә барҙым, өйҙә юҡ.
Бөгөн барҙым, өйҙә ине,
Күңелдәре миндә юҡ.

Һуңғы уйындарҙың өсөһөн дә ауыл йәштәре (ҡыҙҙар һәм егет-тәр) таҡмаҡ әйтеп, түңәрәктә әйләнеп, бейеү менән башҡаралар.

Бөрөү уртала бейей, ә башҡалары түңәрәктә. Таҡмаҡтың беренсе яртыһына әйләнеп, икенсе яртыһына тыпырлатып йөрөйҙәр. Бер куплет таҡмаҡ әйтелеп бөткәс, теге кеше икенсеһенә барып баҫа, уйын шулай дауам итә. «Күпер» уйынының беренсе куплеты оҙон көйгә, ә башҡалары ҡыҫҡа көйгә йырлана.

## 40. Ҡарабай (йәки «комсомол») уйыны

Гармунда бейеү көйө уйнала. Теләгән кешеләр парлашып төшәләр ҙә түңәрәк яһап бейешәләр. Эстә торғандары урындарында ҡала, ә түңәрәк ситендәгеһе һәр көйҙән һуң алға күсә бара. Был уйын да гармунсы арығансы дауам итә. Гармунсы арыһа, уйын бөтә.

## 41. Өс таған

Был уйын клубта уйнала. Ул йә гармун, йә скрипка,йә мандолина уйнауында оҙатыла. Унда бер ниндәй ҙә йыр йырланмай. Уйын былай башлана: гармун йәки скрипкала бейеү көйө уйнала башлау менән, өс кеше тотоношоп иҙән уртаһына төшә. Улар көйҙөң беренсе бүлегендә йөрөйҙәр, икенсе бүлегендә тыпырлап бейейҙәр. Шул өс кешенең икеһе парлашып, ҡулға ҡул эләктерешеп бейейҙәр, ә өсөнсөһө уйынсылар араһынан үҙе теләгән бер кешене ала ла, шуның менән ҡулға ҡул тотоношоп бейей. Яңы алынған кеше һәм теге, тәүге төшкән ике кеше, тағы ла өс таған барлыҡҡа килтерәләр, улар тағы икенселәрҙе төшөрәләр. Уйын шулай гармунсы арығансы дауам итә.

## 42. Дүрт таған

Уйынсылар дүртәр-дүртәр булып бүленәләр. (Һәр төркөмдә ике пар була.) Шул парҙар әүернә яһап тотоноша. Тотоношҡанда, ҡайһы парҙың ҡулдары өҫтә ҡала, шуныһы бейей, ҡулдары аҫта ҡалғаны таҡмаҡ әйтеп: «Ана шулай, ана шулай!» — тип, ҡул сабып, ҡеүәтләп тора. Шунан парҙар алмашына: бейеп бөткәне таҡмаҡ әйтә, таҡмаҡлағаны бейей.

## 43. Үрҙәк сумышыу

Ҡулға ҡул тотоношҡан парҙар таҡмаҡтар әйтеп, бейеп йөрөйҙәр, һәм «Наза»лағы шикелле, барыһы ла бер парҙың ҡул аҫтынан үтә.

## 44. Быҙыбыт уйындары

Быҙы, быҙы, быҙыбыт,
Быҙыбыт уйындары.

Быҙыбытты уйнағандың
Буш булмай ҡуйындары.

Быҙы, быҙы, быҙыбыт,
Быҙыбыттың көйө юҡ.
Быҙыбыт уйнамағандың
Бер ҙә генә йүне юҡ.

**Комсомолдар бейеүе***

Ал килтерҙем ал өсөн,
Бал килтерҙем бал өсөн.
Комсомолдар көрәшәләр
Коммунизм таңы өсөн.

Йәш көстәр — комсомолдар
Ленин һүҙен ятлайбыҙ.
Партияның ҡул аҫтында
Коммунаға атлайбыҙ.

## 45. «Хөрриәт» уйыны

«Хөрриәт» уйынын кисен клубта уйнайҙар. Уйында ҡатнашыусы йәштәр, ҡулға ҡул тотоношоп, түңәрәк яһап әйләнеп йөрөйҙәр. Уртала берәү була. Тәүҙә түңәрәктәгеләр таҡмаҡ әйтә:

«Хөрриәт»тә булдыҡ беҙ,
Ике матур күрҙек беҙ,
Ике матур күрҙек беҙ.
Ике матур, бейешеп ал,
Ике матур, үбешеп ал,
Ҡара күҙен һайлап ал,
Ҡара күҙен һайлап ал!

Түңәрәктәгеләр шулай тип таҡмаҡ әйтеп бөтөүгә, уртала йөрөүсе түңәрәктәгеләрҙең берәүһен тотоп ала ла тартып уртаға сығара. Улар икәүләшеп тотоношоп өйрөлә, түңәрәктәгеләр таҡмаҡ әйтә:

Энә күҙенә генә,
Энә күҙенә генә.
Ҡараһаң үҙемә генә,
Булам үҙеңә генә.

Бер таҡмаҡ бөткәнсе әйләнгәндән һуң, тәүҙә уртала яңғыҙ йөрөүсе түңәрәктә урын ала, ә һуңғы сыҡҡаны уртала ҡала, уйын яңынан башлана.

---

*1930 — 1935 йылдарҙа киң таралған таҡмаҡтар.

«Хөрриәт»тә булдыҡ беҙ,
Ике матур күрҙек беҙ,
Ике матур күрҙек беҙ.
Ике матур, үбешеп ал,
Ҡара күҙен һайлап ал,
Ҡара күҙен һайлап ал!

«Хөрриәт» уйынын уйнағанда, шулай тип тә таҡмаҡлайҙар:

Ботинкаһы суҡлы икән,
Ике яҡтан һыҙыҡлы.
Кеше йәрен тартып алып,
Һөйөүҙәре ҡыҙыҡлы.

Сейә, сейә, сейә, сейә,
Сейә сейәләмәй ул.
Үҙе эйәләтмәгәнгә,
Яттар эйәләмәй ул.

Сейә, сейә, сейә, сейә,
Сейә сейәләй инде.
Үҙең эйәләттергәнһең,
Яттар эйәләй инде.

Сейә, сейә, сейә, сейә,
Сейә сейәләй инде.
Өйҙә булһа, килер ине,
Өйҙә түгелдер инде.

Сейә, сейә, сейә, сейә,
Сейә сейәләр инде.
Теймәгеҙ кеше йәренә,
Булһын эйәләренә!

## 46. Ал таҫма

Уйын шулай башлана. Йәштәр ҡара-ҡаршы теҙелеп баҫып, ҡул-ға-ҡул тотоношоп торалар. Башта бер яҡ «Ал таҫма» йырын башлай. Ғәҙәттә, йырсы ҡыҙҙар менән йырсы егеттәр урталараҡ тора. Уларға башҡалар ҙа ҡушыла. Унан йыр йырлаған рәт әкрен генә ҡаршы рәткә яҡынлаша. Килеп еткәс, уларҙың сылбырын өҙөп, ике кешене алырға тырышалар. Ала алмаһалар, кире ҡайтып, йәнә йырлай-йырлай кире киләләр. Тағы тартыш башлана. Улар ике кешене тартып алып китә алһалар, ҡаршы яҡ йыр башлай. Ул яҡтағы йәштәр ҙә әкрен генә быларына яҡынлайҙар һәм ике кешене алып китергә тырышалар. Уйын ошо рәүешле, бер яҡ икенсеһен еңгәнсе, дауам итә.

«Ал таҫма» йырҙары:

Ерҙә еләк бәйләнә,
Күктә болот әйләнә.

Матур-матур егеттәрҙең
Күҙе шунда бәйләнә.
Дуҫым дуҫтар эсендә,
Аяғы башмаҡ эсендә.
Үҙе кейәү ҡуйынында,
Кейәү ҡулы муйынында.
Еҙнәм борай елгәрә,
Бик һауаға ебәрә.
Һатыусының артынан
Сәләм әйтеп ебәрә.

Ҡыҙыл-ҡыҙыл бейәләй
Кер йыуырға булһа ине.
Ай-һай, ошо уйындар
Көн дә булып торһа ине.
Ал таҫма ла бар беҙҙә,
Гөл таҫма ла бар беҙҙә.
Алаһың килһә, ал, түтәй,
Нисә аршын алаһың?
Йәрминкәнең ҡыҙығы —
Һатыуымдың аҙағы!

## 47. Бәпес ауылы уйыны



Был уйынды 20-се йылдарҙа уйнай торғайныҡ. Уйында ҡатнашыусы йәштәр түңәрәк яһап баҫалар. Бер ҡыҙ түңәрәк эсендә ҡала, бер егет түңәрәк тышында тора. Түңәрәктәгеләр йырлай:

Ағиҙелдәрҙә, Ағиҙелдәрҙә, Ағиҙелдәрҙә
Аҫыл ҡоштар йөҙә.
Уйын башынан, уйын башынан, уйын башынан
Бер гүзәл ҡыҙ килә!
Ауыл башынан, ауыл башынан, ауыл башынан
Бер егет килә.
Бер саҡрымдан, бер саҡрымдан, бер саҡрымдан
Фуражкаһын сисә.

Түңәрәк тышындағы егет фуражкаһын ҡулына тота, алыҫтан уҡ урталағы ҡыҙға башын эйә.

Ярты саҡрымдан, ярты саҡрымдан, ярты саҡрымдан
Эйә бил, башын.
Ә туташ уға, ә туташ уға, ә туташ уға
Һикертмәй ҡашын (яуап бирмәй).

Егет баш эйә. Баш эйә лә ҡыҙ янына бара, ҡулын һона. Ҡыҙ уға ҡулын бирмәй — танымай йәнәһе. Ҡыҙ йырлай:

Ғәфү ит, иптәш, ғәфү ит, иптәш, ғәфү ит, иптәш,
Танымайым һине!— ти.

Егет уға былай тип яуап бирә:

Әйҙә, беҙ икәү, әйҙә, беҙ икәү, әйҙә, беҙ икәү
Ҡултыҡлашайыҡ!

Улар ҡултыҡлашып, түңәрәк буйлап әйләнеп йөрөйҙәр. Шунан ҡыҙ берәй әхирәтен уртаға саҡыра, егет — икенсе егетте. Уйын яңынан башлана.

### 48. Һай, туғай, туғай, туғай!

Йәштәр түңәрәккә баҫа.

Б а ш л а у с ы: Йәйҙең матур кистәрендә
Беҙ киләбеҙ уйынға.
Күңел асып, ял итергә
Уймалыһыу буйында.
К ү м ә к л ә п: Һай, туғай, туғай, туғай!
Туғайҙа һайрай турғай.
Һаман шулай һайрай турғай,
Беҙгә һоҡлана буғай.
Б а ш л а у с ы: Түңәрәктә уйнағанда,
Әйләнеп йырлағанда,
Түгелә йөрәк серҙәре,
Шишмәләй ҡайнап аға.
К ү м ә к л ә п: Һай шишмә, шишмә, шишмә!
Һыуы һалҡын, күп эсмә!
Эштә ялҡын кеүек эшлә,
Бераүгә лә бирешмә.

Уйынсылар туҡтап тора. Музыка үҙгәрә. Таҡмаҡ әйтеү дауам итә:

Уңған егет, һикереп сыҡ!
Сибәр ҡыҙыҡай, йүгереп сыҡ!
Йә әле, йә әле,
Әйтеп бирегеҙ әле,
Һеҙ колхоздың кемдәре?
Егет менән ҡыҙ: Беҙ был ерҙең эшсән кешеләре
Гөлдәр һибелә беҙҙең ҡулдарҙан.
Бөтөн илгә туҡлыҡ, бәхет килә,
Беҙ үҫтергән алтын бойҙайҙан.
Сейәләрҙең яныл бешкәндәрен,
Алмаларҙың эйелеп торғанын,
Алма кеүек алһыу битле ҡыҙҙар
Үҫтерәләр һеҙгә, дуҫтарым.

Түңәрәктәгеләр таҡмаҡ әйтеүҙе дауам итә.

Б а ш л а у с ы: Йырлайбыҙ ҙа, ҙурлайбыҙ ҙа —
Һеҙ унған дуҫтарыбыҙ.
Уфаларға, Ҡазандарға
Барып етһен данығыҙ.
К ү м ә к л ә п: Һай, һабан ҡырҙары.
Яңғырай йәшлек йырҙары.
Унда эшләй беҙҙең колхоз
Егеттәре, ҡыҙҙары.
Б а ш л а у с ы: Кил яныма, бир ҡулыңды,
Әйҙә, уйнайыҡ бергә.
Уйнайыҡ та, көйләйек тә,
Йәм тулһын йәш күңелгә.
К ү м ә к л ә п: Һай, туғай, туғай, туғай,
Туғайҙа һайрай турғай.
Һаман шулай һайрай турғай,
Беҙгә һоҡлана буғай.

Уйынсы туҡтай. Тәүге музыка башлана, таҡмаҡ дауам итә:

Унған егет, атылып сыҡ,
Матур ҡыҙҙы алып сыҡ,
Бында килегеҙ әле,
Бейеп бирегеҙ әле!

Уртаға сыҡҡан егет китә. Башҡалар сәпәкәй итеп, таҡмаҡ әйтеп тора:

Һай, икегеҙ, икегеҙ,
Икегеҙ ҙә бер тигеҙ.
Пар һандуғастай гөрләшеп,
Тигеҙ ғүмер итегеҙ...

## 49. Камбы дөбөтө
(Круг көйө)

Алдарыбыҙ бар сағында,
Гөлдәребеҙ бар ине.
Һөйләшеп тә туя алмаған
Көндәребеҙ бар ине.

Ҡ у ш ы м т а: Их, камбы, камбы, камбы,
Камбы дөбөтөме ни?
Һыу буйында ат эсерә
Колхоз егетеме ни?

## 50. Әйтешеп күмәк бейеү

Е г е т т ә р: Әйләнәбеҙ, әйләнәбеҙ,
Әйләнәбеҙ түңәрәк.

Түңәрәктең эстәрендә
Уйнай матур күбәләк.

Ҡыҙҙар: Баҫа, баҫа бит әле,
Матур баҫа бит әле.
Матур баҫып бейегәндә
Күңел аса бит әле.

Бергә: Ал гәрәбе булмай ул,
Гөл гәрәбе булмай ул.
Ҡосаҡлашып бейегәндән
Бер нәмә лә булмай ул.

## 51. Ҡулъяулыҡ уйындары

Егеттәр: Итеккәйҙәре йәшел,
Итеккәйҙәре йәшел.
Тыпырҙатып баҫып килә,
Их, үҙебеҙҙең нәҫел.

Ҡыҙҙар: Еҙем буйы тал-тирәк,
Муйыл ағасы һирәк,
Беҙҙең янда күп уралма,
Беҙгә ағайың кәрәк.

Егеттәр: Аса егет, баҫа егет,
Йәлләмәй мәгәр үҙен.
Ағайыбыҙ ярата шул,
Бур бесәйҙәрҙең күҙен.

## 52. Ҡара-ҡаршы

Егеттәр: Кепка кейәм, кепка кейәм,
Кепканың йәшелдәрен.
Тағын берҙе һөйөр инем,
Шуларҙың нәҫелдәрен.

Ҡыҙҙар: Ҡара костюм, аҡ яға,
Ҡара костюм, аҡ яҡа.
Ҡара костюм, аҡ яҡаға
Иҫебеҙ китмәй пока.

Ҡыҙҙар: Башҡортсаһы тары ярма.
Ыруссаһы пшена.
Һармаҡ икән был егеттәр,
Барам тиһәң, ышана.

Бергә: Һеҙҙең яҡта нимә бар?
Беҙҙең яҡта аулаҡ бар.
Аулаҡ эсендә ут бар.
Уйын көлкөгә ход бар.

Һоп-һа, риттәйәм,
Тра-ҙа-ра-ра-рат-та-йым.
Трҙа-рара-рат-та-йым.
Һоп-һа!
Ғафуриҙәр быҙыбытта
Теттерә лә теттерә.
Яҡшы донъяға шатланып,
Һикерә лә һикерә.

**53. Киске уйындарҙа егеттәр, ҡыҙҙар ҡара-ҡаршы әйтә торған таҡмаҡтар**

Ҡыҙҙар: Майлы кейем, майлы кейем,
Майлы кейем кеймәйем.
Ыстағәфирулла тәүбә,
Трактористы һөймәйем.

Егеттәр: Майлы кейем кейер инең,
Майлы кейем эләкһә,
Трактористы һөйөр инең,
Трактористар эләкһә.
Майлы кейем, майлы кейем,
Майлы кейем кеймәйем.
Ыстағәфирулла тәүбә,
Һауынсыны һөймәйем.

Ҡыҙҙар: Тәҙрә төбөм, тәҙрә төбөм,
Тәҙрә төбөм нашатыр.
Һауынсыларҙы һөйһәгеҙ,
Ҡаймаҡты күп ашатыр.

Егеттәр: Военкомат ишек алдын
Тапамам тигән инем.
Өҙөлөп һөйгән йәрҙәремде
Ташламам тигән инем.

Ҡыҙҙар: Военкомат ишек алдын
Тапарға тура килде.
Өҙөлөп һөйгән йәрҙәремде
Ташларға тура килде.

Егеттәр: Аръяҡта ла ҡомалаҡ,
Бирьяҡта ла ҡомалаҡ.
Беҙҙең ауыл ҡыҙҙары
Матур ҙа, тик, тумалаҡ.

Ҡыҙҙар: Беҙҙең урам аҡ балсыҡ,
Бата күрмә, атлап сыҡ.

Һеҙ ҙә беҙҙән артыҡ түгел,
Бер аҙ ғына маҡтансыҡ.

Егеттәр: Эй, сабата, сабата,
Сабата шәп атлата.
Һөймә ҡыҙҙы, һөй әбейҙе —
Әбей ҡоймаҡ ашата.

Ҡыҙҙар: Әрәмәле, әрәмәле
Юлдары әрем әле.
Һеҙҙең кеүек егеттәргә
Әбей ҙә әрәм әле.

Егеттәр: Сейә, сейә, сейә, сейә,
Сейәлетау итәге.
Сейәлетау итәгендә
Икәү булдыҡ бит әле.

Ҡыҙҙар: Сейә, сейә, сейә, сейә,
Сейә, сейәләмәй ул.
Үҙең эйәләтмәйенсә,
Яттар эйәләмәй ул.

Һандыҡ-һандыҡ дебетем,
Армияла егетем.
Армиянан егетем ҡайтһа,
Шул егеттә өмөтөм.

Егеттәр: Һандыҡ-һандыҡ дебетем тип,
Шәлһеҙ ҡалырһың әле.
Армияла егетем тип,
Йәрһеҙ ҡалырһың әле.

Ҡыҙҙар: Аҡ күлдәкте кейҙермәйҙәр,
Кер төшөрәһең, тиҙәр.
Кис клубҡа ебәрмәйҙәр,
Егет һөйәһең, тиҙәр.

Егеттәр: Аҡ күлдәкте кейеп-кейеп,
Кер төшөргән юҡ әле.
Кис клубҡа йөрөп-йөрөп,
Ҡыҙҙар һөйгән юҡ әле.

## 54. Ғәли-Ғәли-Ғәли, Ғәли-ғәләрәм генә

Бейек тауҙың баштарында
Кәкүк саҡыра өҙөп.

Өҙөп саҡырғанда кәкүк,
Нисек йөрөйһөң түҙеп.

Ҡушымта: Ғәли-Ғәли-Ғәли-Ғәли,
Ғәли-ғәләрәм генә.

Бейек тауҙың баштарында
Ҡайын, имән, ҡарағас,
Кем балаһын кемдәр һөймәй,
Күңеленә ярағас.

Ҡушымта.

Өҫтәлдәрҙә ике сәғәт,
Береһе һуға минутҡа.
Мин һалмайым һине утҡа,
Һин һалдың мине утҡа.

Ҡушымта.

Алдарың барҙыр әле,
Гөлдәрең барҙыр әле.
Һинең дә бер ҡара ҡашты
Һөйгәнең барҙыр әле.

Ҡушымта.

Алдарыңды алдарыма,
Гөлдәреңде ҡалдырма.
Егет булһаң, һөйгәнеңде
Ят ҡулында ҡалдырма.

Ҡушымта.

Аҡҡош күрһәң, атып ал,
Өйрәк күрһәң, һатып ал.
Һағынғанда, бер йырларһың,
Был йырымды отоп ал.

Ҡушымта.

Гармуны ҡулдарында,
Үҙе һыу буйҙарында.
Һыу төбөнә ҡарап йырлай,
Кем икән уйҙарында?

Ҡушымта.

Салғыйығыҙ һыуланған,
Йөҙөп килдегеҙме әллә?
Ауыҙығыҙҙы энә менән
Тегеп килдегеҙме әллә?

Ҡушымта.

Гармунсылар гармун уйнай,
Көйөн ота алмам инде.
Һин онотһаң, оноторһоң,
Мин онота алмам инде.

Ҡ у ш ы м т а.

Гармундарың ауыр булһа,
Элеп ҡуй ҡайындарға.
Мин ҡайғылы түгел инем,
Һин һалдың ҡайғыларға.

Ҡ у ш ы м т а.

Гармун бәләкәй булһа ла,
Әйтә ниҙәр кәрәген.
Әллә уттарҙа яндыңмы,
Ник янаһың, йөрәгем?

Ҡ у ш ы м т а.

Һыуға барҙым, һирпеп алдым,
Күнәгем тулмағанға,
Ҡысҡырып йырлап ебәрҙем,
Бәхетем булмағанға.

Ҡ у ш ы м т а.

Гармунсының исемдәре
Гармун ҡайыштарында.
Беребеҙ көндөң сығышында,
Беребеҙ байыштарында.

Ҡ у ш ы м т а.

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Зиннур.
Икебеҙ ҡауышыр инек,
Һин бәләкәй — мин ҙур.

## 55. Ғәли-Ғәли, ғәлләр әле...

Ғәлигә барам әле,
Ғәлигә барам әле.
Ғәли исемдәре матур,
Ятҡа ҡалдырмаç әле.

Ҡ у ш ы м т а: Ғәли, Ғәли, ғәлләр әле,
Ғәлигә барам әле.
Ғәли исемдәре матур,
Ятҡа ҡалдырмаç әле.

Ҡайын — ағас, ҡарағас,
Ҡайын — ағас, ҡарағас.
Һөйгән йәрең тартып алдым,
Күңелемә ярағас.

Ҡ у ш ы м т а.

Менеп бара, менеп бара,
Менеп бара ҡайынға.
Күрһәгеҙ, сәләм әйтегеҙ
Минең ҡара мыйыҡҡа.

Ҡушымта.

Төшөп килә, төшөп килә,
Төшөп килә ҡыйыҡтан.
Сәләм алып килдегеҙме
Минең ҡара мыйыҡтан.

Ҡушымта.

Бер аяғы оҙонораҡ,
Бер аяғы ҡыҫҡараҡ.
Ике аяғы тигеҙ булһа,
Бейер ине оҫтараҡ.

Ҡушымта.

Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исемдәре Алдабай.
Кемде генә һөйәһең һин,
Әйтсе миңә алдамай.

Ҡушымта.

Ҡулымды ҡабартмайым,
Самауыр таҙартмайым.
Әптек ауыл егеттәрен
Ғүмергә яратмайым.

Ҡушымта.

Беҙҙең урам түбән таба,
Теҙелеп үҫкән аҡ ҡайын.
Аҡ ҡайынға баҫып ҡарайым,
Һеҙҙе һағынған һайын.

Ҡушымта.

Ҡарурманға кергәс тә,
Уңға ҡайырылғас та,
Их, дуҫҡайым, рәхәт йәшә,
Беҙҙән айырылғас та.

Ҡушымта.

Костюмың ҡыҫамы ни?
Костюмың ҡыҫамы ни?
Эйеләһең, бөгөләһең,
Иҫеңә төшәме ни?

Ҡушымта.

Үҫкән саҡта, үҫкән инек,
Тал тамырҙары кеүек,

Үҫеп еткәс, таралыштыҡ,
Ҡош балалары кеүек.

Ҡушымта.

Беҙ урамдан үткән саҡта,
Асыулана ағайҙар.
Асыуланмағыҙ, ағайҙар,
Беҙ китәһе малайҙар.

Ҡушымта.

Баҫ үҙемә генә лә
Ҡара күҙемә генә,
Ҡараһаң күҙемә генә,
Булам үҙеңә генә.

Ҡушымта.

Ишек алды тал-тирәк,
Тал-тирәккә һыу кәрәк.
Оҙон буйлы егеттәргә
Ҡыҫҡа буйлы ҡыҙ кәрәк.

Ҡушымта.

Анау тауҙың баштарында
Теҙелеп үҫкән әнис.
Минең әйтер таҡмаҡтарым
Ошоноң менән кәнис.

Ҡушымта.

**56. Дим, Дим, Дим буйы,**
**Ҡала Ағиҙел буйы.**

**А**

Алма баҡсаһына инеп,
Алмаға үрелдеңме әллә?
Матурлыҡ өләшкән саҡта,
Алдан йүгерҙеңме әллә?

Ҡушымта: Дим, Дим, Дим буйы,
Ҡала Ағиҙел буйы.

Бейек тауҙың баштарына
Ҡаҙҙар оя яһамай.
Ал булһа ла, гөл булһа ла,
Тыуған илгә оҡшамай.

Ҡушымта.

Алай тимәгән инем,
Былай тимәгән инем.

Йәш ғүмерем — зәңгәр сәсәк,
Үтер тимәгән инем.

Ҡушымта.

Без үҙебеҙ Ҡазандыҡы,
Ҡазанда тормаһаҡ та.
Беҙ ялынып йәр һөймәйбеҙ,
Бик матур булмаһаҡ та.

Ҡушымта.

Б.

Бирсәткәне кем һырлай.
Хәҙер ниндәй закон сыҡҡан,
Кем уртала, шул йырлай.

Ҡушымта.

Тәрилкәләре ватыҡ.
Уйнамаған кешеләргә
Ҡайтып китергә ваҡыт.

Ҡушымта.

Уйҙыҡ-уйҙыҡ ужымдар.
Мин уртаға сыҡҡас ҡына,
Ауыҙҙарын йомдолар.

Ҡушымта.

Мин китәмен Аҡъярға ла,
Мин китәмен Аҡъярға,
Һин ҡалаһың яттарға.

Ҡушымта.

Уралып аға һыуҙар.
Киттеләр ҙә юғалдылар,
Ҡайтырҙар микән шулар?

Ҡушымта.

Баҫып һыу алыуҙары.
Һыу алғанда, йәмле була
Танышып ҡалыуҙары.

Ҡушымта.

Кәсинкәһе бәләкәй.
Ваҡытлыса ғына һөйәм,
Кеше йәре кәрәкмәй.

Ҡушымта.

Фуфайкаһын бәйләгән.
Шулмы һеҙҙең егетегеҙ
Сибәр ҡыҙҙар әҙләгән?

Ҡушымта.

Скрипка ҡылдары.
Әнә шулай оҫта бейей,
Беҙҙең ауыл ҡыҙҙары.

### 57. Сания апай таҡмаҡтары

Сания апай һыуға бара,
Көйәнтәһе иңендә.
Ҡатын-ҡыҙҙар рәхәт йәшәй
Беҙҙең Совет илендә.

Сания апай һыуға бара,
Көйәнтәһе, силәге.
Силәгенә ҡарағанда,
Үҙе — ҡурай еләге.

Комсомолка Сания апай
Ҡайтып килә клубтан.
Совет власы сығарҙы
Ҡатын-ҡыҙҙы ҡоллоҡтан.

### 58. Бейеү таҡмаҡтары

Алдарың алда мәллә,
Ялдарың ялда мәллә?
Таҡмаҡламай ултыраһың,
Ауыҙың ялда мәллә?

Беҙҙең ауыл — матур ауыл,
Клубтары гөлт итә.
Өҙә баҫып бейеүҙәрең
Йөрәктәрҙе һелкетә.

Баҫыуҙарҙа гөрләп эшләй,
Тракторҙың моторы.
Урталарҙа бейеп йөрөй,
Әминдәрҙең матуры.

Арба екһәм, арбам бар,
Сана екһәм, санам бар,
Бейеһәм, бейей ҙә китәм,
Бейегәндәй самам бар.

Аръяҡтарҙа уттар яна,
Бирьяҡтарҙа шәүләһе.
Һикереп төшөп бейегәндә,
Килешеп тора кәүҙәһе.

Бейер инде, бейер инде,
Аяғы талыр инде.
Бының бейегәнен күрһә,
Һөйгәне алыр инде.

Бейе, бейе, бейе әле,
Бейегәнең юҡ әле.
Бейегәнең булмаһа ла,
Матур бейейһең әле.

Бейер инде, бейер инде,
Аяғын салыштырып.
Булмаç инде был дуçымды
Башҡаға алыштырып.

Бейе тиҙәр, бейе тиҙәр,
Бейеп булыр тиһеңме?
Аяҡ ҡыҙып алды иһә,
Тыйып булыр тиһеңме?

Күп бейемә, арырһың,
Табаныңды ярырһың.
Оҙаҡ бейеп ҡолап китһәң,
Мәсхәрәгә ҡалырһың.

Ҡулымдағы балдағымдың,
Исемдәре Гөлйемеш,
Үҙең төшкәнһең уртаға,
Үҙең бейергә тейеш.

**59. Уйын таҡмаҡтары**

**А**

Әйҙә, баçайыҡ әле,
Бергә баçайыҡ әле.
Эшебеҙҙе алдан бөттөк,
Күңел асайыҡ әле.

Ал киçергә, гөл киçергә,
Үтмәй ҡайсыларыбыҙ.
Киләһе йыл был ваҡытта
Булмаç ҡайһыларыбыҙ.

Ҡарлуғас ҡара була,
Муйыны ала була.
Кәләш алмаған егеттең
Яғаһы ҡара була.

Ҡашың һары, ҡашың һары,
Ҡараға буятаһың.
Төндә төштәремә инһәң,
Ҡурҡытып уятаһың.

Алъяпҡысым сыбар әле,
Бер йылға сыҙар әле.
Һиңә сыҡкан бер зимагор,
Миңә лә сығар әле.

Күпер, күпер, күпер, күпер,
Күпер күтәрелмәй ул.
Уйнамағас та көлмәгәс,
Күңел күтәрелмәй ул.

Ҡара һыйыр көйөшмә,
Ала һыйыр мөйөштә.
Уйнамағас, ниңә килдең,
Йоҡлап ятмай мөйөштә.

Б

Уйнат-уйнат гармуныңды,
Бейеһендәр егеттәр.
Беҙҙең илдең егеттәре
Бары ла бөркөт кеүектәр.

Ҡушымта: Их, матур баҫабыҙ,
Нисек күңел асабыҙ.
Их, күңел асабыҙ,
Нисек шыма баҫабыҙ.

Һайрат-һайрат гармуныңды,
Елкенһендәр йәш ҡыҙҙар.
Беҙҙең ҡыҙҙар нурлы йөҙлө,
Әйтерһең дә йондоҙҙар.

Ҡушымта.

Шаулат-шаулат бейеү көйөн,
Ашҡынһындар барыһы ла.
Йәш егеттәр саҡырһындар,
Ҡыҙҙар сыҡһын ҡаршыға.

Ҡушымта.

Әйҙә, әйҙә, ҡатыраҡ баҫ,
Бейегәнең күрһендәр.
Баҫҡан ерҙә ут сығара
Беҙҙең йәштәр, тиһендәр.



## 60. Киске уйында әйтелә торған таҡмазалар

А

Йүгереп бара, йүгереп ҡайта
Ҡара һыйыр көтөүҙән.
Һандуғастың, меҫкенкәйҙең,
Сабатаһы һүтелгән.

Ҡара тауыҡ бейеп йөрөй,
Кәшмир яулыҡ ябынып,
Аҡ тауығы ҡарап тора,
Белмәмешкә һалышып.

Туда-сюда йөрөгән,
Сабатаһын түргә элгән.
Өйөнә ҡайтып ингән икән —
Уҡлау менән элдергән.

Айға менә, айға менә,
Айға менә көтөүсе.
Мин дә айға менер инем,
Арттан булһа этеүсе.

Дом номер шестой,
А квартир пустой.

Атай исеме — Петуха,
Ә минеке — Чепуха.

Айға оса, айға оса,
Айға оса Гагарин.
Мин дә айға осор инем,
Ашамаһам маргарин.

**В**

Ике баҡа иҙән йыуа
Итәктәрен ҡыҫтырып.
Мейес башы. Тараҡандар
Бал эсәләр һыҙғырып.

Ағиҙелгә ут ҡапҡан,
Сытыр-сытыр һыу яна.
Мин дә барҙым һүндерергә,
Һалам тейәп бер сана.

Беҙ үҙебеҙ бик үк байбыҙ,
Ике кәзә аҫырайбыҙ,
Уныһы ла мөгөҙһөҙ,
Сығып ҡасҡан, өмөтһөҙ.

Ботинкаһы, ботинкаһы,
Ботинкаһы лакауай.
Беҙҙең яҡҡа килеп ҡара,
Имән күҫәк гатауай.

Минең иркәм бик ярата —
Белай куфта подарил,
Урам аша сыҡҡан саҡта,
Палка менән ударил.

Һин матурһың, һин сибәрһең,
Һиңә ҡарап туймайҙар.
Ниңә һине зоопаркка
Маймыл итеп ҡуймайҙар?

**Г**

Икәү бергә: Шаян йырҙар беҙ йырлайбыҙ,
Ҡолаҡ һалып тыңлағыҙ.
Кем күберәк йырлар икән,
Йәгеҙ, әйтеп ҡарағыҙ?

Беренсе: Әйҙә, бер йырлап ҡарайыҡ,
Һинме минән уҙҙырыр.

Минең тауыш шундай көслө,
Сәстәреңде торғоҙор.

Икенсе: Беҙҙең кәзә күкәй һала
Һыуҙың иң таҙаһына.
Беҙҙең имән сәскә ата
Декабрь уртаһында.

Беренсе: Бөгөн ни өсөндөр минең
Бик ашағым килмәне.
Биш тәрилкә һурпа менән
Туғыҙ күмәс етмәне.

Икенсе: Өйрәктәрем урман киҫә,
Ҡаҙҙарым һабан һөрә,
Һыйырҙарым күкәй һала,
Кәзә күкәй индерә.

Беренсе: Ҡарға һайрай, мин илайым,
Һис түҙерлек хәлем юҡ.

Икенсе: Ниңә һин юҡты һөйләйһең,
Ҡарға һайрағаны юҡ.

Ике тауыҡ һыуға китте,
Ебәк шәлен ябынып.
Әтәс меҫкен ҡарап ҡалды,
Күрмәмешкә һалышып.

Беренсе: Атландым ата ҡаҙға,
Саптым, батманым һаҙға.
Ишетерһең, төшөп ултыр
Беҙҙең ҡараңғы баҙға.

Икенсе: Йырлап бара, йырлап ҡайта
Беҙҙең һыйыр көтөүҙән.
Һандуғастың, меҫкенкәйҙең,
Сабатаһы тишелгән.

Беренсе: Алмағасҡа һыйыр ҡунған,
Һайрай, ҡойроғон болғай.
Абау алла, йәш йөрәгем
Сабата кеүек ҡайнай.

Икенсе: Тансыларға барған саҡта,
Сәпсек эйәрләнеңме?
Сыбар тауыҡ йырлағанда,
Илап ебәрмәнеңме?

Берг ә: Беҙҙең был йырҙарҙы тыңлап,
Йоҡлап киткән бер ағай.
Оҡшамаһа, ҡул сабығыҙ,
Тағы йырларбыҙ шулай.

### 61. Ай яҡтырта

Был уйын клубта йә ай яҡтыһында яр буйҙарында уйнала ине. Уйынсылар парлашып, ҡулға ҡул тотоношоп, ҙур түңәрәк яһап, арҡаларын эске яҡҡа ҡаратып (эстәгеләре), ә парҙары уларға ҡаршы баҫалар. Әҙерлек тамамланғас, таҡмаҡ башлана.

Беҙҙең клуб асыҡ тора,
Килегеҙ ҙә керегеҙ...

Ошо таҡмаҡ барғанда, ҡулдар йыр көйөнә сепарат әйләндергәндәге кеүек түңәрәк яһап, хәрәкәтләнеп тора. Башта уң ҡул (тышҡы яҡтағы парҙың) эске яҡ парға табан, эске яҡтағы парҙың һул ҡулы менән тышҡы яҡтағы парға табан хәрәкәт яһай, унан һул ҡулы менән шул уҡ хәрәкәтте яһай. Ярты куплет ике тапҡыр ҡабатланғансы, тыпырлап бейеп, әле әйтелгән хәрәкәт яһала. Артабан таҡмаҡтың ҡушымтаһы башлана:

Әллә-әллә-лә, әллә-әллә-лә-лә,
Әллә-әллә-лә-лә-лә-лә-лә.

Ҡушымтаны әйткәндә, ике тапҡыр үҙ усыңа үҙең һуғып алаһың. «Әллә-әллә, лә-лә-лә...» тигәндә, уң ҡулдың усын парыңдың һул ҡулының усына, бер үк ваҡытта һул ҡулдың усын уң ҡулының усына һуғып алаһың (бер үк ваҡытта ике ҡабат). Икенсе юлды (әллә-әллә) әйткәндә, тағы үҙ усыңа ике ҡабат һуғып алаһың, «лә-лә» тигәндә уң ҡулыңдың усын парыңдың һул ҡулының усына ике ҡабат һуғып алаһың. Өсөнсө юлды әйткәндә (әллә-әллә), ике ҡабат тағы үҙ устарыңды һуғып алаһың да «лә-лә» тигәндә, һул ҡулыңдың усын парыңдың уң ҡулының усына ике тапҡыр һуғып алаһың. «Лә-лә-лә» тигәндә, һуғып алған ҡулдарҙы ысҡындырмай бер уңға, бер һулға хәрәкәт яһап, бөтәһе лә уң яҡтағы парға күсә. Уйын шулай дауам итә.

Үҙ парҙары ҡаршыһына килеп еткәс, түңәрәктең эске яғында тороусылар менән тышҡы яҡта тороусылар урындарын алмаштыралар. Уйын, уйынсылар ялҡҡансы, дауам итә. Уйын өсөн йырҙар (башта йырлаған йырҙың дауамы):

Килегеҙ ҙә, керегеҙ ҙә,
Уйнағыҙ ҙа көлөгөҙ.

Уйын урыҫ халҡының «Светит месяц» көйөнә йырлап уйнала торғайны. Унда шундайыраҡ таҡмаҡтар әйтә инек:

Беҙҙең ауылдың аттары
Һары һалам ашамай —
Түшендә КИМ-ы булмаһа,
Комсомолға оҡшамай.

Йырлайбыҙ ҙа, бейейбеҙ ҙә,
Тәпәй үҙебеҙҙеке.
Ондо һатып алабыҙ ҙа —
Әпәй үҙебеҙҙеке.

Комсомолдар эшкә бара,
Ҡулдарында көрәге.
60 буржуйҙы ҡурҡыта
Бер комсомол йөрәге.

Комсомолка иптәшкәйем,
Гәзит алалаһыңмы?
Ауылдағы хәбәрҙәрҙе
Ситкә яҙалаһыңмы?

### 62. Әләилә

Егеттәр, ҡыҙҙар ҙур түңәрәк яһап, теҙелеп баҫып, таҡмаҡ әйтеп, көй ыңғайына ҡул сабып тора. Уртаға өс кеше сыға ла үҙҙәренә иш һайлап, беләктәренән элеп алып, көйҙөң һуңғы (ҡушымта) өлөшөндә тыпырлатып (туҡытып) әйләнә.

Таҡмаҡты берәү башлай, башҡалар күтәреп ала:

Комсомолдар к(ы)лубта
Хат яҙалар фронтҡа.
Комсомолка булма, имеш,
Колхоз ҡыҙы булып та.

Ҡушымта:

Әләилә, лилә, әләилә, лилә,
Әләилә, иләилә,
Әләилә, лилә.

. . . . . . . . . . . . .
Отоп ҡал һин йырҙарҙы.
Ҡабат әйләндереп булмай
Үткән йәш ғүмерҙәрҙе.

Ҡушымта.

Тальян гармун уйнаталар,
Бейейек әле, әйҙә.
Мәңгелеккә йәр булырһың,
Алып ҡайтайым, әйҙә.

Ҡушымта.

Һин дә сибәр, мин дә сибәр —
Көҙгөнән ҡарап ебәр.
Бөтә ҡыҙҙар араһынан
Иң сибәре — һин, тиҙәр.

Ҡушымта.

Һиңә яҙған хатым ҡалған
Сабатам кеҫәһендә.
Һуған турағанда ғына,
Төшәһең иҫтәремә.

Ҡушымта.



## ҠЫҪҠАРТМАЛАР

**БӘФК ФФ** — Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы янындағы фольклор фонды.

ҒА — Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге янындағы ғилми архив, 3-сө фонд.

**ФСФ** — Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор һәм сәнғәт бүлеге янындағы фольклор фонды.

һ/б — һаҡланыу берәмеге (опись, единица хранения).

## ИНФОРМАТОРҘАР, ЯҘЫП АЛЫУСЫЛАР ҺӘМ СЫҒАНАҠТАР КҮРҺӘТКЕСЕ

### АУЛАҠ ӨЙ ҺӘМ ЯҢЫ ЙОЛАЛАР

1. **Ҡыҙҙар уйыны.** А.—1986 йылда Учалы р-ны Ҡарт Муйнаҡ ауылында И. З. Насыровананан Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ**; Б.—1989 йылда Дәүләкән р-ны Буранғол ауылында Шафиҡова Фәүзиәнән (1931) һәм Ҡорбанғәлиева Зәһиранан (1934) Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ.**
2. **Урнаш бешереү.**—1983 йылда Белорет р-ны Мулдаҡай ауылынан Фәниә Әминева яҙып тапшырған.— **БӘФК ФФ** —205, 8-се бүлек, № 1.
3. **Быҡрау.**—1987 йылда Өфөлә Ғафарова Ләмиғә Зәһир ҡыҙынан (1935) И. Ғафаров яҙып алған. Информатор үҙе Мәсетле р-ны Ләмәҙтамаҡ ауылында тыуып үҫкән.— Шунда уҡ, № 2.
4. **Аулаҡ өй.** А.—1979 йылда Салауат р-ны Әлкә ауылында Шөгәйепова Тәскирә Ғиниәт ҡыҙынан (1937) К. Хажиева яҙып алған.— Шунда уҡ, № 3; Б, В.— **ФСФ.**
5. **Армияға оҙатыу.** А, Б —1980 йылда Ҡыйғы р-ны Арслан ауылынан Рәмилә Хәкимова яҙып тапшырған.— **БӘФК ФФ** —205, 8-се бүлек, №№ 12, 13. В.—1987 йылда Иглин р-ны Тау ауылынан Фаҡиһа Вәлиәхмәтова яҙып тапшырған. Шунда уҡ, № 14; Г, Ғ, Д; — **ФСФ.**
6. **Ара йыйыны.** —1991 йылда Бөрйән р-ны Байназар ауылында Ә. Сөләймәнов яҙып алған.— **БӘФК ФФ** —205, 15-се бүлек, № 256.
7. **Шәжәрә байрамы.** —1993 йылда Баймаҡ р-ны Таулыҡай ауылында Ә. Сөләймәнов яҙып алды.— Шунда уҡ, № 257.
8. **Тыуған ер байрамы.** А, Б;—1990 йылда Баймаҡ р-ны 1-се Этҡол ауылынан Ә. М. Ильясов яҙып ебәргән.— Шунда уҡ, № 121.
9. **Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!** А.— Паспорты, сығанағы шул уҡ.— № 120; Б.— 1989 йылда Әбйәлил р-ны Яңы Балапан ауылынан Илфат Рәхимов тапшырған.— Шунда уҡ, № 51.
10. **Килендәр һәм ҡәйнәләр кисәһе.** А.—1986 йылда Әбйәлил р-ны Аҫҡар ауылынан Рим Ғөбәйҙуллин яҙып тапшырған.— Шунда уҡ, № 15; Б.— **ФСФ.**
11. **Урам байрамы.**— Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 16.
12. **Ауыл көнө.**— Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 17.
13. **Беренсе бураҙна.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 18.
14. **Тәүге көлтә.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 19.
15. **Ураҡ менән сүкеш байрамы.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 20.
16. **Сәскаләр байрамы.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 21.

### СӘМЛЕ, МӘРӘКӘ УЙЫНДАР

1. **Аҡ таш.** — 1991 йылда Ейәнсура р-ны Иҫәнғол ауылы мәктәбе уҡыусыларынан Р. Солтангәрәева яҙып алған. — **ФСФ.**

2. **Күмер йөҙөк.**—1986 йылда Баймаҡ р-ны Буранбай ауылынан И. Н. Байрамғолов яҙып алып тапшырған.—БӘФК, 13-сө бүлек, № 1.

3. **Көйһөҙ кейәү.** А.—1984 йылда Иглин р-ны Тәкәй ауылында Хисаметдинова Сафия Низаметдин ҡыҙынан (1902) Марсел Искәндәр яҙып алған.—Шунда уҡ, № 2; Б.—1989 йылда Дәүләкән р-ны Иҫке Хөсәйен ауылында Гузина Миңһылыу Ҡунаҡбай ҡыҙынан (1922) Р. Солтангәрәева яҙып алған.— ФСФ.

4. **Зөбәйер уйыны.** —1977 йылда Салауат р-ны Юлай (Шағанай) ауылында Набиева Гөлмәзә Әбделғәлим ҡыҙынан (1903) Ф. Нәҙершина яҙып алған.— FA, һ/б 73/25.— 253-сө б.

5. **Сәлимә, әйт әле!** —1992 йылда Учалы ҡалаһында уҙғарылған халыҡ ижады фестивалендә ҡатнашыусыларҙан Р. Солтангәрәева яҙып алған.— ФСФ.

6. **Аҡ ҡалас.**—1958 йылда Ейәнсура р-ны Ибрай ауылында Ҡолһарина Хәзирә Сәләхетдин ҡыҙынан (1928) Сәриә Мирйәнова яҙып алған.— FA, һ/б 23/5.— 287-се б. (тәүге өлөшө); 1993 йылда Әлшәй р-ны Яңы Сәпәш ауылы уҡыусыларынан Р. Солтангәрәева яҙып алған. (Икенсе өлөшө).— ФСФ.

7. **Йүкәмәш.** —1984 йылда Иглин р-ны Тәкәй ауылында Хисаметдинова Сафыя Низаметдин ҡыҙынан Марсел Искәндәр яҙып алған.— БӘФК ФФ — 199.

8. **Оҙон урҙаш.**—1980 йылда Ҡыйғы р-ны Арслан ауылынан Рәмилә Хәкимова яҙып алып тапшырған.— БӘФК ФФ —205, 13-сө бүлек, № 4а.

9. **Әбәк бирешеү.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 4 г.

10. **Тәстәмби тартышыу.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 4 ғ.

11. **Төлкө тартышыу.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 4 е.

12. **Шылдырым.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 4 ҙ.

13. **Йондоҙ һанау.**—1988 йылда Мәсетле р-ны Ләмәҙтамаҡ ауылында тыуып үҫкән Ғафарова Ләмиғә Заһир ҡыҙынан (1935) Өфөлә И. Ғафаров яҙып алған. — БӘФК ФФ — 205, 13-сө бүлек, № 9.

14. **Сума өйрәк, сумаҡай.**— Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 12.

15. **Биш пар.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 13.

16. **Һыу ағыҙыу.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 15.

17. Ебегән.— 1987 йылда Иглин р-ны Тау ауылынан Ф. М. Ғәлиәхмәтова яҙып алып тапшырған.- БӘФК ФФ —205, 13-сө бүлек, № 17.

18. **Ҡайыш уйыны.**—1986 йылда Әбйәлил р-ны Әбделғәзе ауылда Солтанбаева Сәүҙә Мостафа ҡыҙынан (1937) Р. Ғөбәйҙуллин яҙып алған.—Шунда уҡ, № 18.

19. **Күрше уйыны.**— Ҡасан, ҡайҙа, кем тарафынан яҙып алыныуы билдәһеҙ. Шунда уҡ, № 20.

20. **Күршең татыумы?** — 1993 йылда Ейәнсура р-ны Ибрай ауылында Х. С. Ҡолһаринанан Р. Солтангәрәева яҙып алған.— FA, һ/б. 23/288.

21. **Йәшерәм яулыҡ.** — 1986 йылда Учалы р-ны Ялсығол ауылы Ишкенә Батыршиндан Р. Солтангәрәева яҙып алған.

22. **Ҡыҙ урлау.**— 1995 йылда Салауат р-ны Лағыр ауылында Шәрипова Әклимәнән Р. Солтангәрәева яҙып алған.

23. **Һандар саҡыра.**— 1986 йылда Әбйәлил р-ны Әбделғәзе ауылында Исмәғилева Сара Әхмәт ҡыҙынан (1937) Р. Ғөбәйҙуллин яҙып алған.— БӘФК ФФ —205, 13-сө бүлек, № 21.

24. **Күҙ ҡыҫыш.**— 1960-сы йылдарҙа БДУ студенты Мәрйәм Дәүләтбаева яҙып тапшырған.— БӘФК ФФ — 1, 179-сы б.

25. **Йырлы таяҡ.**— 1984 йылда Иглин р-ны Түбәнге Ләмәҙ ауылында Ильяс Ғиниәтуллиндан Р. Абдуллин яҙып алған.— БӘФК ФФ — 205, 13-сө бүлек, № 22.

26. **Шешә тәгәрәтеш.** —1960-сы йылдарҙа Баймаҡ р-ны Татлыбай ауылында Шаһибалова Таңһылыуҙан яҙып алынған. — БӘФК ФФ —1, 622-623-сө бб.

27. **«У-ли-и!» уйыны.**— 1993 йылда Йылайыр р-ны Абҙаҡ ауылында Биккужин Әкрәмдән Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ.**

28. **Алтын ашыҡ.**— 1991 йылда Ейәнсура р-ны Иҫәнғол ауылы балаларынан Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ.**

28. **Нумер уйыны.**— 1958 йылда Ейәнсура р-ны Ибрай ауылында Х. С. Ҡолһаринанан Сәриә Мирйәнова яҙып алған.— **ФСФ.**

30. **Тирмә** //Родной Башкортостан. Сонико, 1992. — С. 160 (по материалам Л. И. Нагаевой.)

31. **Сәтәш.** —1991 йылда Өфө ҡалаһында йәшәүсе Сибәр Дәүләтшинанан яҙып алынған.— **ФСФ.**

32. **Ҡул биреш.** —1960 йылда БДУ студенты Мәрйәм Дәүләтбаева яҙып тапшырған.— **БӘФК ФФ** —205, 13-сө бүлек, № 24.

33. **Исем ҡушыу.**—1960-сы йылдарҙа БДУ студенттары тапшырған. —**БӘФК ФФ** —61, 174-се б.

34. **Наказ** (фантик) уйыны.—1985 йылда Күгәрсен р-ны Солтанғол ауылында Усманова Фәйрүзәнән (1925) **Ф. К.** Усманова яҙып алған.— **БӘФК ФФ** —205, 13-сө бүлек, № 25.

35. **Йүкә телефон.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 26.

36. **Ҡабырсаҡ.** — 1986 йылда Учалы р-ны Ҡунаҡбай ауылы М. И. Минһажеванан (1907) Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ.**

37. **Аҡ тирәк — күк тирәк.**—1985 йылда Мәләүез р-ны Әбет ауылында Иҫәнова Фирүзә Йомағол ҡыҙынан яҙып алынған.— Шунда уҡ, № 27.

38. **Ал кәрәк, гөл кәрәк.**—1987 йылда Иглин р-ны Тау ауылынан Ф. М. Ғәлиәхмәтова яҙып алып тапшырған.— Шунда уҡ, № 28.

39. **Батырың булһа, ебәреп ҡара.**— **ФСФ.**

40. **Ат алыштырыу.** —1979 йылда Дыуан р-ны Өлкөндө ауылында Ханова Хәкимә Абдрафиҡ ҡыҙынан (1910) Л. Биккузина, М. Ҡолмөхәмәтова яҙып алған.— Шунда уҡ, № 29 а.

41. **Күрәҙәсе уйыны.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 29 б.

42. **Алырым ҡош.**—1992 йылда Белорет р-ны Шығай ауылында Р. Солтангәрәева яҙып алған.

43. **Арпа тапау.**—1979 йылда Дыуан р-ны Өлкөндө ауылында Сираева Кәримә Сәфәрғәле ҡыҙынан (1905) М. Мырҙагәрәева, Р. Йомағолова яҙып алған.— Шунда уҡ, № 30.

44. **Ҡул йүгереш.**—1985 йылда Ҡурған өлкәһе Сафакүл р-ны Мырҙабай ауылында Ғәйнуллина Ғәлимә Тимергәзе ҡыҙынан (1931) Резида Байсурина менән Лира Ғүмәрова яҙып алған.— **БӘФК ФФ** —205, 14-се бүлек, № 31.

45. **Булдыҡһыҙ.**—1989 йылда Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ р-ны Ырыҫҡол ауылы Һыртланова Мәғфүрә Сабит ҡыҙынан Рөстәм Рәжәпов менән Артур Дәүләтбәков яҙып алған.—**БӘФК ФФ** — 205, 16-сы бүлек, № 123.

46. **Кәзәлей.**— 1984 йылда Нуриман р-ны Иҫке Күл ауылында Хәйретдинова Асия Ғилметдин ҡыҙынан Марсел Искәндәр яҙып алған.— **БӘФК ФФ** —205, 14-се бүлек, № 31а.

## ЙЫРЛЫ, БЕЙЕҮЛЕ УЙЫНДАР

1. **Тирмә-тау риттәйем.**—1990 йылда Ғафури р-ны Сәйетбаба ауылы уҡытыусыһы Х. Хәбибуллин яҙып ебәргән. //Йәшлек. —1990.—5 июнь.

2. **Тауға сығыу.** —1989 йылда Дәүләкән р-ны Ҡаҙанғол ауылы Сафуанова Сибәрбикә Күсемхан ҡыҙынан (1906) Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ.**

3. **Өс йыр уйыны.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ.— ФСФ.

4. **Айҙар уйыны.**—1989 йылда Дәүләкән р-ны Горчаки ауылы Галина Миңһылыу Миңлегәрәй ҡыҙынан (1924) Р. Солтангәрәева яҙып алған.— ФСФ.

5. **Айҙар гизайым.** — ФСФ.

6. **Йәшелсә уйыны.**—1989 йылда Дәүләкән р-ны Яңы Яппар ауылында Сафиуллина Мәүлиха Зарифа ҡыҙынан (1926) Р. Солтангәрәева яҙып алған.— ФСФ.

7. **Сәриә уйыны.**—1989 йылда Дәүләкән р-ны Буранғол ауылында Ҡорбанғалиева Зәһирә Хажиәхмәт ҡыҙынан (1934) Р. Солтангәрәева яҙып алған.—ФСФ.

8. **Парлы уйыны.** — ФСФ.

9. **Киндер туҡмау.** —1982 йылда Балаҡатай р-ны Билән ауылында Р. Солтангәрәева яҙып алған.

10. **Тула баҫыу.** А.—1957 йылда Ейәнсура р-ны Абзан ауылы йәштәренән Камил Яйыҡбаев яҙып алған.— БӘФК ФФ — 61, 168-169-сы б., Б. 1954 йылда Ейәнсура р-ны Мөхәмәтйән ауылы йәштәренән Г. Кәримова яҙып алған.— БӘФК ФФ —61, 170-се б., В.— ФСФ.

11. **Тула таҡмаҡтары.** А.—1987 йылда Ғафури р-ны Толпар ауылы Вәлиева Вазифанан (1942); Б,—Фәхретдинова Хәмиҙәнән (1924) А. Шәмсетдинов яҙып алған.—БӘФК ФФ —205, 14-се бүлек, № 3.

12. **Таҡмаҡ әйтешеп, ҡара-ҡаршы бейеү.**— ФСФ.

13. **Йүккәгүр.**— 1990 йылда Учалы р-ны Ҡалҡан ауылы инәйҙәренән Р. Солтангәрәева яҙып алған.— ФСФ.

14. **Станок.**—1954 йылда Ейәнсура р-ны Мөхәмәтйән ауылы йәштәренән Г. Кәримова яҙып алған.— БӘФК ФФ — 61, 172-се б.

15. **Удар уйыны.**—1985 йылда Ҡурған өлкәһе Сафакүл р-ны Баҡай ауылында Сәғҙиева Хәтимә Зәһидулла ҡыҙынан (1918) М. Ибраһимова менән Д. Фәйзуллина яҙып алған.— БӘФК ФФ —198, 522-се б.

16. **Балыҡ бейеүе.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ,— БӘФК ФФ —198, 522-се б.

17. **Әйҙәр уйыны.**—1983 йылда Белорет р-ны Мулдаҡай ауылынан Фәниә Әминева тапшырған.— БӘФК ФФ —205, 14-се бүлек, № 7.

18. **Жим-жим-зимәни.**—1985 йылда Ҡурған өлкәһе Сафакүл р-ны Абылтай ауылында Н. Т. Ғәлимйәнованан (1940) З. Ҡаҙаҡбаева, Г. Жданова яҙып алған.— БӘФК ФФ —198, 270-се б.

19. **Әйелмә-бөгөлмә уйыны.**—1985 йылда Ҡурған өлкәһе Сафакүл р-ны Аҙналы ауылы Кәримова-Бикҡолова Рәфиҡә Мостафа ҡыҙынан (1928) Ә. Сөләймәнов яҙып алған.— БӘФК ФФ —205, 15-се бүлек, № 1.

20. **Ағыстакан.**—1985 йылда Ҡурған өлкәһе Сафакүл р-ны Арҫлан ауылында Ибраһимова Ғәлиә Солтан ҡыҙынан (1924) Р. Байсурина, Л. Ғүмәрова, Г. Солтанова, Г. Шәрипова яҙып алған.— БӘФК ФФ —198, 103—105-се бб.

21. **Гөлнәзирә.**— 1985 йылда Ҡурған өлкәһе Сафакүл р-ны Мырҙабай ауылында Ғәйнуллина Ғәлимә Тимерғазы ҡыҙынан (1931) Р. И. Байсурина, Л. Ғүмәрова, Г. Солтанова яҙып алған.— БӘФК ФФ —198, 105—106-сы б.

22. **Наза.** А.—1954 йылда Ейәнсура р-ны Байдәүләт, Ибрай, Муйнаҡ, Ҡарағай-Нуғай ауылдары йәштәренән Г. Кәримова яҙып алған.— БӘФК ФФ —61, 171-се б.; Б.—1975 йылда Баймаҡ р-ны Абдрахман ауылында Мәрйәм Дәүләтбаева яҙып алған. — БӘФК ФФ —1, 175-177-се б.; В.—1986 йылда Баймаҡ р-ны Буранғол ауылында И. Н. Байрамғолов яҙып алған.— БӘФК ФФ —205, 14-се бүлек, № 16; Г.— Дәүләкән р-ны Горчаки ауылында Галина Миңһылыуҙан (1924) һәм Ҡоръятмаҫ ауылы Низаметдинова Сара Ноғоман ҡыҙынан (1923) Р. Солтангәрәева яҙып алған.— ФСФ.

23. **Ғына ла.**— 1995 йылда Салауат р-ны Лағыр ауылы Ғимранова Фәйхүнә Шакир ҡыҙынан (1930) Р. Солтангәрәева яҙып алған.

24. **Сылбыр.А.**—1975 йылда Баймаҡ р-ны Абдрахман ауылынан И. Н. Байрамғолов яҙып алып ебәргән.— **БӘФК ФФ** — 1,177—178-се б; Б.— **ФСФ.**

25. **Марш уйыны.**— 1986 йылда Учалы р-ны Аҡкужа ауылында Сәйғәфәрова Сәкинәнән (1905) Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ.**

26. **Нагу-нагу бейеүе.**— 1994 йылда Стәрлебаш р-ны Ибрай ауылында Яҡупова Хәлимә Исмәғил ҡыҙынан (1917) Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ.**

27. **Әлләрәлем, жәлиә.**— 1995 йылда Салауат р-ны Лағыр ауылында Салахова Нажиә инәйҙән Р. Солтангәрәева яҙып алған.

28. **Зил-зил, Зиләйлүк.**— 1992 йылда Күгәрсен р-ны Бикес ауылында Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ.**

29. **Кәриә-Закария** (Зәкәриә).—1986 йылда Учалы р-ны Аҡкужа ауылында Сәйғәфәрова Сәкинәнән (1905) Р. Солтангәрәева яҙып алған.

30. **Дөп-дөп-дөмәнит.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ,— **ФСФ.**

31. **Өйрөлөү.**— «Тальян гармун» байрамында (Өфө, 1987) Ә. Сөләймәнов яҙып алған.

32. **Круг уйыны.**—1958 йылда Баймаҡ р-ны Алғаҙы ауылында А. Нурдәүләтова яҙып алған.—**БӘФК ФФ** — 62, 276-280-се б.

33. **Круг йәки Зилем уйыны.**—1960 йылда Баймаҡ р-ны Билал ауылында яҙып алынған.— **БӘФК ФФ** —61, 180—183-сө б.

34. **Шлапур.**— 1992 йылда Учалы р-ны Илсе ауылы Буҙыкаева Мәмдүҙәнән Р. Солтангәрәева яҙып алған.

35. **Косилка-молотилка.**—1987 йылда «Тальян гармун» байрамында Әбйәлил р-ның фольклор коллективы башҡарыуынан Р. Солтангәрәева яҙып алған.— **ФСФ.**

36. **Түңәрәк уйыны.**— 1984 йылда Иглин р-ны Тау-Ҡәмбрәк (*Урта Ләмәҙ*) ауылы балаларынан Марсел Искәндәр яҙып алған.— **БӘФК ФФ** — 199, 125-се б.

37. **Дөйөм түңәрәк уйыны.— ФСФ.**

38. **Оло майҙан уйыны.— ФСФ.**

39. **Күпер.** —1958 йылда Хәйбулла р-ны Аҡъегет ауылы йәштәренән В. К. Ғилманова яҙып алған.— **БӘФК ФФ** —205, 14-се бүлек, № 26.

40. **Ҡарабай** (йәки «Комсомол») **уйыны.** — Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 28.

41. **Өс таған.**—1958 йылда Баймаҡ р-ны Алғаҙы ауылы йәштәренән А. Нурдәүләтова яҙып алған.— **БӘФК ФФ** — 62, 280-се б.

42. **Дүрт таған.—ФСФ.**

43. **Үрҙәк сумышыу.**—1984 йылда Нуриман р-ны Иҫке Күл ауылында Хәйретдинова Асия Ғилметдин ҡыҙынан (1916) Марсел Искәндәр яҙып алған.— **БӘФК ФФ** — 205, 14-се бүлек, № 30.

44. **Быҙыбыт уйындары.**—1987 йылда Ғафури р-ны Толпар ауылында Ғәйнетдинова Фәниәнән (1928) А. Шаммасов яҙып алған.— Шунда уҡ, № 33.

45. «Хөрриәт» уйыны.— 1989 йылда Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ р-ны Рысай ауылында Рысаев Кәлимулланан (1909) Айрат Сирбаев, Рәмзит Әбүләев яҙып алған.— **БӘФК ФФ** —205, 15-се бүлек, № 100.

46. **Ал таҫма уйыны.**—1989 йылда Ишембай р-ны Ғүмәр ауылында Мәксүтова Хәлимәнән З. Кәримова яҙып алған.— **БӘФК ФФ.**—205, 15 -се бүлек, № 64.

47. **Бәпес ауылы уйыны.**—1990 йылда Ҡырмыҫҡалы р-ны Бәпес ауылында Хәсәнов Ниғмәтулла Абдулла улынан (1912) Айҙар Раҡаев яҙып алған.— **БӘФК ФФ**—205, 15 -се бүлек, № 131.

48. **Һай, тuғай, тuғай, тuғай уйыны.**—1963 йылда Свердловск өлкәһе Әртә р-ны Араҡай ауылында Салауат Галин яҙып алған.— ҒА, һ/б. 21/1.—493—495-се б.

49. **Камбы дөбөтө** (Круг көйө).—1972 йылда яҙып алынған.— FA, һ/б. 65/8.— 227-се б.

50. Әйтешеп күмәк бейеү.— 1987 йылда Ғафури р-ны Толпар ауылында Ғәйнетдинова Ғәйниәнән (1928) А. Шаммасов яҙып алған.— БӘФК ФФ — 205, 14-се бүлек, № 5.

51. **Ҡулъяулыҡ уйыны.**— Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 36.

52. **Ҡара-ҡаршы.**— Паспорты, сығанағы шул уҡ, № 37.

53. **Киске уйындарҙа егеттәр, ҡыҙҙар ҡара-ҡаршы әйтешә торған таҡмаҡтар.** —1982 йылда Баймаҡ р-ны Шүлкә ауылы Р. Түләков яҙып алған.— Шунда уҡ, № 38.

54. **Ғәли-Ғәли-Ғәли-Ғәли-ғәләрәм генә.**—1958 йылда Хәйбулла р-ны Аҡъегет ауылы йәштәренән В. К. Ғилманова яҙып алған.— БӘФК ФФ—62,265—268-се б.

55. **Ғәли, Ғәли, Ғәләр әле.**—1987 йылда Ишембай р-ны Әптек ауылында Таһирова Әсҡәпъямал Шәфиғулла ҡыҙынан Л. Мырҙағәлина яҙып алған. — БӘФК ФФ.—62.

56. **Дим, Дим, Дим буйы, ҡала Ағиҙел буйы.** А., Б.—1958 йылда Хәйбулла р-ны Аҡъегет ауылында В. К. Ғилманова яҙып алған.— БӘФК ФФ—62,268—274-се б.

57. **Сания апай таҡмаҡтары.**— 1986 йылда Баймаҡ р-ны I Эткол ауылында Байгилдина Алмабикәнән (1933) С. Мостафина яҙып алған. — Шунда уҡ, № 43.

58. **Бейеү таҡмаҡтары.** —ФСФ.

59. **Уйын таҡмаҡтары.** А.—1978 йылда Һаҡмар буйы башҡорттарынан М. Үтәбаев яҙып алған.— БӘФК ФФ—62, № 44; Б.—1993 йылда Пермь өлкәһе Барҙа р-ны Төнгүк ауылында Маматова Гөлфиәнән (1950) Нигмәт Шоңҡаров яҙып алған,— FA, һ/б. 32/1.—492-се б.

60. **Киске уйында әйтелә торған таҡмазалар.** А.-1989 йылда Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ р-ны Буранғол ауылында Буранбаева Гөлбәғиҙәнән (1915); Б.— Тоҡомбәтова Мәфтүхәнән (1930) Р. Кинйәбаев, Г. Сираева, Л. Сөйәрембәтова, А. Закирова яҙып алған.— БӘФК ФФ—205, 15-се бүлек, № 60; В.—1989 йылда Нуриман р-ны Ишморат ауылынан Ләйлә Сафина тапшырған.— БӘФК ФФ—205, 15-се бүлек, № 61; Г.—1963 йылда Пермь өлкәһе Уса р-ны Баҡса ауылында йәшәүсе Ғ. Юлдашбаеваның (1944) иҫтәлек дәфтәренән Әнүр Вахитов күсереп алған.— FA, һ/б, 65/8.—426—497-се б.

61. **Ай яҡтырта.** — Зәнүфә Ғарифуллина яҙып алған //Йәшлек.—1990.—6 декабрь.

62. **Әләилә.**— ФСФ.

## ЙЫЙЫНТЫҠҠА ИНГӘН КӨЙҘӘРҘЕҢ ЯҘЫП АЛЫНЫУ ВАҠЫТЫ ҺӘМ УРЫНЫ[1]

### АУЛАҠ ӨЙ ҺӘМ ЯҢЫ ЙОЛАЛАР

1. **Ҡыҙҙар уйыны.** (1986 йылда Учалы, 1991 йылда Баймаҡ районында.)

### СӘМЛЕ, МӘРӘКӘ УЙЫНДАР

21. **Йәшерәм яулыҡ.** (1986 йылда Учалы, 1993 йылда Әбйәлил р-нда.)

28. **Алтын ашыҡ.** (1991 йылда Ейәнсура р-нда.)

### ЙЫРЛЫ, БЕЙЕҮЛЕ УЙЫНДАР

4. **Айҙар һәм 7. Сәриә уйындары.** (1989, 1994 йылдарҙа Дәүләкән, Миәкә, Ауырғазы р-нда.)

10. **Тула баҫыу.** (1991 йылда Мәсетле р-нда, 1994 йылда Белорет ҡалаһында.)

11. **Их, тула.** (Тула таҡмаҡтары.) (1992 йылда Дәүләкән, 1993 йылда Йылайыр, 1994 йылда Ауырғазы р-нда.)

13. **Йүккәкүр.** (1987 йылда Учалы ҡалаһында.)

22. **Наза.** (1987 йылда Әлшәй, Дәүләкән, 1993 йылда Миәкә, 1992 йылда Хәйбулла, 1994 йылда Ауырғазы р-нда.)

26. **Нагу-Нагу.** (1994 йылда Стәрлебаш р-нда.)

28. **Зил-Зил, Зиләйлүк.** (1992 йылда Күгәрсен р-нда.)

29. **Кәриә-Зәкәриә.** (1992 йылда Ейәнсура, 1986 йылда Учалы, 1995 йылда Мәләүез райондарында.)

**Кәриә-Зәкәриә.** [2] (1989 йылда Дәүләкән, 1992 йылда Әлшәй, Ауырғазы р-нда.)

**Кәриә.** [2] (1989 йылда Дәүләкән, Миәкә р-нда.)

30. **Дөп-дөп, дөмәнит.** (1986 йылда Учалы р-нда.)

34. **Шлапур.** (1993 йылда Учалы р-нда, шулай уҡ 1994 йылда Л. Сәлмәнова тарафынан да ошо районда яҙып алынған.)

35. **Косилка-молотилка.** (1985 йылда Дәүләкән, 1989 йылда Миәкә, 1990 йылда Учалы, 1993 йылда Әбйәлил райондарында.)

36. **Түңәрәк уйыны.** (1992 йылда Салауат ҡалаһында, 1993 йылда Ишембай р-нда.)

39. **Күпер.** (1991 йылда Ейәнсура, 1993 йылда Йылайыр райондарында.)

---

[1] Көйҙәрҙе нотаға һалыусы, «Йүккәкүр», «Наза» уйындарының көйҙәрен яҙып алыусы Л. Сәлмәнова, ә ҡалғандарын Р. Солтангәрәева яҙып алған.

[2] Кәриә-Зәкәриә таҡмаҡтарының йырлау варианттары.



— 50083 —

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Уйын — уйын түгел (Р. Ә. Солтангәрәева.) . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Аулаҡ өй һәм яңы йолалар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 9
Сәмле, мәрәкә уйындар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 23
Йырлы, бейеүле уйындар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 43
Ҡыҫҡартмалар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 110
Информаторҙар, яҙып алыусылар һәм сығанаҡтар күрһәткесе . . . . . . . . 111
Йыйынтыҡҡа ингән көйҙәрҙең яҙып алыныу ваҡыты һәм урыны . . . . . . . 117




**СУЛТАНГАРЕЕВА** Розалия Асфандияровна
**СУЛЕЙМАНОВ** Ахмет Мухаметвалеевич

**БАШКИРСКИЕ НАРОДНЫЕ ОБРЯДОВЫЕ ИГРЫ**

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Р. Сәйетбатталов*
Рәссамы *В. Зубарева*
Нота яҙыусыһы *З. Әхтәмйәнова*
Техник мөхәррире *Н. Зарипова*

Наборға бирелде 06.06.96. Баҫырға ҡул ҡуйылды 15.04.97. Ҡағыҙ форматы $60\times90^1/_{16}$. Офсет ысулы менән баҫылды. Китап-журнал ҡағыҙы. Шартлы баҫма таб. 7,5. Тиражы 2000 дана. Заказ № 1118.

Өфө полиграфия комбинаты.
450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.

Новая цена
20 р 00 к

